ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4
май - июнь
(һабанай - һөтай)

2021

№22 (960)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тәбиғәттән килем алаһыңмы?**

Артынан таҙартырға онотма!



5

**Ырыуыбыҙ - башҡорт байлары**



7

**Бөгөн ниндәй һөнәр модала -**



был һорауға яуапты ошо әңгәмәлә тап!

8-9

**Рус теле уҡыттым,**

дәрестәремдә башҡорт теленә лә һөйөү тәрбиәләнем



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Республикалағы биләмәләр, ауылдар, ер-һыу атамаларының хаталы йә тик русса ғына яҙылышы күптән килгән проблема. Ләкин һуңғы ваҡытта йәмәғәтселек уның етди бер бәләгә торошло булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм быйылғы Башҡорт тарихы йылында был мәсьәләнең бар кимәлдә иғтибар үҙәгенә эләгеп, һәр кем үҙ ҡулынан килгәнсә уны төҙәтеүгә тотонһон ине, тигән фекер белдерә. Ошо турала һеҙ ни уйлайһығыҙ?***

***Инбер ЯПАРОВ, география фәндәре кандидаты, БДУ доценты:*** Үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, ошоға тиклем республиканың һәр район, ҡала исемдәре, ауылдар атамалары төрлө рәүештә, йәки кем нисек булдыра, шулай тигәнсәрәк яҙып ҡуйыла ине. Яңыраҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо мәсьәләне күтәреп, район, ҡала исемдәрен берҙәм стилдә башҡарыу кәрәклеген белдерҙе һәм бер нисә районда, мәҫәлән, Саҡмағош, Яңауыл, Балтас, Кушнеренко, Туймазы, Йәрмәкәй, Баҡалы һәм башҡа райондарға ингән ерҙә яңы стела конструкциялары урынлаштырылды. Ҡайһыларында хатта район исеме менән бергә ошо биләмәлә йәшәүсе халыҡтың ниндәй ырыуға ҡарауы хаҡында мәғлүмәт тә яҙылды. Был эш башҡа райондарҙа ла дауам ителер, моғайын.

Дөрөҫ, заманса алтаҡталар һәр бер тораҡ пунктының визит карточкаһы, ниндәйҙер кимәлдә уның йөҙөн дә билдәләүсе күрһәткес ул. Шуға күрә ауылдар атамалары ла тәртипкә килтерелергә тейештер, моғайын. Ләкин бының өсөн ауылдарыбыҙҙың атамалары башта орфографик, мәғәнәүи йәһәттән һәм этнонимы буйынса тикшерелеп, дөрөҫләнеп сығырға тейеш, тип уйлайым, сөнки уларҙың яҙылыштарында хаталар бик күп осрай. Икенсенән, үҙегеҙ әйтмешләй, ҡайһы бер алтаҡталарҙа ауылдарҙың фәҡәт русса исемдәре генә ҡалып килә. Былар бөтәһе лә туған телгә мөнәсәбәтте, урындарҙа ерле топонимиканы, ауылдарҙың тарихын белмәү хаҡында һөйләй. Мәҫәлән, Краснокама районында Ташкиново тигән бер ауыл бар, уның башҡортсаһын Ташкин ауылы тип яҙып ҡуялар. Ауыл тарихына күҙ һалһаң, был тораҡ пунктына нигеҙ һалған кешенең фамилияһы икән. Тимәк, ауылдың башҡортса дөрөҫ атамаһы Ташкинов булып сыға. Унан һуң Шишмә районындағы Үрге, Урта, Түбәнге Хәжәт тигән ауылдарҙың дөрөҫ яҙылышы Хәжәт түгел, ә Хажиәт була икән. Ауырғазы районындағы Өсбәлеш ауылын ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Уның дөрөҫ атамаһы Өсбелеш тигән феккер әйтеләр. Бындай миҫалдар байтаҡ һәм был мәсьәләләр менән энциклопедияға материалдар әҙерләгәндә күп шөғөлләнергә, айына хатта икешәр тапҡыр Топонимия комиссияһы ултырышын саҡырырға тура килә ине. Ауыл исемдәрен матур итеп юл күрһәткестәренә, алтаҡталарға яҙып ҡуйыр өсөн, башта әйткәнемсә, иң тәүҙә уларҙың дөрөҫлөгөн тикшереп сығырға кәрәк. Был мәсьәләләр менән БР Хөкүмәте ҡарамағындағы "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы законды бойомға ашырыу буйынса булдырылған махсус Комиссия шөғөлләнергә тейеш. Был хаҡтағы Указда әйтелеүенсә, әлеге Комиссия терминология һәм топонимия хеҙмәттәре эшмәкәрлеген тейешле контролдә тоторға бурыслы. Өҫтәүенә, был мәсьәләләр менән урындарҙа ныҡлап шөғөлләнергә тейешле яуаплы кешеләр һәр муниципаль район һәм ҡалалар хакимиәттәрендә лә бар, тик улар ниңә үҙ бурыстарын онота икән һуң? Ауылдарҙың русса атамалары менән бергә башҡортса исемдәрен дә күрһәтеү мотлаҡ, был ҡағиҙәне бер кем дә юҡҡа сығарғаны юҡ әле.

## КӨН ВАҠИҒАҺЫ

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ

**Байрамдарға бай майҙың был аҙнаһында уҡыусы балалар тормошондағы иң күркәм ваҡиғаларҙың береһе - Һуңғы ҡыңғырау байрамы уҙҙы. Ул белем усаҡтарында бөтә эпидемиологик талаптарҙы үтәп ойошторолдо.**



12+

*(Дауамы 2-се биттә)*

*КӨН ВАҠИҒАҺЫ*



# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ

**(Башы 1-се биттә).**

Быйыл Башҡортостандың ҡала һәм райондарында барлығы 18 651 ун беренсе синыф уҡыусыһы һәм 42 243 туғыҙынсылар мәктәп тамамланы. Улар өсөн быйыл да "Яҙғы бал" кеүек күп кешеләр ҡатнашлығындағы дөйөм саралар ойошторолманы. Хатта һуңғы ҡыңғырау сыңын ишетеп, балаһын тәбриклəү форсаты ла тик коронавирустан вакцина эшләтеүе тураһында йәки антиматдәләре барлығын раҫлаған белешмәләре булған ата-әсәләргә генә татыны. Әммә һәр белем усағы ҡәҙерле сығарылыш уҡыусылары өсөн матур байрам кәйефе тыуҙырырға тырышты һәм күптәр сараларҙы мәктәп эргәһендәге асыҡ һауала үткәрҙе.

Өфөлә лә балалар үҙҙәре әҙерләгән йыр-бейеү, шиғри күстәнәстәрҙән торған күркәм тамашалар төш уҙғансы тирә-яҡҡа яңғырап ишетелеп торҙо. Баш ҡаланың 10 меңдән ашыу 9-сы һәм 5 меңдән ашыу 11-се синыф уҡыусылары өсөн генә түгел, быларҙы күрмәһә лә ишетеп торған баш ҡала халҡының да күңеленә тәьсир итмәй ҡалманы бай йөкмәткеле был тантаналар. Кемдәр ситтән генә булһа ла ҡарап, балаларҙың елкенеп вальс бейеүен, моңло йырҙар, аһәңле шиғырҙар башҡарыуын күҙәтте. Ә уҡыусылар үҙҙәре был байрамды тулҡынланып көтөп алыуы, уны үткәрмәй ҡуймаһындар тип борсолоуы хаҡында һөйләне. Әйткәндәй, Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында быйыл барлығы 119 сығарылыш уҡыусыһы, шуларҙың 74-е - ун беренселәр. Ә бына М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейында улар - 52 кеше. Баш ҡаланың М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында 82 уҡыусы 9-сы синыфты, 79-ы ун беренсене, ә Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһында 111 бала туғыҙынсыны һәм 34 уҡыусы ун беренсене тамамлаған. Әйткәндәй, Өфөләге 162-се "Смарт" полилингваль күп профилле мәктәп быйыл тәүге 68 "көшсоғон" үҙаллы тормошҡа оҙатты, уларҙың 34-е - 11-се синыфтар.

Бына шулай күркәм саралар бер көн эсендә гөрләп үтеп тә китте. Хәҙер туғыҙынсыларға Төп дәүләт имтиханын, ә 11-се синыфты тамамлаусыларға Берҙәм дәүләт имтиханын тапшыраһы ҡалды. Әйткәндәй, һуңғыһы быйыл 31 майҙан 2 июлгә тиклем белемен тик юғары уҡыу йорттарында дауам итергә теләүселәр өсөн генә үткәрелә, башҡалар математика һәм рус теленән дәүләт сығарылыш имтихандарын тапшырасаҡ. Быйыл Башҡортостанда йәмғеһе 19 347 кеше БДИ тапшыра, шуларҙың 17 814-е быйылғы сығарылыш уҡыусылары, 184-е колледж студенттары, 9-ы унынсы синыф уҡыусыһы. Статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, быйыл рус телен һайлаусылар иң күбе - 18 455 кеше, профиль математиканы 11 165 һәм йәмғиәтте өйрәнеүҙе 6 920 уҡыусы һайлаған.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*БЫЛ АЙҘА...*

# ЯМҒЫР КӨТКӘНДӘ...



**Ҡараҡом бушлығынан килгән антициклон оҙаҡ ҡунаҡланы майҙа. Муйыл, алмағас, сирендәр сәскә атҡан мәлгә төбәп көтөлгән ғәҙәттәгесә һалҡын көндәргә ымһыныуҙар аҡланманы шуға ла. Рәсәйҙең Үҙәк төбәктәрендә ҡомлоҡтоң эҫе, ҡайнар һауаһы рекорд күрһәткескә етеп, плюс 30 градустан юғарыраҡ үрләне.**

Бындай ғәҙәттән тыш хәлдән һуң июндең нисек килерен дә фаразлап булмай. Рус география йәмғиәте метеорологы, география фәндәре кандидаты Екатерина Пестрякова фекеренсә, әгәр "әрһеҙ ҡунаҡ" - антициклон беҙҙән китергә уйламаһа, быйылғы йәйҙең короллоҡҡа тартыры хәүефләндерә. Ләкин башҡа синоптиктар оптимистик күҙаллай: июнда һауа температураһының бер аҙ түбәнәйеүенә һәм аҙмы-күпме яуым-төшөмгә лә хатта өмөт итә улар. Шулай була күрһен! Ҡәҙимгесә килгән йылдарҙа һутлы үләнгә туйына алмаған һәүкәштәргә мул булып һөт төшә был айҙа. Малсылыҡ менән көн күргән халҡыбыҙ белмәйенсә уны һөтай тип әйтмәгәндер. Айҙың тәүге көнө лә бит шуға күрәлер ҙә Һөт көнө **(1)**. Уңған хужабикәләр (әйткәндәй, был осорҙа Халыҡ-ара йорт хужаһы һәм хужабикәләр көнө **(8)** лә билдәләнә) гөбөрләтеп биҙрә-биҙрә һөт һауа һәм иң һыҙғанып ошо аҡтан-аҡ бәрәкәтте эшкәртә: ҡаймаҡ айырта, ҡатыҡ ойота, ҡорот ҡайната, эремсек эшләй, май таҫҡай... Ошо бәрәкәтте биреүсе йәш үлән дәррәү күтәрелеп китһен һәм, ғөмүмән, иген-бесән мул булһын өсөн тап һөтайҙа шифалы ямғыр кәрәк. Бында ла халыҡ зирәклеге, уның күҙәтеүсәнлеге хайран итә. "Жәүзә етмәй, йәй булмай" (жәүзә Ҡояш календары буйынса 22 майҙан 20 июнгә тиклем), "Ильин көндә ямғыр яуһа, илле көн яуыр" (Ильин көн боронғо урыҫ календарынан килеп инган, иҫке стиль менән 20 июнь) тигән һынамыштар башҡорттарҙың мәғлүмәтлелеге, башҡа халыҡтар ырымын да яҡшы белеүе хаҡында һөйләй.

Ә бына ямғыр көткәндә ниндәй һынамыштарға иғтибар иткән халыҡ? Ундай күҙәтеүҙәр бик күп һәм бөгөн, тәбиғи баланс боҙолған замандa ла уларҙың күбеһе раҫ килә. Ҡарлуғас түбән оса (йәки уйнаҡлап оса), ямғыр яуа; умарта ҡорто шаулаһа, ҡырмыҫҡа ҡанатланһа, эт аунаһа (йәки һыу эсһә) - ямғырға; ҡояш байығас, әтәс ҡысҡырһа - аяҙға һәм башҡалар. Ҡайһы берәүҙәр мәрәкәгә һабышты-рып, ошондай һынамыштарҙан көлөргә маташа, ләкин йылдар буйы йәшәп килгән халыҡ "прогноздары" күп осраҡта әле лә раҫлана. Ә инде ҡайһы саҡ уларҙың дөрөҫкә сыҡмауы - замана бәләһе: элекке тәбиғәт-һауа торошондағы гармонияның боҙолоуында халыҡ күҙаллауҙарының ғәйебе юҡ. Ай баштарында бер үк датаға тура килгән Халыҡ-ара эколог көнө менән Бөтөн донъя тирә-яҡ мөхитте һаҡлау көндәре **(5)** экология проблемалары хаҡында йыл һайын күп һөйләнә, яҙ-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***Республикалағы биләмәләр, ауылдар, ер-һыу атамаларының хаталы йә тик русса ғына яҙылышы күптән килгән проблема. Ләкин һуңғы ваҡытта йәмәғәтселек уның етди бер бәләгә торошло булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм быйылғы Башҡорт тарихы йылында был мәсьәләнең бар кимәлдә иғтибар үҙҙгенә әләгеп, һәр кем үҙ ҡулынан килгәнсә уны төҙәтеүгә тотонһон ине, тигән фекер белдерә. Ошо турала һеҙ ни уйлайһығыҙ?***

***Тамара СӘЛИХОВА, уҡытыусы, Мәләүез районы:*** Һәр атама - үҙе бер хәтер, ти билдәле ғалим Рәшит Шәкүр. Хаҡ һүҙҙәр. Шуға ла беҙгә ер-һыу атамаларыбыҙға бик һаҡсыл һәм аҡыл менән ҡарарға кәрәк. Быйылғы Башҡорт тарихы йылында тарихи Башҡортостан топонимияһын тергеҙеү, хаталыларын дөрөҫләү мәсьәләһенә лә иғтибар бирелер тип уйлайым. Беҙҙең ер-һыу атамаларыбыҙ бик күп тарих һөйләй. Шуға күрә уларҙы алмаштырыуға юл ҡуйырға ярамай. Мәсәлән, йыш ҡына Яҡтыкүл - Банное, Шүлгәнташ мәмерйәһе Капова булып йөрөй. Интернет селтәрендә Мәләүез атамаһын, мәсәлән, бына нисек итеп аңлаталар: йәнәһе, был тарафҡа ер эҙләп сыуаштар килеп сыға ла мул һыулы йылға буйын оҡшатып, "мелевеси" йәки, килеп еттек, тиҙәр. Ауылға нигеҙ һалғас, уны Мәләвес - Мәләүез тип атайҙар, имеш... Кемдәндер наҙан башында тыуған был фекер тиҫтәләгән йыл буйына рәсми версия булып йөрөнө. Бер кем дә оҡшаш атама менән Башҡортостанда тағы алты йылға, Шаран районында күл аталғаны менән ҡыҙыҡһынманы ла. Әйткәндәй, ул йылға-күл буйҙарын тамъян башҡорттары һыулауы, атама ошо ырыу һүҙе булыуы үрҙә әйтелгән атама вариантын уйлап табыусыларҙы бер ҙә һағаймай. Ошо уҡ версияны Башҡортостан топонимикаһы һүҙлеген төҙөүселәр ҙә ҡәләм осона ала.

Гәзит уҡыусы башҡорт тарихын ер-һыу атамалары аша ла өйрәнергә кәрәклеген тәҡдим итергә уйлағанымды аңлағандыр инде. Мәләүез районы башҡорттары ҡоролтайы быйыл халыҡҡа биләмәбеҙҙәге ер-һыу исемдәрен ныҡлап өйрәнеү, уларға бәйле хәл-ваҡиғаларҙы асыҡлау, халыҡ хәтерендәге риүәйәттәрҙе яҙып алыу, тел, топонимика, фольклор менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың эшен әүҙемләштереү тәҡдиме менән сығыш яһағайны. Бик ваҡытлы саҡырыу булды был. Бына ошо эште йыл аҙағына тиклем дәррәү генә алып барырға, гәзит биттәрендә сығарырға, һуңынан белгестәр тарафынан тейешле рәсми баһа бирергә кәрәк. Үрҙә билдәләп үтелгән район үҙәге Мәләүез атамаһына ла фәнни яҡтан баһа бирергә ваҡыттыр бит...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Илдә билдәле экспозицияларҙың береһе - "Газ. Нефть. Технологиялар" халыҡ-ара күргәҙмәһе Башҡортостандың баш ҡалаһында 29-сы тапҡыр үткәрелә һәм бөгөн йәнә тармаҡтың төп компанияларын бергә йыйҙы. Тантана башланыр алдынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров нефть-газ тармағында файҙаланылған яңы техника һәм ҡорамал өлгөләрен ҡарап сыҡты. Күләмле экспозицияла илдең 31 төбәгенән 260-тан ашыу компания яңы технологиялар, ҡорамалдар, хеҙмәттәр менән таныштыра.

✔Республика етәксеһе Башҡортостан сода компанияһының "Эколь" предприятиеһында кер йыуыу порошоктары һәм башҡа йыуыу саралары етештереү эшенә старт бирҙе. Синтетик йыуыу сараларының проект ҡеүәте - йылына 60 мең тонна. Предприятиела 120-нән ашыу яңы эш урыны булдырылған. Порошоктар "Зифа" һәм "Луч" брендтары аҫтында билдәле.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" комплексын үҫтереү өсөн йөкләмә әҙерләргә ҡушты. Атап әйткәндә, 2024 йылға тиклем барлыҡ муниципалитеттарҙа ГТО тапшырыу өсөн майҙансыҡтар булдырыла. Республиканың спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, ошо маҡсатҡа төбәк бюджетынан 21,7 миллион һум субсидия бүленгән. "Һәр муниципалитетҡа дөйөм суммаһы 21 741,9 мең һумлыҡ 69 мобиль спорт ҡоралмалы комплекты һатып алынған", - тине ведомство етәксеһе.

✔Башҡортостан Республикаһы менән идара итеү үҙәге тиҙҙән яңы бинала эш башлай, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. Берҙәм платформала төбәк йәшәйешенең бөтә тармаҡтары күрһәтелә. Система дәүләт органдарында һәм урындағы үҙидара органдарында идара итеү сифатын яҡшыртыуға йүнәлтелгән, шулай уҡ ялыуҙарҙы һәм тәҡдимдәрҙе оператив хеҙмәтләндерергә һәм ҡарарҙар ҡабул итергә мөмкинлек бирә.

✔Республиканың Роспотребнадзор идаралығы белгестәре Башҡортостан биләмәһендә ситтә малярия йоҡтороу осрағын теркәгән. Ведомство етәксеһе Анна Казак һүҙҙәренсә, был ир Африка илдәренең береһенән ҡайтҡан. 2021 йылдың мартында Занзибарҙа ял итеп ҡайтҡан тағы бер яҡташыбыҙҙың малярияная вафат булыуы тураһында хәбәр ителгәйне.

ыла, ләкин эш шунан ары китмәй. Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, күҙәтеү буйынса өҫтәренә ҙур яуаплылыҡ алған тәбиғәт һаҡсыларының бөгөн экологияға зыян килтереүсе закон боҙоусыларға бер ҡасан булмағанса аяуһыҙ һәм ҡәтғи язалар биреүен күргe килә.

Тәбиғәт экологияһы ғына борсомай беҙҙе бөгөн. Шул уҡ дәрәжәлә кешеләрҙең рух һәм күңел мөхите, тән һәм йән экологияһы ла көн тәртибенә сыға. Ер йөҙөн баҫып килгән экологик һәләкәттәр: һыу баҫыу, янғын, ҡоролоҡ; социаль бәләләр: һуңғы ваҡыт кеше тарафынан уйлап сығарылған тип таныла барған йоғошло сир, йәмғиәттең ике ҡотоп - байҙар һәм ярлылар айырмаһының бер-береһенән алыҫлаша барыуы, коррупция, туҡтауһыҙ хаҡтар артыуы, эшһеҙлек, енәйәт һәм юл фажиғәләре... Былар барыһы ла кешелә кешелек рухын һындыра, күңелен ҡайтара, депрессия тыуҙыра торған факторҙар. Ошондай шарттарҙа балаларға ниндәй тәрбиә бирергә? Ай календарындағы Балаларҙы яҡлау, Атаәсәләр көндәре **(1)**, Агрессия ҡорбандары - ғәйепһеҙ балаларҙың халыҡ-ара көнө **(4)**, Бөтөн донъя балалар хеҙмәтенә ҡаршы көрәш көнө **(12)**, Халыҡ-ара атайҙар көнө **(20)**, Рәсәй йәштәре көнө **(27)** йәш быуын яҙмышы, уларҙа ышанысты киләсәккә өмөт, Тыуған илгә, әсә телдәренә ихтирам, һөйөү тәрбиәләү һәм сифатлы белем биреү, уларҙың атайәсәйҙе бәхетле бөгөнгөһөн тәьмин итеү мәсьәләләрен ҡуя, шуға күрә был даталарҙың һәр береһе файҙалы итеп билдәләнһен, ҡәҙимге көн кеүек эҙһеҙ генә үтеп китмәһен ине.

Балаларҙы һәм йәштәрҙе үткән һәм бөгөнгө быуындарға лайыҡлы алмаш булырлыҡ итеп, аҡты - ҡаранан, ялғанды - хәҡиҡәттән, бурҙы намыҫлынан айырырҙай дәрәжәлә аңлы, белемле, тәртипле һәм илһөйәр-телһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү ғаилә менән бер кимәлдә мәктәптәрҙең дә бурысы. Рәсәй Президенты Владимир Путин тарих дәреслектәрен юҡҡа ғына тәнҡитләмәне бит. Бөйөк Ватан һуғышының, мәҫәлән, тарихи эҙемтәләре, әһәмиәте хаҡында ҡоро, йөнһеҙ факттар, даталар менән генә балаларға аңлатыу һөҙөмтә бирмәйәсәк, киреһенсә, уларҙа битарафлыҡ тыуҙырыуы ихтимал. Быйыл Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға - 80 йыл. Был дата ни өсөн Хәтер һәм ҡайғы көнө **(22)** тип билдәләнә? Ошо хаҡта һәр ата-әсә балаһына үҙ ғаиләһе тарихынан сығып та күп нәмә аңлата ала. Сөнки бөгөнгө балалар, хатта йәштәр ҙә, тарихтағы иң фажиғәле, ҡот осҡос һуғыш хаҡында бер нәмә лә белмәй, тиерлек. Мәктәптәрҙә иһә тарих дәрестәрен "күңелһеҙ" фәнгә әйләндермәйенсә, һуғыш йылдары документтарын, легендар кинофильмдар, ҡаһарман яугирҙар хаҡында әҫәрҙәр, иҫтәлектәрҙе файҙаланып, йәнле, ҡыҙыҡлы итеп үткәреү -уҡытыусының бурысы. Беҙ уҡыған йылдарҙа мәктәпкә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын саҡыра, уларҙың иҫтәлектәрен ауыҙ асып тыңлай инек. Бөгөн улар бик аҙ ҡалды, күбеһе йөрөй ҙә алмай. Хатта ки һуғышта ятып ҡалған яугирҙарҙың тарих һөйләр тол ҡатындары ла китеп бөтөп бара. Халыҡ-ара тол ҡатындар көнө **(23)** һуғыштың бөтөн тыл ауырлығын үҙ иңдәрендә күтәргән мөнәрләгән ябай ҡатындарға мәҙхиә бағышлау көнө ул. Әйткәндәй, тол ҡатындар бөгөн дә бик күп икән. БМО мәғлүмәттәре буйынса Ер йөҙөндә улар 250 мең! Күптәре балалары менән торол ҡалып, фәҡирлектә көн күрергә мәжбүр, шуға күрә был көн 2011 йылда уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау маҡсатында булдырылған. Ә иң яҡшыһы - бындай көн, ғөмүмән, булмаһын ине...

Был айҙа тағы ла шундай даталар билдәләнә: Бөтөн донъя башҡорттарының **1-се** (1июнь,1995), **2-се** (14 июнь, 2002) һәм **3-сө** (10 июнь, 2010) ҡоролтайҙары асыла; Сәләмәт туҡланыу **(1)** көнө, Рәсәйҙә - Пушкин һәм Рус теле **(6)** көндәре, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты тарафынан башҡорт теле рус теле менән бер рәттән дәүләт теле тип иғлан ителеүгә - 100 йыл **(16 июнь, 1921)**, Социаль хеҙмәткәр, Халыҡ-ара архивтар, Халыҡ-ара дуҫтар **(9)** көндәре, Башҡортостанда Салауат Юлаев **(10-20)** көндәре, Рәсәй көнө, Өфө ҡалаһы көнө **(12)**, Башҡортостан Матбуғат һәм мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре **(14)**, Медицина хеҙмәткәрҙәре **(20)**, Рәсәй йәштәре һәм Балыҡсылар **(27)** көндәре.

**Июндә тыуғандар:**

**3 -** педагог-ғалим, БР Фәндәр академияһы президенты, 2011-2015 йылдарҙа БР мәғариф министры, шағир, драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Әлфис Ғаязовҡа - 65 йәш** (1954).

**4 -** А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы **Зифа Баязитоваға - 70 йәш** (1951).

**10 -** шағир, публицист, йәмәғәт эшмәкәре, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Тимер Ниәтшинға - 75 йәш** (1946).

**12 -** педагог, мәғрифәтсе, 1895-1902 йылдарҙа Сермән рус-башҡорт училищеһы мөдире, "Тырышлығы өсөн" орден кавалеры, милли мәктәптәрҙә алдынғы ысулдар индереүҙе ойоштороусы **Лотфулла Әбделгәзизовтың тыуыуына - 155 йыл** (1866-1913).

**16 -** Башҡорт халҡының милли батыры, шағир-импровизатор **Салауат Юлаевтың тыуған көнө** (1754-1800).

**26 -** прозаик, публицист, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы **Азат Абдуллинға - 90 йәш** (1931).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Республикалағы биләмәләр, ауылдар, ер-һыу атамаларының хаталы йә тик русса ғына яҙылышы күптән килгән проблема. Ләкин һуңғы ваҡытта йәмәғәтселек уның етди бер бәләгә торошло булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм быйылғы Башҡорт тарихы йылында был мәсьәләнең бар кимәлдә иғтибар үҙәгенә эләгеп, һәр кем үҙ ҡулынан килгәнсә уны төҙәтеүгә тотонһон ине, тигән фекер белдерә. Ошо турала һеҙ ни уйлайһығыҙ?***

***Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА, Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән пенсиялағы уҡытыусы:*** Был мәсьәлә буйынса йәнә булған һәр кем борсолалыр. Ер-һыу атамалары - халыҡ хәтере, тарих хәтере, тел ҡомартҡыһы ла. Һәр атамала ата-бабаларҙың һынсыллығы, йорлоғо, тапҡырлығы, көнитмеше, моңо ла сағылыш алған. 2009 йылда бер уҡыусыма ошо темаға эш тәҡдим иттем. Һәр эшкә яуаплы ғына ҡараған уҡыусы булараҡ, баш тартманы, әммә бик үк риза булмағанлығы ла һиҙелә. Бер нисә көндән, ваҡыты етмәүгә һылтанып, эштән баш тартырға ла булды. Өләсәһе йәшәгән ауылдың тирә-яғындағы ер-һыу атамаларының исемлеген төҙөп ҡарауҙан башлап ҡарарға көңөш бирҙем. Бер аҙнанан 76 һүҙҙән торған исемлек килеп ятты алдыма. "Ниндәй матур яңғыраған атамалар бар, бик тырышһаң , бәлки, серҙәре лә асылыр ине", - тип дәртләндермәксе булам. Бына шунан башланды ла инде уның өләсәһе Фәниә Абрар ҡыҙы менән берлектә һәр атаманың серен сисеү. Эшен йомғаҡлағанда ул: "Бөткөһөҙ сер йәшергән икән дә ул тыуған яҡ атамалары. Беҙ көн дә күргән, көн дә үтеп йөрөгән ерҙәр, урындар, тик сер-йомғаҡтан тора икән дә. Тыңлай белһәң, серен бик үк йәшермәй ҙә икән. Киреһенсә, аҫылташтар, ынйы-гәүһәрҙәр менән балҡып торған гәжәйеп һүҙҙәр донъяһына, тарихына ихластан ишеген аса икән. Минең өсөн "Вазифа яры"ның Екатерина батшабикәнең фарманын бойомға ашырыу менән бәйле булыуы (был осраҡта вазифа - дәрәжә мәғәнәһенә эйә), бөгөн ялтас башлы Ҡарағастыбөнең ҡолас етмәслек ҡарағастары Кронштадт портын төҙөү өсөн оҙатылыу ваҡиғалары бик тетрәндергес тәьсир итте. Был ваҡиғалар тарих төпкөлөндә лә ҡалып бара ине бит, әле килеп ярырҙы", - тип һығымта яһаны. Өләсәй ҙә, уҡыусым да үҙҙәре өсөн генә түгел, мин ҡушҡан өсөн дә түгел, киләсәк быуындары өсөн бик файҙалы эш башҡарыуҙарын аңлап ҡыуанды. Быны ошо эштә бөгөн Музыка ташы тип йөрөтөлгәненең Мүҙәкә ташы тип аталырға тейешле булып, ҡарымта-барымта менән, башҡорттоң бер ылыуын урлаған ҡаҙаҡ егете менән бәйле булып сыҡты. Музыка ташы тип, Миндәк ҡасабаһына күпләп килеп урынлашҡан урыҫ милләтенең теленә яраҡлаштырылған һәм тарих та онотолған. Ураҙ ауылы халҡы Йайыҡ исемен онотманы, ә ошо йылға буйында һуңыраҡ барлыҡҡа килгән ҙур ғына бер ҡасаба халҡы араһында уның Йайыҡ булыуын танырға теләмәүселәр ҙә юҡ түгел.

Ни тиклем тел һәм рухи байлығыбыҙ, тарихыбыҙ тартып алынған бит. Битарафлыҡмы, көсһеҙлекме? Учалы районында тәбиғәт ҡомартҡыһы булып иҫәпләнгән Ворожеичтың да Ҡарағайлы булыуы халыҡ хәтеренән алынған, хатта яңы исеменә ярашлы легендаһы ла барлыҡҡа килгән. Оло юл буйында осраған ер-һыу атамаларын аңларлыҡ түгел. Урыҫ теленд шул тиклем боҙоп яҙыла. Эргәһенә дөрөҫ итеп башҡорт телендәгеһен дә яҙырға кәрәк. Учалы - Өфө юлында "Берсуван" нимә аңлата? Барыһына ла берҙәй аңлашылмағас, кемгә кәрәк ундай яҙыу!

Һаман да быға юл ҡуйһаҡ, киләсәк быуыныбыҙ ошо ерҙәрҙең борондан ата-бабаларының - башҡорттоң ере булыуын иҫбатлай ҙа алмаҫ. Был яман күренеште бергәләп туҡтатайыҡ. Элеккеләрен иҫкә төшөрәйек. Тау, йылға, яландарыбыҙ буйҙарына ябай ғына ташҡа булһа ла соҡотоп исемдәрен яҙҙыртып ҡуяйыҡ. Балаларыбыҙға тарихтарын һөйләгән саралар ойошторайыҡ. Ҡулдан килмәслек эш түгел бит. Ә инде беҙҙең ерҙәребеҙҙә булып, тикшеренеүҙәр үткәреп, яҙмалар ҡалдырған башҡаларға ваҡыты, хеҙмәте яҙылған, һүрәте ҡуйылған таҡтаташ ҡуйыу бик тә килешер. Әммә ер-һыу атамаһын үҙгәртергә һис тә ярамай. Үҙебеҙ тотонайыҡ, иренмәйек. Беҙҙең өсөн башҡалар эшләмәç.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

**РЕДАКЦИЯНАН...**

**Учалы ағинәйенең тәҡдимен күтәрмәләп алып, шундай акцияға юл башлап тороуыбыҙ: "Хөрмәтлә йәмәғәт, әйҙәгеҙ, һәр кем үҙе йәшәгән ауыл, ҡасаба, ҡала тирә-яғындағы тау-таш-түбә, йылға-шишмә-күлдәрҙең һәм башҡаларҙың атамалары исемлеген төҙөйөк, уларҙың оло быуын хәтерендә ҡалған мәғәнәһен, риүәйәтен, тарихын да яҙып алайыҡ. Был эште тыуған төйәгегеҙ, унда йәшәйәсәк киләһе быуындар өсөн изге бер гәмәлгә әйләндерәйек. Ошо эштәрҙең һөҙөмтәһе тураһында "Киске Өфө"гә матур, йөкмәткеле сығыштарығыҙҙы яҙып ебәрергә саҡырабыҙ. "Атамалар тарих һөйләй" тигән рубрикала баҫылған был күләме буйынса бик үк ҙур булмаған (компьютерҙа 2-3 бит) иң йөкмәткеле сығыштар йыл аҙағында беҙҙең бүләктәр менән билдәләнәсәк. Башланыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔"Баҫыу көнө - 2021" зона семинар-кәңәшмәләренә әҙерлек барышында биш районда үҫемлекселек буйынса күрһәтмә майҙансыҡтар әҙерләнә. Был сара - тәжрибә уртаҡлашыу, яңы һөнәри белем алыу, ауыл хужалығы етештереү өлкәһендә алдынғы тәжрибәне таратыу, алдынғы технологияларға иғтибарҙы йәлеп итеү, яңы ауыл хужалығы культураларын үҫтереү алымдары менән танышыу өсөн яҡшы майҙансыҡ. Бында ауыл хужалығы культураларының яңы сорттарын һынау, шулай уҡ төрлө ашламалар, химик препараттар, орлоҡ ағыулағыстар ҡулланыу буйынса тәжрибә үткәрелә, техника күрһәтелә.

✔Бөгөндән Рәсәйҙә балалар туристик кешбәк программаһы эшләй башланы. Программа шарттарына ярашлы, ата-әсәләргә юллама хаҡының яртыһы кире ҡайтарыла, ләкин 20 мең һумдан артыҡ түгел. Унда ҡатнашыу өсөн ата-әсәләргә "Мир" картаһы ярҙамында мирпутешествий.рф сайтында юллама һатып алырға кәрәк. Аҡса биш көн эсендә иҫәпкә күсә. Алдан хәбәр ителгәнсә, Башҡортостанда балалар кешбәк федераль программаһы буйынса республика балалар лагерҙарына юллама һатып алыусылар 30 процент күләмендәге өҫтәмә компенсацияға иҫәп тота ала.

✔Июнь айында Башҡортостандың баш ҡалаһында ниндәй һауа торошо буласағы тураһында мәғлүмәт баҫылып сыҡты. "Гисметео" порталы мәғлүмәттәре буйынса, йәйҙең тәүге айында ҡалала аномаль эҫелек көтөлмәй. Июндең тәүге аҙнаһында ғына термометр бағанаһы +30 градусҡа тиклем күтәрелә. Һуңынан ете көнлөк ямғырлы осор башлана. Һауа температураһы түбәнәйә һәм +21 градус тирәһе була. Ай аҙағына тиклем температура көндөҙ әллә ни үҙгәрмәй +21, +26. Ваҡыты менән бер аҙ ямғыр яуыуы көтөлә.

✔Башҡортостан биләмәһендә йәнә яңы коронавирус инфекцияһы йоҡтороп ҡайтыу осраҡтарының артыуы теркәлгән. Республика һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары Гөлнара Зиннурова хәбәр итеүенсә, башлыса сирҙе башҡа төбәктәрҙә йәшәүселәр һәм урындағы халыҡ сит илдән "алып ҡайта". "60 йәшлектәр һәм өлкәнерәктәр араһында ауырыуҙың юғары проценты һаҡлана. Бөтә йәш төркөмөндәге балалар араһында сирләү осраҡтары кәмей бара", - тине чиновник.

ҠЫҪҠАСА

# БАШҠОРТ АТЫНА...

✓ **Башҡортостанда йыл һайын июлдең өсөнсө шәмбеһендә "Башҡорт аты" республика башҡорт тоҡомло аттар фестивале ойошторола. Сараны уҙғарыу урыны итеп Баймаҡ районы һайланған.** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ошондай тәҡдим менән сығыш яһаған. 2021 йылдың 24 майында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйған. Фестиваль республикала йылҡысылыҡты, ҡымыҙ бешеү йолаһын, халыҡ кәсептәрен һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт тоҡомло аттар һанын арттырыу һәм популярлаштырыу маҡсатында үткәрелә. Башҡортостан Хөкүмәтенә 2021 йылдың 1 июненә тиклем республика хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов етәкселегендә фестивалдең ойоштороу комитеты составын, фестивалгә әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу планын раҫлау бурысы йөкмәтелгән.

✓ **Башҡорт дәүләт университетында студенттар өсөн яңы биш ҡатлы дөйөм ятаҡ асыу тантанаһы үтте. Ул Гоголь урамы, 15-се йорт адресы буйынса урынлашҡан.** Объектты асыу тантанаһында Рәсәй фән һәм юғары белем биреү министры урынбаҫары Петр Кучеренко, ошо ведомстволың Проект эшмәкәрлеге департаменты директоры Наталья Гвоздева, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин, VII саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты Илдар Бикбаев, республика мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлитбирҙин һәм башҡалар ҡатнашты. Дөйөм ятаҡ Башҡорт дәүләт университетына ҡаршы матур урында, Зәки Вәлиди, Гоголь, Аксаков, Пушкин урамдары киҫелешендә урынлашҡан. БДУ-ға даими ҡулланылыуға бирелгән биләмәнең майҙаны 13616 квадрат метр тәшкил итә. Ятаҡтың бинаһы биш ҡатлы. Бүлмәләрҙә студенттарға уңайлы йәшәү өсөн бөтә шарттар бар.

✓ **Башҡортостанда ағымдағы төҙөлөш сезонында Шүлгәнташ мәмерйәһенә асфальт-бетон юлды төҙөп бөтәсәктәр. 5,2 км аралыҡтағы Иҫке Собханғол - Мораҡ юлы төбәк һәм муниципаль-ара программаға ингән.** Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә транспорт министры вазифаһын башҡарыусы Виктор Жульков хәбәр итте. 2018 йылда күпере менән 7,5 км, 2020 йылда 11 км юл ремонтланған. Шулай уҡ Иглин - Кәлтә юлының күптән көтөлгән 7,5 километрында төҙөлөш тамамланырға тейеш. 61 км аралыҡтағы эре төбәк объекты Бөрө - Таҫтүбә - Һаҡты юлын төҙөкләндереү дауам итә. "Федератив эрҙам арҡаһында был юл 2022 йыл файҙаланыуға тапшырыласаҡ", - ти ведомство етәксеһе. Дөйөм алғанда, төбәк һәм муниципаль-ара юлдар өсөн төбәк бюджетынан - 5,76 млрд, федераль ҡаҙнанан 1,5 млрд һум аҡса бүленде. Иң эре участкалар: 10 километрлыҡ Белорет - Учалы - Миәс юлы; 13,6 км Благовещен - Павловка юлы; 11,6 км Өфө - Бөрө - Янауыл; 10,9 км Дүртөйлө - Нефтекама; 14,4 км Сәрмән - Амангилде - Баймаҡ; 6 км Аҫҡар - Әлмөхәмәт - Сибай; 6 км Иглин - Красный Восход.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАЙРАМ КИЛӘ, БАЙРАМ!

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты ултырышында сығыш яһаны. Видеоконференция режимында уны Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Татьяна Голикова үткәрҙе.**

- Был - етди, күләмле сара. Башҡортостан Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә ҙур әҙерлек эшен башҡарҙы. Беҙгә бик күп ҡунаҡтар килә, Фольклориада сараларының эпидемиологик хәүефһеҙлегенә айырыуса ҙур иғтибар бүлеү мөһим, - тип билдәләне Татьяна Голикова. - Фольклориаданы ойоштороусыларға һәм унда ҡатнашыусыларға, шулай уҡ ирекмәндәргә, автотранспорт водителдәренә һәм башҡаларға прививка яһау мөмкинлектәрен файҙаланырға кәрәк, тип өҫтәне ул.

Башҡортостан Башлығы үҙ сығышында республикала әһәмиәтле мәҙәни ваҡиғаға әҙерлектең тамамланып килеүен әйтте. Республика етәксеһе һыҙҙаренсә, программа республиканың баш ҡалаһы менән генә сикләнмәй. Бөтәһе 22 муниципалитет Фольклориадаға әҙерлекте тамамлай. Сараны ойоштороусылар сығыш яһау майҙансыҡтарын, фестивалдә ҡатнашыусыларҙың Башҡортостандың отель һәм шифахана-курорттарында йәшәү урындарын билдәләгән. Фольклориаданың ҙур сараларын телеэфирҙа, интернет-майҙансыҡтарҙа, шул иҫәптән социаль селтәрҙәрҙә ҡарарға мөмкин. Форумдың эшенә 600-ҙән ашыу ирекмән ярҙам күрһәтә.

Шулай итеп, 4 июлдә "Өфө-Арена" майҙансығында Бөтә донъя фольклориадаһына старт бирелә. Унда 800-ҙән ашыу артист ҡатнаша. 4 - 9 июлдә форумдың төп концерт майҙансығында, "Торатау" конгресс-холы амфитеатрында, "Фольклориада йөрәге" фольклор фестивале ойошторола. Концерттар көн дә Фольклориадала ҡатнашыусыларҙың сығышы менән башлана һәм донъяла танылыу яулаған коллективтарҙың сығышы менән тамамлана. Сараны ябыу тантанаһы 10 июлдә "Торатау" амфитеатрында була.

# СПОРТТЫ ГӨРЛӘТӘБЕҘ!



**Өфөлә Физик культураны һәм спортты үҫтереү мәсьәләләре буйынса советтың беренсе ултырышы уҙҙы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уның илебеҙҙә тәүге тапҡыр үтәсәк юниорҙар араһында спорт көрәше буйынса донъя беренселегә алдынан ойошторолоуын билдәләне.**

Чемпионат 11 августа башлана. Киләһе йылда Башҡортостан волейбол буйынса донъя чемпионатын ҡабул итһә, 2025 йылда "Евразиада" - милли һәм олимпияға ҡарамаған спорт төрҙәре буйынса Евразия чемпионаты була. Республика етәксеһе әйтеүенсә, беҙҙә чемпиондар әҙерләүгә лә, күмәк спортты үҫтереүгә лә шарттар булдырыла. Былтыр ғына 104 спорт ҡоролмаһы, 14 спорт залы, 3 йөҙөү бассейны, 115 ҡала инфраструктураһы объекты сафҡа индерелде. Спорт ҡоролмалары һаны буйынса (ә улар беҙҙә 13 меңгә яҡын) төбәктәр рейтингында республика икенсе урынды биләй. Беренсе урында - Мәскәү (23,9 мең), өсөнсөлә - Татарстан (11,1 мең).

Күптән түгел "Спорт менән йәшәйем" Бөтә Рәсәй форумында Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәге Рәсәйҙең иң яҡшы спорт ҡоролмаһы тип танылды. "Быйыл тағы 12 спорт объекты төҙөлә. Өфөлә ябыҡ футбол манежы, спорт гимнастикаһы буйынса физкультура комплексы һала башланыҡ. Халыҡ-ара Көрәш һарайын, Волейбол үҙәген, ишеү слаломы проектлауҙы тамамланыҡ. 2024 йылға тиклем барлыҡ район үҙәктәрен бассейнлы физкультура-һауыҡтырыу үҙәктәре менән тәьмин итеү бурысы тора. Уларҙа буласаҡ чемпиондар әҙерләнәсәк, балаларҙың һаулығы нығытыласаҡ", - тине Радий Хәбиров.

Республика артабан да торлаҡ кварталдарында волейбол һәм баскетбол, хоккей майҙансыҡтары, урам тренажерҙары төҙөүҙе дауам итергә йыйына. "Былтырҙан башлап илдә тәүге тапҡыр тап беҙҙең республикала "Ауыл тренеры" пилот проекты ғәмәлгә ашырыла. Программа йәш белгестәрҙе ауыл-ҡасабаларға, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға йәлеп итәсәк. Йыл һайын ошо маҡсатҡа 60 миллион һум бүләбеҙ. Был биш йылдан ашыу ауылда эшләргә тейешле тренерҙарға 600 мең һумлыҡ 100 грант. Аҡсаны торлаҡ (өй йәки фатир), йорт һалыу өсөн ер участкаһы һатып алыуға тотонорға мөмкин. Беҙ тренерҙарға аҡсаны артабан һөнәри белем алыу өсөн файҙаланыу хоҡуғын бирергә уйлайбыҙ", - тине республика етәксеһе.

# ТАЛҠАҪТЫ ҺАҠЛАРҒА!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районының Талҡаҫ күлене айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе статусы бирергә ҡушты. Экология министрлығы күлдең сиктәрен билдәләү һәм уның территорияһында рәхсәт ителәсәк эшмәкәрлек режимын билдәләү буйынса эш башланы ла инде.**

Мәғлүм булыуынса, республика Башлығы 15 майҙа муниципалитеттар һәм район биләмәләндәге ер аҫты ҡаҙылмаһы сығарыусы компаниялар етәкселәре менән кәңәшмә үткәрҙе һәм ҡаҙылма байлыҡтарҙы файҙаланыу мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссия булдырырға тәҡдим итте. Баймаҡ районы халҡы күп йылдар буйы биләмәлә файҙалы ҡаҙылма сығарыу буйынса киң йәйелдерелгән эштәр алып барыусы һәм тәбиғәт закондарын боҙоусы эшҡыуарҙарҙан зыян күреп йәшәй, тип билдәләне Радий Хәбиров. Мәҫәлән, Иҫән, Түбә, Һаҡмар, Темәс ауылдары халҡы "Семеновск руднигы" йәмғиәтенең Талҡаҫ күле янында карьер асырға йыйыныуы хаҡында муниципалитет һәм төбәк властарына күп тапҡырҙар мөрәжәғәт итте. Бынан тыш, коронавирус арҡаһында яҙғы-йәйге миҙгелдә республикалағы ҙур күлдәргә, шул иҫәптән, Талҡаҫҡа ла күпләп туристар килә. Шуның өсөн был биләмәлә тәртип урынлаштырыу талап ителә.

- Республикала Башҡортостан халҡын борсоған мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итергә кәрәк. Беҙ Талҡаҫ күле һәм уның тирәһендәге территорияға айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе статусы бирәсәкбеҙ, юғиһә, бындағы хәлдәрҙе контролдә тотоуы ауыр буласаҡ. Дөрөҫ, был йәһәттән аҡыллы эш итергә кәрәк. Сөнки беҙгә тәбиғәтте һаҡлау талаптары менән бергә территорияның иҡтисади үҫеше араһында тигеҙлек һаҡлау талап ителә,- тине кәңәшмәлә Р. Хәбиров һәм республика биләмәләрендә файҙалы ҡаҙылма табыусы предприятиелар тарафынан боҙолған экологик баланысты аяҡҡа баҫтырырға ҡушты. Башҡортостан Башлығы республикала рекультивация эштәре менән шөғөлләнмәгән карьерҙар исемлеге төҙөләсәге һәм артабан был материалдарҙың хоҡуҡ һаҡлау органдарына ебәреләсәге хаҡында белдерҙе.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡаланың Спорт әҙерлеге үҙәгендә Өлфәт Мансур улы Мостафин иҫтәлегенә волейбол буйынса ҡала турнирының финал уйындары үтте. Ярыштарҙа 196 команда, ике мендән ашыу өлкән класс уҡыусыһы ҡатнашҡан. Егеттәр араһында иң көслө команда тип Дим районының 104-се мәктәбе йыйылма командаһы, ҡыҙҙар араһында Киров районының 16-сы мәктәбе уҡыусылары танылды. Ярыш еңеүселәрен Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Сергей Греков, Өлфәт Мансур улының улдары - Марсель һәм Альберт Мостафиндар тәбрикләне.

✓2021 йылдың 25 майынан 31 авгусына тиклем Өфөлә ауыр йөк ташыған транспорт хәрәкәте ваҡытлыса сикләнә. Һауа температураһы 32 градустан юғары булғанда йөк машиналарына киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем генә йөрөргә рөхсәт ителә. Хәҙер ҡала хеҙмәттәре асфальттың өҫтөн һыуытыу буйынса саралар күрә. Һыу һиптереүйыуыу машиналары көсәйтелгән режимда эшләй. Һыу һиптереү юл япмаһының артыҡ боҙолоуына юл ҡуймаҫҡа мөмкинлек бирә.

✓Өфөлә көньяҡтан ингән урында юл уҡыу йылы башланырҙан алдараҡ асыла. Бынан алда 1 сентябрҙә асыу планлаштырылғайны. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров объектты тикшереп сыҡты. "Бөгөн төҙөүселәр менән аралашҡандан һуң Салауат Юлаев проспекты һәм Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге юлды ике аҙнаға алдараҡ - 15 августа асырға килештек. Был ваҡытҡа юлдарҙа хәрәкәт ирекен булырға тейеш. Төҙөүселәрҙең бурысты башҡарып сығырына ышанам. Команда бик яуаплы", - тине Андрей Назаров.

✓"Әр-Рәхим" мәсете асылған көндә тәүге аҙан Элвин Грейҙың (Радик Юлъяҡшиндың) тауышы менән яңғыраясаҡ. Был хаҡта артист социаль селтәрҙә хәбәр итте. Уның һыҙҙаренсә, ошо көндәрҙә ул Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Ризуан Ҡорбанов һәм халыҡ-ара класлы спорт мастеры Рөстәм Бегерин менән бергә төҙөлөп ятҡан "Әр-Рәхим" мәсетендә булған. Ризуан Ҡорбанов төҙөлөштә финанс ярҙамы күрһәтеү өсөн Сәғүд Ғәрәбстаны, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре фондтары, шулай уҡ Рәсәйҙәге меценаттар менән һөйләшеүҙәр алып барыуы хаҡында һөйләгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Учалы районындағы карьерҙа, мәҫәлән, бер нисә йыл эсендә ете директор алмашына! Бында проблема нимәлә: ысын хужаның ҡайҙа һәм кем икәнлеген дә белмәүҙә. Дәүләт кем менән һөйләшеүҙәр алып барырға тейеш?



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

**Ил Президенты Владимир Путиндың быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә ошолай тип белдереүе саҡырыу булып яңғыраны, сөнки тотош Рәсәй буйынса экологик хәл ҡыуаныуҙлыҡ түгел. Был йәһәттән халыҡ һәм "йәшелдәр", төрлө экологик хәрәкәттәр саң ҡаға, әммә йөк урынынан ҡуҙғалырға уйламай ине. Республиканың көнсығыш райондарында алтын һәм руда табыуҙары, мәҫәлән, бер кемгә лә сер түгел, әммә алтын йыуыусыларҙың алтынланған ҡулдары үҙ артынан тәртип һәм таҙалыҡ булдырырға бик теләмәй. Ҙур сәнәғәт предприятиелары экологияға миллиардлаған һумдар һалһа, бәләкәй предприятиелар хәл-торошто аңлап етмәйме, әллә аңларға теләмәйме, һәр хәлдә, Башҡортостан Башлығы был йәһәттән ҡәтғи белдереү яһаны.**

# ТӘБИҒӘТТӘН КИЛЕМ АЛАҺЫҢМЫ?



## Артыңдан таҙартырға онотма!

**Нисек лицензия алырға?**

Әгәр "кара ҡаҙыусы", йәғни тәбиғәт байлығын урлаусы түгелһең икән, тәү сиратта ошо байлыҡ менән файҙаланыуға лицензия алырға кәрәк. Хатта ябай ғына төҙөлөш материалы булған балсыҡ, ҡом, таш ҡаҙыуға ла рөхсәт кәрәк. Был осраҡта республиканың Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығына мөрәжәғәт итергә була. Алтын, нефть, хром һәм башҡа "стратегик" ҡаҙылма байлыҡтарҙы ҡаҙыу өсөн БР Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса идаралыҡҡа, йәғни федераль структураға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Лицензия алыу процедураһы ҡатмарлы һәм бик күп нескәлектәргә эйә. Күпселек осраҡта һәр участка торг аша үтә, йәғни барлыҡ теләүселәр ҡатнашҡан лотта кем күберәк аҡса түләй, лицензия шуға бирелә.

**Предприятиеның ҡайҙа теркәлеүе мөһимме?**

Файҙалы ҡаҙылмалар табыусы компаниялар өҫтәмә һалым, йәғни НДПИ (налог на добычу полезных ископаемых) түләй. Был - федераль һалым һәм тулыһынса федераль бюджетҡа китә, шуға күрә предприятиеның ҡайҙа теркәлеүе мөһим түгел. Әммә икенсе һалымдар ҙа бар. Мәҫәлән, НДФЛ (13 процент) предприятие теркәлгән төбәк бюджетына китә. Ойошманың килеменә һалым (20 процент) федераль (2 процент) һәм төбәк (18 процент) бюджеттарын тулыландыра. Уйлап ҡараһаң, алтын өҫтөндә йөшөгән халыҡҡа бынан бер файҙа ла юҡ, сөнки барлыҡ һалымдар Мәскәүгә йәки икенсе төбәккә китә. Әгәр эшҡыуар социаль яуаплылыҡ тоймай икән, ул бары тик ошо территорияла алтын йәки көмөш таба, ә район бөтөнләй ярҙамһыҙ ҡала.

**Милексенең сит илдә булыуы насармы?**

Был яҡшы ла, насар ҙа түгел. Ҡайҙа йәшәү - һәр кемдең шәхси хоҡуғы. Әммә дәүләткә уларҙың кем һәм ҡайҙа икәнен белеү мөһим. Директор - ялланған ябай хеҙмәткәр. Ул бөгөн бар, иртәгә юҡ, уның урынына икенсе кеше килеүе мөмкин. Учалы районындағы карьерҙа, мәҫәлән, бер нисә йыл эсендә ете директор алмашына! Ә предприятие ябайҙарҙан түгел, унда ҡатмарлы экологик проблеманы хәл итергә кәрәк. Һәр яңы директор менән һөйләшеүҙәрҙе яңынан башларға кәрәк. Бында проблема нимәлә: ысын хужаның ҡайҙа һәм кем икәнлеген дә белмәүҙә. Дәүләт кем менән һөйләшеүҙәр алып барырға тейеш? Мәҫәлән, Башҡортостанда сәсеүлек ерҙәрендә алтын тапҡан һәм сәнәғәт ҡалдыҡтарын ҡайҙа етте, шунда түккән "Альт-инвест" компанияһы осрағында геосәйәси аспект та бар. Кипр офшоры аша ойоштороусылар араһында Украина сәйәсмәне Леонид Казаченконың да булыуы ихтимал. Ә ул Рәсәйҙең "санкцияға эләгеүселәр" исемлегенә индерелгән. Быға бәйле хоҡуҡ һаҡлаусылар бирергә тейеш.

**Экологияны бысратыусы предприятиелар менән көрәшергә яңы структура кәрәкме?**

Ер аҫты байлыҡтары менән файҙаланыу һәм уларҙы эшкәртеү тулыһынса федераль ҡануниәт менән көйләнә һәм федераль структуралар тарафынан контролләнә. Ә ошо предприятиелар тыуҙырған проблемаларҙы урындағы власть хәл итә. Ер аҫты байлыҡтары менән файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия - властың яңы органы, министрлыҡ йәки ведомство түгел. Ябай ғына итеп әйткәндә, ул - төрлө структураларҙа эшләгән кешеләрҙе берләштерә һәм улар ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн бер өҫтәл артына йыйылып кәңәш ҡорасаҡ. Мәҫәлән, участкала эш башлауға әҙерлек тураһында халыҡты алдан иҫкәртергә кәрәк. Бөгөн иһә конкурс үткән, лицензия алынған, техника урынға килә, ә хакимиәт тә, халыҡ та бер нәмә лә белмәй. Йәки үҙҙәренә бирелгән участканан сығып, уңдырышлы ерҙәрҙе боҙоп, йылдар буйы уларға рекультивация эшләмәгән эшҡыуарҙарҙы нисек аҡылға ултыртырға? Шулай уҡ был комиссияларҙа бизнес та үҙенең мәсьәләләрен тиҙ арала хәл итергә - ҡағыҙҙарын тәртипкә килтерергә, кәрәкле ҡултамғалар һәм ярҙам алырға, килешеү табырға һ.б. мөмкинлек ала.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Федерация Советы урман менән файҙаланыусыларҙың намыҫһыҙ ҡуртымсылар реестрында булыу ваҡытын билдәләү тураһында закон проектын раҫланы. 2021 йылдың 3 мартында ойошмаларҙы урман участкаһының намыҫһыҙ ҡуртымсыларын һәм үҫентеләр һатып алыусыларҙы ике йыл үткәс йә суд ҡарары буйынса Росреестрҙан сығарыуға йүнәлтелгән законды хупланы. Ғәмәлдәге закон буйынса намыҫһыҙҙар исемлегенә эләккән ҡуртымсылар урман менән файҙаланыу хоҡуғын юғалта. Урман менән намыҫһыҙ файҙаланыусылар реестрында булыу ваҡытын сикләү тураһында закон ҡабул итеү ҡуртымсыларға үҙ хаталарын төҙәткәндән һуң эшмәкәрлектәрен дауам итеү мөмкинлеге бирәсәк. Шулай итеп, урмандарҙы хужалыҡ итеү маҡсатында файҙаланыу өлкәһендә сикһеҙ ваҡытҡа хоҡуҡтарҙы сикләүсе шарт юҡҡа сығарылды. Закон шулай уҡ ағасты электрон сауҙа аша һатыуҙы талап иткән норма менән тулыландырылды. Был урман ресурстарын файҙаланыуҙа асыҡлыҡ булдырасаҡ, ти закон сығарыусылар.

**Белешмә өсөн.** Рослесхоз тарафынан алып барылған әлеге Росреестрға 2021 йылдың 1 мартына ҡарата 708 урман менән файҙаланыусы, шул иҫәптән 604 юридик шәхес һәм 104 шәхси эшҡыуар хаҡында мәғлүмәт индерелгән. Урман менән файҙаланыусыларҙың күпселек өлөшө, йәғни 68 проценты, билдәләнгән тәртиптә ҡуртым түләүен индермәгән өсөн Реестрға эләккән.

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы.**

---

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЯУАПЛЫЛЫҠ ҮҘ ИҢЕНДӘ...

**Әллә кеше көн дә оператив яңылыҡтарҙа сирләүселәр һәм үлеүселәр һанын күреп өйрәнде, әллә тәҡдирҙән ҡасып булмауын аңланы, әммә үҙ теләге менән вакцина эшләтергә атлығып тороусылар ҙа бик күренмәй, һәр хәлдә, оҙон сираттар юҡ. Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә был өлкәләге хәл-торош менән таныштырып, ҡала хакимиәтенең эштәр идараһы Әлфирә Бакирова сығыш яһаны.**

Тәүҙәрәк медицина хеҙмәткәрҙәре, халыҡтың 30-40 проценты сирҙе үткәрһә, коллектив иммунитет барлыҡҡа киләсәк, тип белдерһә, Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, быныҡ өсөн дөйөм халыҡтың 70 проценты вакцинацияланырға тейеш. РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бойороғона ярашлы, мотлаҡ вакцинацияланасаҡ граждандар категорияһы ла билдәләнгән. Өфө ҡалаһында 580 мең кеше вакцина эшләтергә тейеш, әлеге ваҡытта уның беренсе компонентын 115 мең граждан алһа, 90 меңе тулыһынса вакцинацияланған. Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фонды халыҡты дәртләндереү өсөн "Сәләмәт Өфө" (http://ufa-zdorov.ru/) проектын иғлан итте. Уға ярашлы, 14 майҙан 20 июнгә тиклем прививка эшләткән граждандар фатир һәм смартфон уйнатыуҙа ҡатнаша ала. Баш ҡалалағы теләһә ҡайһы вакцинациялау пунктында прививка эшләтеүселәргә кодлы флаер бирелә, уларҙы акция сайтында теркәргә кәрәк. Барлығы 74 мең флаер медицина ойошмаларына таратылған, акция башынан алып 13 меңдән ашыу кеше прививка эшләткән.

Тиҙҙән Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө етә. Уға әҙерлек һәм үткәреү буйынса Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева сығыш яһаны. Былтыр барлыҡ саралар онлайн форматта тигәндәй үтһә, быйыл ул онлайн һәм офлайн уҙасаҡ. Һәр районда балалар өсөн концерт, уйын майҙансыҡтары эшләйәсәк. Шулай уҡ футбол, ҡомдағы волейбол уйындары, башҡа бик күп саралар планлаштырылған. Был сараларҙың барыһы ла "Ҡаланы балалар өсөн һаҡла" девизы менән берләшә. Барлығы онлайн-форматта 50-нән ашыу сара ойоштороласаҡ. Шулай уҡ тарихта беренсе тапҡыр "Торатау" конгресс-холында балаларҙың "Арт-Ҡоролтайы" үтәсәк. Физик мөмкинлеге сикләнгән балалар өсөн дә саралар ҡаралған, уларҙың ҡайһы берҙәрен өйҙәренә барып ҡотлау ҙа ойоштороласаҡ. Бынан тыш, 1 июндән 123 дөйөм белем биреү учреждениеһында балаларҙың көндөҙгө лагеры эш башлай.

Көн тәртибенә сығарылған мөһим мәсьәләләрҙең тағы береһе - йәйге миҙгелдә һыу сығанаҡтары эргәһендә халыҡ өсөн ял зоналары ойоштороу. Билдәләнеүенсә, быйыл ҡалала рәсми 10 пляж эшләйәсәк. Улар һыу инеү миҙгеленә әҙерлек буйынса тикшереү үткән, йылға төбө таҙартылған, барлыҡ зоналар бөжәктәргә һәм талпандарға ҡаршы эшкәртелә. 1 июндән барлыҡ рәсми пляждарҙа иртәнге 10-дан кискә тиклем ҡотҡарыусылар төркөмө эшләйәсәк. Һыу инергә ярамаған урындарҙа иҫкәртеү билдәләре ҡуйылған.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

---

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Үт юлдарын таҙартыу

❖ Үт юлдарын таҙартыу өсөн бәпембәнең сәскәһе яҡшы килешә. Сәскәләрҙе йыйып, һалып ҡуйып саҡ ҡына киптерергә. Шунан бер ҡалаҡ сәскәне термосҡа һалырға, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ярты сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне өскә бүлеп, көн дауамында ашарҙан алда эсеп бөтөргә. Был рәүешле таҙарыныу мөҙҙәте - 3 аҙна.

## Быуындарҙы таҙартыу

❖ Был осраҡта лавр япрағы ярҙам итә. 5 грамм лавр япрағын 300 мл һыуға һалып, 5 минут ҡайнатырға, шунан 3-4 сәғәт термоста тоторға. Төнәтмәне ҡойоп алырға һәм 12 сәғәт дауамында әҙ-әҙ генә уртлап эсеп йөрөргә. Төнәтмәне бер юлы тотош эсеп бөтөргә ярамай, кан килергә мөмкин. Был рәүешле 3 көн дауамында дауаланырға, шунан бер аҙнаға туҡтап торғандан һуң, тағы ла 3 көн эсергә. Дауаланған көндәрҙә вегетариандар кеүек туҡланырға кәрәк. Быуындарҙы тәүге тапҡыр таҙартҡан йылда кварталға бер тапҡыр, аҙаҡ йылына бер тапҡыр ҙа шулай эшләү етәсәк. Иң мөһиме, шуны иҫтә тотоғоҙ: быуындарҙы лавр ярҙамында таҙартырҙан алда мотлаҡ рәүештә эсәктәрҙе таҙартыу курсын үтергә кәрәк. Сөнки эсәктәр таҙартылмаған булһа, лавр япрағынан төнәтмәне аллергик йоғонто яһарға мөмкин.

## Эсәктәрҙе таҙартыу

❖ Бының өсөн көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ көрпә (отруби) ашап, аҙағынан ҡайнатылған һыу эсеп ҡуйырға. Дауаланыу мөҙҙәте - бер ай. Был ваҡыт эсендә эсәктәр шлактарҙан таҙарыуҙан тыш, бер нисә килограмм артыҡ ауырлыҡтан да арыныраға була.

❖ Халыҡ дауаһына ярашлы, алма эсәктәрҙе бер көн эсендә таҙартырға ярҙам итә. Бының өсөн үҙегеҙ яратҡан 2 килограмм алма алырға, уларҙы бер тигеҙ өлөштәргә бүлергә. Бер көн буйы тик алма ғына ашап йөрөргә. Минераль һыу, үлән сәйҙәрен теләгән миҡдарҙа эсергә ярай. Бындай алма диетаһынан һуң эсәктәр шлактарҙан таҙара.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ҡобау ырыыуы башҡорттары ҡорҙа, ырыуыңдың лайыҡлы вәкиле бул, халыҡ именлеге, мәғариф үҫеше, балалар тәрбиәһен даими ҡайғырт, тигән яуаплы бурыс алды үҙ иңенә. Башҡорт үҙаңын һаҡлау тураһында ла һөйләштеләр.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Бер үк типтағы орнамент (тармаҡланып киткән ҡыя шаҡмаҡтар, яртылаш ҡыя шаҡмаҡтарҙан оя биҙәктәр һ.б) Силәбе өлкәһенең көнсығышына 1972 йылғы экспедиция барышында осратылған ашъяулаҡтарҙы ла биҙәгән. Кирбес төҫөндәге ҡыҙыл ерлек киң һары һәм ҡара күк буй һыҙаттар ярҙамында шаҡмаҡтарға бүленгән. Биҙәктәрен эшләгәндә аҡ, ҡара, шәмәхә, һары, йәшел, сейә ҡыҙыл төҫтәрҙәге еп ҡулланылған.



*Ҡулдан һуғылған ашъяулыҡ биҙәге (Силәбе өлкәһе, Ҡыҙыл Армия районы, Яҡуп ауылы). Автор фотоһы. 1972*

Ҡурған өлкәһе Сафакүл районы Оло Солтан ауылынан алынған ҡыҙыллы-аҡлы салфеткала (РЭМ, кол. 2881-391) шаҡмаҡтар эсендә "ҡанатлы" ҡыя шаҡмаҡтар урынлашҡан. Өҫтәмә һыҙыҡтар һәм уртала торған ҡыя шаҡмаҡ деталдәрҙе ҡатмарландырһа ла, орнамент анһатлығын, үтә күренеүсәнлеген һаҡлаған: уның аша асыҡ ерлек күренеп тора. Салфетка оҙон сәсәк менән биҙәлгән.

Элек бөтә Урал аръяғында һуғылған таҫтамалдарҙың башы оҙон итеп эшләнгән, улар төрлө йышлыҡта һәм киңлектәге әллә нисә рәт ҡыҙыл һәм аҡ буйҙар менән биҙәлгән: иң һуңғы буй һыҙат һәр ваҡыт аҡ төҫтән булған. Һуңыраҡ был буйҙарҙы күтәреп һуғыу ысулында эшләп, биҙәй башлағандар. Таҫтамал баштарында ҡыҙыл төҫ йышыраҡ ҡулланылған: биҙәктәр аҡ ерлеккә ҡыҙыл ептән эшләнгән, әммә ҡаймаларҙа ҡайһы осраҡта ҡыҙыл ерлеккә аҡ биҙәк тә һуҡҡандар. Орнаменттың урынлашыу тәртибендә ниндәйҙер ҡәтғи ҡағиҙәләр булмаған. Ҡайһы берҙә араларында йыш ҡабатланып килгән буйҙар орнаменттың төҙөлөшөн үҙгәртеп ебәрһә лә, уның өс өлөшкә бүленеп тороуын күҙәтергә мөмкин.



*Туҡылған шаршау. (БР, Иглин районы Меңъетәр ауылы). Автор фотоһы, 1981*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ҠОБАУ ВӘКИЛДӘРЕ...

## Иглиндә осрашты

**Ошо көндәрҙә Иглин районында Ҡобау ырыуы вәкилдәренең ҙур йыйыны үтте. Йыйынға мәртәбәле ҡунаҡтар: Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова, Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова, билдәле тарихсылар, ғалимдар, ҡоролтай ағзалары килде.**

Билдәле булыуынса, был ырыу вәкилдәренең бер өлөшө Иглин районында булһа, икенсеһе Туймазы һәм Бүздәк райондарында төпләнгән. Башҡалар кеүек үк, Ҡобау ырыуы ла үҙенең арҙаҡлы шәхестәре менән данлы. Шулай ҙа Мәғәфүр Хисмәтуллин менән ҡобауҙар ғына түгел, бар республика хаҡлы ғорурлана. Йырсы, режиссёр һәм педагог, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты 1915 йылдың 23 ғинуарында Өфө губернаһы Өфө өйәҙе (хәҙерге Иглин районы) Яңы Ҡобау ауылында тыуған. Шуға ла ҡунаҡтар өсөн сара тап Мәғәфүр Хисмәтуллиндың бюсына сәскә һалыуҙан башланыуы ла осраҡлы түгел.

Йыйындың төп өлөшөн театрлаштырылған тамаша асты. Пленар ултырышта Эльвира Ринат ҡыҙы башҡорт ырыуҙары хәрәкәтен Башҡорт тарихы йылының иң мөһим ваҡиғаларының береһе, тип билдәләне һәм: "Ырыуҙар съездары башҡорт йәмәғәтселеге өсөн уникаль һәм мөһим ваҡиға булды. Тарихҡа, шәжәрәләргә ҡыҙыҡһыныу бик ҙур. Әле тиҫтәләгән ырыу вәкиле менән осрашыуҙар үткәрелде, уларҙың гербы, гимны раҫланды, ырыу башы һайланды. Күптән түгел яңы һайланған ҡор баштары менән осрашып, хәрәкәттең үҫеш юлдарын билдәләнек. Беҙҙеңсә, йәмәғәт хәрәкәте, Мең башҡорттары йәмәғәт ойошмаһы кеүек, юридик статусҡа эйә булырға тейеш. Был уларға грант программаларында ҡатнашыу мөмкинлеге бирәсәк. Хәҙер ошо йүнәлештә эш алып барабыҙ", - тине, шулай уҡ кеше бер ваҡытта ла үҙенең тарихын, туған телен һаҡлау өсөн шәхси яуаплылыҡ тураһында онотороға тейеш түгеллеген дә иҫкәртте. "Халыҡтарҙың мәҙәниәтен һәм телдәрен һаҡлау мәсьәләләре - ил Президенты контролендә. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров та тарихи мираҫты һаҡлауға, БР халыҡтарының этномәҙәни үҫешенә ҙур иғтибар бирә. Әммә беҙ һәр беребеҙҙең үткән һәм киләсәк араһын бәйләп тороусы звено булыуыбыҙҙы хәтерҙә тоторға бурыслы. Милли һәм тарихи тамырҙарҙы белеү үҙаңды, берҙәйлекте үҫтерә. Беҙ ололарҙың тәжрибәһенә таянып, үҙебеҙҙекен балаларыбыҙға тапшырабыҙ. Әгәр кеше йәмғиәттә, тарихта үҙ урынын тапмаһа, был киләсәктә ынтылыштарҙың һәм маҡсаттарҙың юҡҡа сығыуына килтерә. Әгәр туған телде өйрәнеүгә ғариза яҙмаһаҡ, ул тик көнкүреш теле булып ҡына ҡаласаҡ, мәктәп программаһынан төшөп ҡалыу хәүефе тыуасаҡ", - ти БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары.

Артабан сығыш яһаусылар ҙа мөһим проблемалар күтәреп, йәнле һәм фәһемле аралашыуға үҙ өлөшөн индерҙе. Ҡобау ырыуы йыйынында ҡатнашыусылар күренекле ырыуҙашының исемен мәңгеләштереү буйынса эштәрҙе дауам итеп, Мәғәфүр Хисмәтуллинға Өфөлә һәйкәл асылырға тейеш, тип иҫәпләй һәм шундай тәҡдим менән сығыш яһай, шулай уҡ данлыҡлы йырсының исемен йөрөткән Балалар сәнғәт мәктәбен төҙөү ҙә көнүҙәк мәсьәлә булып тороуын иҫкә төшөрә. Ҡобау ырыуы башҡорттары ҡорҙа, ырыуыңдың лайыҡлы вәкиле бул, халыҡ именлеге, мәғариф үҫеше, балалар тәрбиәһен даими ҡайғырт, тигән яуаплы бурыс алды үҙ иңенә. Башҡорт үҙаңын һаҡлау, шулай уҡ, шәжәрә байрамдарын үткәреү, сараларға мотлаҡ йәштәрҙе йәлеп итеү тураһында ла һөйләштеләр.

"Ырыуҙар ҡоро артабан да дауам итәсәк, беҙгә барлыҡ башҡорт ырыуҙарынан да тиерлек мөрәжәғәт иттеләр. Башҡорт тарихы йылында уларҙың барыһын да солғап алырбыҙ тип ышанам", - ти Эльвира Айытҡолова.

Башҡорт тарихы йылында ырыуҙар съездарынан тыш, һәр районда, ҡалала үҙҙәренең акциялары, саралары уҙа. Республиканың төньяҡ-көнсығыш райондары, мәҫәлән, район-ара эстафета ойошторған. Был сара үҙенсәлекле мәғрифәт проекты булараҡ популярлыҡ яуланы ла инде. Шулай уҡ урындарҙа арҙаҡлы шәхестәргә, геройҙарға һәйкәлдәр асыла. Халыҡ тыуған яҡ тарихын өйрәнә, Башҡорт Википедияһының конкурстарында ла әүҙем ҡатнаша. Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡорт Википедияһы менән берлектә быйыл Башҡорт тарихы йылына бағышланған махсус проектты тормошҡа ашыра. Уның сиктәрендә мартта "Тарихи Башҡортостан топонимикаһы" конкурсы үтһә, 1 июндән "112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары" темаһы буйынса сираттағы конкурс башлана. Шулай уҡ 1 июлдән балалар һәм үҫмерҙәр өсөн "Исемең матур" конкурсы иғлан ителәсәк. 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм Наполеон ғәскәренә ҡаршы походтарҙа ҡатнашҡандарҙың исемдәрен мәңгеләштереү маҡсатында "Төньяҡ амурҙары" проекты ла ғәмәлдә.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әҙерләне.**



*ӘҘӘП БАРҘА...*

# РИЗЫҠҠА ӨРМӘГЕҘ - ЯРАМАЙ!



**Бәләкәй саҡта әсәйем борҡоп ҡайнап ултырған самауырҙан сәй яһап, йә туҫтаҡтан аш һалып биргәс, беҙ тиҙерәк һыуытыр өсөн ризыҡҡа "Өф!" тип өрөргә керешә инек. Диндар өләсәйем гел: "Ризыҡҡа, ризыҡ һалынған һауытҡа өрмәгеҙ!"- тиер ине. "Ни эшләп?"- тигән һорауға күп ваҡытта яуап: "Ярамай, тигәс, ярамай!"- булыр ине.**

Һорауға яуап алып булманы, әммә ризыҡҡа өрөү ғәҙәтен ташлатты өләсәй. Ошо һорауға яуапты олоғая килә, хәҙистәрҙе өйрәнә башлағас ҡына, алдым.

Баҡтиһәң, Әбү Дауыт, Тирмизинан килтерелгән хәҙистәрҙә, ысынлап та, ризыҡҡа өрмәгеҙ, тиелә икән. Сәбәбе нимәлә һуң? Быны 21-се быуат фәне иҫбат иткән дә инде: ауыҙ эсе ҡыуышлығы - иң бысраҡ микрофлора. Тын менән сыҡҡан микробтар, бактериялар ризыҡтағы юғары температураға тәл булып (ҡушылып), патогенға әйләнә, йәғни күп ауырыуҙарға сәбәпсе була икән. Ошо хаҡта бынан 15 быуаттай әүәл әйтелгән, өләсәйҙәребеҙ ҙә ошо хәҙистәге аҡылды белгән, беҙҙе шуға, ризыҡҡа өрмәгеҙ, тип киҫәткән.

Ә бөгөнгө фәнни-техник прогресс осоронда һәр беребеҙ ашыға, ризыҡты ла ҡабалан-ҡарһалан ашай, эҫеһен өрөп һыуыта. Бигерәк тә бәләкәй балаларға өрөп һыуытып бирәбеҙ. Әйткәндәй, эҫе, ҡайнар ризыҡта бәрәкәт булмай, уны һыуытыңҡырап ашарға ҡушыла тағы. Тик өрөп түгел, һыуына биргәнен көтөп, сабыр итеп. Ашай белергә лә аҡыл, ғилем кәрәк шул...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

✓ *"... Курал һәм Башгурд илдәренә килгәндә, унда йәшәүселәр баш бирмәҫ һәм мәкерле халыҡ ине. Үҙҙәренең тәкәббер һәм ғорур булыуҙары арҡаһында улар бер генә лә хаким алдында баш эймәне..."*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - БАШҠОРТ БАЙЛАРЫ

**Ҡырҡтан ашыу башҡорт ырыуҙары араһында, тарихи яҡтан да, этимологик үҙенсәлеге менән дә айырылыбыраҡ тороп, байлар атамаһы менән билдәле этник төркөм бар. Әлбиттә, бында бар төрки ҡәүемдәре өсөн уртаҡ булған "бай" тамыры семантик яҡтан үҙ-үҙен етеш тормош алып бара алған, юғары ижтимағи статуска эйә булған клан рәүешендә күрһәтеүсе халыҡты аңлата. Әйтергә кәрәк, ошо исем менән аталған этник төркөм башҡа төрки халыҡтарында осрамай, шуға күрә байлар ырыуы атамаһын тик башҡорттарға ғына хас булған этноним, тип әйтеп була.**



Тарихсы-ғалимдар фаразына ярашлы, байлар ырыуының тарихи тамырҙары VI - IX быуаттарҙа Үҙәк Азияла хакимлыҡ иткән боронғо Төрки дәүләттәренә: Төркөттәр (552-602 йй.), Көнсығыш Төрки (602-630 йй.), Күк-Төрки (682-744 йй.), Уйғыр (745-847йй.) ҡағанаттарына барып тоташа. Әлбиттә, ошо ханлыҡтар составында йәшәгән ҡәүемдәрҙең бары ла билдәле түгел, әммә ҡайһы бер сығанаҡтарҙа хәҙерге байлар ырыуы ата-бабаларының да боронғо төрки берләшмәләре исемлектәрендә булыуы төҫмөрләнә.

Мәҫәлән, 628 йылда Кат Ильхан Багатур-шад (ҡытайса Сели-кэхань) исемле Көнсығыш Төрки ҡағанаты хакимына ҡаршы сеяньто һәм уйғыр ҡәбиләләре баш күтәрә. Улар Ҡытайҙың Тан Тай-цзун династияһы императоры менән төркиҙәргә ҡаршы союз төҙөй. Ике ҙур армия ҡыҫымына эләккән төркиҙәр баш һалырға мәжбүр ителә, Сели дәүләте юҡҡа сыға, әсиргә төшкән 100 мең төрки кешеһе Тан империяһының сиктәрен һаҡлаусы атлы ғәскәргә алына. "Синь Тан шу" хроникаһында теркәлгән мәғлүмәткә ярашлы, Гуаньнэй провинцияһында айырым төрки ҡәбиләләренән 15 "баҫтырыу округы" ойоштороla, улар иҫәбендә "баянь" исемле этник төркөм дә була. Ҡытай тарихи хроникаларының береһе булған "Тан династияһы күҙәтеүе" әҫәренең "Вассал кенәзлектәре аттарының тамғалары" тип исемләнгән бүлегендә Баянь-Ашидэ ҡәбиләһе лә күрһәтелә. Билдәле тюрколог Ю.А. Зуев ошо хаҡта былай яҙа: "Ошо атаманың беренсе өлөшөндә беҙ баянь этнонимын күреү яғындабыҙ - был Мәхмүт Ҡашғари баят рәүешендә (баянь һүҙенең күплек формаһы) иҫкә алған монгол телле ҡәбилә исеме... Баянь һәм төркмән баяттарының тамғаларын сағыштырғанда ҙур оҡшашлыҡ булыуы ла ошондай уҡ һығымтаға килтерә". Әммә Ю.А. Зуевтың баянь (монголса баят, йәиһә баяут) ҡәбиләһенең монгол телле булыуы хаҡындағы фекере менән килешеп булмай, сөнки монголдар төрки һәм башҡа ҡәүемдәрҙең ырыу-ҡәбилә атамаларына ла -ат, -ут, -ют, -ит күплек суффиксын ҡушып ҡулланған: оросут - рустар, кибчаут - ҡыпсаҡтар, тюркют - төркиҙәр, бачжигит - башҡорттар. Этнонимдың монголса яҙылыуы ғына теге йәки был ҡәбиләнең монгол телле булыуына етерлек дәлил була алмай.

Байан ҡәүеме лә төрки сығышлы булып, билдәле тарихи ваҡиғалар һөҙөмтәһендә монгол хакимлығы аҫтында ҡалып, бер үк ваҡытта баят исеме менән дә иҫкә алына. Баянь этнонимындағы "бай" тамыры һәм төрки телле халыҡтарға хас -ан суффиксы ошо фаразды раҫлап тора. "Байан" этнонимы 786 йылда Уйғыр ҡағанатына ҡараған бер сығанаҡта теркәлгән. "Тан шу" хроникаһында ла ошо уҡ атама ҡулланыла: "Хойху (уйғыр) ҡәбиләләре тарафынан буйһондоролған Гэлу (карлук), Байянь (байан) һәм Тукюе (төрк) быуындарына килгәндә, улар тағы ла нығыраҡ интекте, һәм йәшерен рәүештә тибетлыларға тоғро ҡалды: ошо сәбәптән тибетлылар шатоссылар ярҙамында Бэйтьхинға һөжүм итте".

IX быуатта Арал буйында һәм Һырдаръя тарафтарында Уғыҙ державаһы хасил була. XI быуат ғалимы, телсе Мәхмүт Ҡашғари ошо төрки дәүләтенә ингән ырыу-ҡәбилә исемдәрен дә теркәп ҡалдырған: кынык, кайыг, баюндур, йива, салгур, афшар, бектили, букдуз, байат, язгыр, аймур, кара-булук, алка-булук, игдар, урагир, тутырка, улаюндулуг, тугар, баджанак, джувалдар, джабни, джаруклуг.

Күренеүенсә, бында байат атамаһы теркәлгән. Тимәк, Уғыҙ державаһы составына ингәнсе, байан ҡәүеме, байтаҡ ваҡыт монгол ҡәбиләләре менән аралашып йәшәп, байат, тип атала башлаған. Тарихи ваҡиғалар ҙа ошо фараздың дөрөҫ булыуына дәлил булып тора. IX быуат урталарында Уйғыр ҡағанаты, Енисей ҡырғыҙҙары һәм ҡытайҙар менән һуғышта еңелеп, тарҡалыуға дусар була. Бушап ҡалған Үҙәк Азия далаларын монгол телле ҡәбиләләр биләп ала, һәм тап ошо осорҙа байан этнонимы баят формаһын ала.

Байат ҡәбиләһе, X - XI быуаттар арауығында Монгол далаларын ташлап китеп, төньяҡ тарафтарға йүнәлә, бында улар Уғыҙ дәүләте составына ҡушыла. Билдәле булыуынса, Уғыҙ дәүләтенең төньяҡ сиктәре Көньяҡ Уралға, был тарафта инде күптән төпләнеп йәшәгән Башҡорт иленә тиклем килеп етә. XII быуатта йәшәгән ғәрәп географы Әл-Иҙриси яҙғанса, "... һәм Хиам ҡалаһынан түбәнерәк, әл-Гузия һәм әл-Башджуртийа илдәре араһында ятҡан ҙур тауҙан башланған ҙур йылға ҡоя. Һәм был тау Мургар тип атала".

Тикшеренеүселәрҙең күпселеге Мургар тауы исеменең хәҙерге Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өлкәһенә ҡараған Мугоджар тауҙарына тура килеүен раҫлай. Мугоджар тауҙары географик йәһәттән Көньяҡ Урал тауҙарының дауамы булып иҫәпләнә. X - XI быуаттарҙа тап ошо ареалда уғыҙҙар һәм башҡорттар араһында тығыҙ этник бәйләнештәр барлыҡҡа килә. Тикшеренеүсе С. Г. Агаджанов ошо хаҡта бына нисек яҙа: "Хәҙерге Көнбайыш Ҡаҙағстан территорияһында йәшәүсе уғыҙ ҡәбиләләренең көндәлек тормошта башҡорттар һәм башҡа халыҡтар менән оҡшашлыҡ һыҙаттары була. Көньяҡ Башҡортостанда ҡаҙып асылған, IX - XIII быуаттарға ҡараған курган ҡәберлектәрендәге ҡорамалдар ошоға дәлил".

Уғыҙ-башҡорт мөнәсәбәттәре бер тигеҙ генә бармай. XIV быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы Рәшид ад-Дин яҙып алған "Уғыҙнамә" эпосының бер вариантында IX быуат аҙағындағы ваҡиғалар хаҡында ошондай мәғлүмәт килтерелә: "...Курал һәм Башгурд илдәренә килгәндә, унда йәшәүселәр баш бирмәҫ һәм мәкерле халыҡ ине. Үҙҙәренең тәкәббер һәм ғорур булыуҙары арҡаһында улар бер генә лә хаким алдында баш эймәне. Шул саҡта Уғыҙ уларҙың Ҡарашит исемле падишахын әсиргә алды. Шунан һуң Курал һәм Башгурд ил булып китте һәм яһаҡ түләргә ризалыҡ бирҙе...".

Ғәрәп тарихсыһы әл-Мәсғүди (X быуат) төркиҙәрҙең дүрт ҡәбиләһе - баджнак (бәшәнәк), баджгурд, яджна һәм наукерда исемле халыҡтарҙың Византия империяһы сиктәренә килеп етеүе хаҡында бәйән итә. Уларҙы Арал буйҙарынан уғыҙҙар ҡыҫырыҡлап сығарған була. Был халыҡтарға тарихсы юғары баһа бирә: "Улар көс һәм ҙур ҡеүәткә эйә, һәм уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ батшаһы (малик) бар".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ирҙәр үлә, башын һала...

112-се Башҡорт атлы дивизияһы Сиволюбово, Алексеевка, Богомазово ауылдарын фашистарҙан азат итеп, Ярский утары рубежына сыға. Ҡатмарлы һауа шарттарында, бер туҡтауһыҙ ямғыр ҡатыш ҡар яуып тороу арҡаһында өшөп-күшегеп бөтөүҙәренә ҡарамаҫтан, беҙҙең яугирҙарыбыҙ алға ынтыла, немецтарҙың оборонаһын йырып сығып, уларҙың 306-сы пехота дивизияһын тар-мар итә.

Ошо алыштарҙа 313-сө атлы полк командиры Ғариф Макаев яралана. Генерал-майор М.М. Шайморатов уның урынына политбүлек начальнигы урынбаҫары Байғужа Сәйетғәлинды тәғәйенләй. Комдив, полк командирҙары менән кәңәшмә уҙғарып, Ярский утары эргәһендә дошман фронтының тоташ линияһы булмауынан файҙаланып, тиҙ арала ошо өҙөклөктән немецтарҙың тылына үтеп инергә бойора. Ул артиллерия-миномет дивизионы командиры, капитан С. Хәбировҡа, беҙҙең 55-се атлы дивизия килеп еткәнсе, ошо "ҡапҡа"ны, артиллерия утына тотоп, дошман һалдаттарын был тирәгә яҡын килтермәҫкә ҡуша. Һөҙөмтәлә беҙҙең ҙур ғәскәр төркөмө дошман тылына үтеп инә.

1942 йылдың 31 декабре етә. Беҙҙең яугирҙарыбыҙ Красный Яр утарына яҡынлаша. Дивизия штабында Яңы йыл төнөндә дошманға төнгө һөжүм ойошторорға ҡарар ителә. Разведка дивизионы командиры Абдулла Әхмәҙиевтың разведчиктары дошмандың утарҙағы гарнизоны көстәрен асыҡлай. Красный Ярҙағы гарнизонға полковник Штагель етәкселек итә, уның ҡарамағында 400-гә яҡын офицер һәм һалдат булып, шуларҙың 100-гә яҡыны тәжрибәле летчиктар була. Үҙҙәренә яҡынлашҡан хәүефте һиҙмәгән немецтар Яңы йыл ҡаршыларға әҙерләнә.

Башҡорт дивизияһы яугирҙары утарға бер юлы өс яҡтан бәреп инә. Һәр төркөм үҙе өсөн алдан билдәләнгән өйҙәрҙе ҡамап алып, ундағы дошман һалдаттарын юҡ итә. Сержант Миндеғол Арыҫланов, рядовойҙар Алексей Молчанов, Тәфтизән Миндеғолов, Ғәзиз Мырҙабаевтар, иҫерек немецтарҙы, һис бер тауыш сығармайынса, ҡайһыһын ҡылыстан, ҡайһыһын хәнйәрҙән үткәрә. Полковник Штагель, машинаһына ултырып, ҡасып китеү яғын ҡарай. Немец летчиктарының да байтағы үлтерелә, ҡалғандары әсиргә алына. Башҡорт яугирҙары немец бомбалары аҫтында һәләк булған иптәштәренең үсен ошолай ала. Архив документтарынан билдәле булыуынса, полковник Штагель штабы юҡ ителә, 90 йөк һәм 7 еңел машина, 12 мотоцикл, 2 радиостанция, 3 аҙыҡ-түлек склады, медикаменттар склады трофей итеп алына.

1943 йылдың 3 ғинуарында 112-се атлы дивизия, армияның танк дивизиялары менән берлектә, Чернышковский ҡалаһы һәм Чернышков станцияһы йүнәлешендә һөжүм башлай. Дошман беҙҙең атлыларға ҡаршы танкыларын сығара, дивизияның ПТР расчетары уларҙы көслө ут менән ҡаршылай. Һөҙөмтәлә дошман атакаһы кире ҡағыла, 6 танк емертелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөнгө көндә бына шул быуын үҙләштергән һөнәре буйынса эшләмәй, күңеленә ятҡан шөғөлөн дә таба алмай баҙап йөрөй. Ошо күренеш ыңғай яҡҡа көйләнә, йәштәр хәҙер үҙенең киләсәген теүәлерәк күҙаллай белә.***

# БӨГӨН НИНДӘЙ

## был һорауға яуапты

**Хәҙер кешеләр "модала" һәм "модала түгел" тигән ике төшөнсәгә таянып эш итә. Модала булған буй-һын, кейем, башҡа төрлө әйбер, хатта һөнәрҙәр ҙә бар. Әйткәндәй, һуңғыларына үҙаллы өйрәнергә, йәки ҡыҫҡа курстар үтергә тәҡдим итеүселәр ҙә интернет тулы. Ә бына баш ҡалалағы Өфө киң профилле һөнәри колледжы менән Өфө сауҙа һәм иҡтисад колледжында быңдай актуаль һөнәрҙәрҙе үҙләштереп, ҡулыңа халыҡ-ара танытма алып та сығырға була. Был белем усаҡтары һәм эшсе һөнәрҙәренең киләсәге тураһында уҡыу йорттарының директорҙары Сынтимер Биктимер улы БАЯЗИТОВ менән Ришат Хажиғәли улы САБИТОВ һөйләне.**

**Һеҙ етәкселек иткән Өфө колледждары ниндәй маҡсатта асылған һәм бөгөн улар ниндәй үҙгәреш кисерә?**

**С. Баязитов:** Өфө киң профилле һөнәри колледжына 1939 йылда нигеҙ һалынған. Ул башланғыс синыф уҡытыусылары әҙерләү өсөн педагогия мәктәбе булараҡ асылған. Ә 2001 йылдан Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән бер нисә уҡыу йортон: 1-се һәм 3-сө педагогия колледждарын, 38-се урта һөнәри уҡыу йортон берләштерә һәм бөгөнгө йөҙөн ала. Әлеге көндә учреждениебыҙ 10-дан ашыу йүнәлеш буйынса белгестәр әҙерләй, бында тәү сиратта, әйтеп китеүемсә, башланғыс класс уҡытыусылары, мәктәпкәсә учреждениелар өсөн тәрбиәселәр, физкультура уҡытыусылары, тренерҙар, адаптик физкультура уҡытыусылары, парикмахерҙар, ашнаҡсылар, программистар уҡый. Киләсәктә лицензиялар алып, яңы йүнәлештәр ҙә асырға ниәтләйбеҙ. Шулай булғас, бер урында тапаныу юҡ, уҡытыу кимәлен яҡшыртыу, замандан артта ҡалмау маҡсатында әүҙем эштәр алып барыла. Әлеге көндә колледжда 2 меңгә яҡын студент һөнәр үҙләштерә, алыҫ райондарҙан килгәндәр өсөн 600 урынлыҡ дөйөм ятаҡ бар. Ә коллективта 140-ҡа яҡын юғары квалификациялы педагогтар эшләй, шуларҙың 18-е фән кандидаттары, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемле, 20-30 йыллыҡ хеҙмәт тәжрибәһе туплаған белгестәр.

Колледж тормошо тураһында һөйләгәндә, шуны айырып әйтергә кәрәк: йәштәрҙең ижади үҫешенә ҙур иғтибар бүленә. Йыр-бейеүгә маһирҙар өсөн ансамбль төҙөлгән, үҙендә актерлыҡ һәләттәрен үҫтерергә теләүселәр колледждың драма түңәрәгендә шөғөлләнә, башҡортса бик матур постановкалар сәхнәләштереп, һөйөндөрөп тора. Уҡыу йортобоҙҙоң тағы бер үҙенсәлеге - мода театры, был башҡа уҡыу йорттарында әлегә юҡ. Студенттар бик ҡыҙыҡһынып шөғөлләнә, үҙ оҫталыҡтарын күрһәтә һәм тәжрибә туплай ала торған ижади майҙансыҡ был, унда шөғөлләнеүселәр халыҡ-ара кимәлдәге конкурста еңеү ҙә яуларға өлгөрҙө.

Бөгөн беҙҙең алға ҡуйылған талаптарҙың береһе - донъя кимәлендә эшләй алырлыҡ һөнәрмәндәр әҙерләү. Был иһә, "Йәш профессионалдар" һөнәри оҫталыҡ чемпионатында әүҙем ҡатнашыуҙы, уның талаптарына яуап бирерлек оҫтаханалар булдырыуҙы һәм студенттарға ошо йүнәлештә белем биреүҙе күҙаллай. Был йәһәттән дә беҙ һынатмайбыҙ, йыл да яңы компетенциялар булдырып торабыҙ.

**Р. Сабитов:** Өфө сауҙа һәм иҡтисад колледжы 1972 йылда СССР-ҙың Иҡтисад министрлығы тарафынан асыла, ул осорҙа Өфө совет сауҙаһы техникумы тип йөрөтөлә. Уҡыу йорто 9 йыл элек кенә Башҡортостан ҡарамағына күсерелгән. Беҙҙең колледж эшләгән осорҙа 22 меңдән ашыу юғары квалификациялы белгестәр әҙерләп сығарған. Ә бөгөн иң актуаль 10 йүнәлештә эшләйбеҙ: иҡтисадсы һәм бухгалтерҙар, сауҙа өлкәһендә менеджерҙар, тауарҙарҙы өйрәнеүсе, страховкалау һәм логистика буйынса белгестәр әҙерләйбеҙ. Шулай уҡ туризм, ҡунаҡхана, йәмәғәт туҡланыуы, ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре өлкәһендә кәрәкле кадрҙар менән тәьмин итеү бурысын да алғанбыҙ. Тиҙҙән банк хеҙмәткәре һөнәренә лә уҡыта башлайбыҙ. Был һөнәрҙәрҙе бөтәһе 1400 студент үҙләштерә, шуларҙың бер өлөшө тармаҡтар буйынса коммерция һәм ашнаҡсы-кондитер эше йүнәлештәрендә ситтән тороп та белем ала.

Былтыр коронавирус эпидемияһы беҙҙең эшкә лә үҙгәрештәр индерҙе: 3 йүнәлеш буйынса белем биреүҙе тулыһынса дистанцион формаға күсерҙек. Был "кейсовое обучение" тип атала. Беҙ Халыҡ-ара бизнес һәм сервис институты менән килешеү төҙөнөк, уҡытыусыларыбыҙға уларҙың методистары был кейстарҙы формалаштырырға өйрәтте. Шулай итеп, тармаҡтар буйынса коммерция, иҡтисад һәм бухучет, ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре йүнәлештәрендә 15 студент дистанцияла белем ала. Был һөнәрҙәр түләүле, әммә Волга буйы округында иң түбән хаҡ - йылына 15 990 һум. Интернет бәйләнеше булһа, ауылдан, йә илдең башҡа төбәгенән тороп ҡына уҡып, диплом алыу мөмкинлеген бирәбеҙ.

Потенциаль студенттарыбыҙҙы ҡыҙыҡһындырыу өсөн тағы шуны ла телгә алып үтәм: колледждың спорт базаһы юғары кимәлдә йыһазландырылған, беҙҙә 2 спорт залы, 10 спорт түңәрәге эшләй һәм былтыр ГТО тапшырыу үҙәгенә аккредитация үттек. Шулай уҡ былтыр проект эшмәкәрлеге буйынса ла әүҙем генә башланғыстарға нигеҙ һалынды һәм үҙебеҙҙең Проекттар төҙөү офисын булдырҙыҡ. Шуның сиктәрендә Йәмәғәт туҡланыуының инжиниринг үҙәген астыҡ. Ул бәләкәй предприятие формаһында һәм ике йүнәлештә эшләй: мәктәп системаһындағы ашнаҡсыларҙың квалификацияһын күтәреү һәм милли кухня. Бынан тыш, колледж территорияһында спорт комплексы төҙөү һәм студенттарға хәрби-патриотик тәрбиә биреү йүнәлештәрендә проекттарыбыҙҙы тормошҡа ашырыу маҡсатында көс һалабыҙ.

**Ә шулай ҙа уҡыусылар ниндәй һөнәрҙәрҙе үҙләштереүгә өҫтөнлөк бирә?**

**С. Баязитов:** Былтыр карантиндан алда уҡыу йортобоҙ менән таныштырып, мәктәп уҡыусылары менән әүҙем эшләнек, реклама яһаныҡ. Һәм йәйгеһен 325 бюджет урынына 2025 ғариза ҡабул итеүгә өлгәштек. Физкультура уҡытыусыһы, ғәмәли информатика кеүек йүнәлештәрҙә 1 урынға 10-12 абитуриент дәғүә итте хатта. Ә бына башланғыс синыф уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштерергә бер бюджет урынына 6 ғариза яҙҙылар һәм улар араһында егеттәр ҙә булыуы аптыратты ла, ҡыуандырҙы ла. Сөнки башланғыс синыфта уҡытыу ҡатын-ҡыҙҙар эше тип ҡабул итеп өйрәнелгән бит инде. Был йәш кешеләр менән аралашып, уларҙың күбеһе үҙе теләп ошо һөнәрҙе һайлауын белдем. Тимәк, яҡын киләсәктә ир-егет педагогтарыбыҙ һаны артыуын да күҙәтербеҙ әле. Әйткәндәй, колледжыбыҙҙа ошо һөнәри оҫталыҡ буйынса "Йәш профессионалдар" конкурсына әҙерлек үтеү мөмкинлеге бар, был башланғыс синыф уҡытыусылары өсөн республикала берҙән-бер майҙансыҡ. Бынан тыш, егеттәр ашнаҡсы һөнәрен айырыуса теләп үҙләштерә. Был ғәжәйеп тә түгел, хәҙерге көндә бик кәрәкле йүнәлеш.

Бөгөн беҙҙең уҡыу йортонда белем алырға теләүселәрҙең һаны бермә-бер артыуы, әлбиттә, юҡтан бар булған күренеш түгел. Бының өсөн беҙ, колледж коллективы, төрлө йүнәлештәрҙә әүҙем эшмәкәрлек алып барабыҙ, бөтә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға һәм балаларға ошоноң нәтижәһен күрһәтергә тырышабыҙ. Мәҫәлән, һуңғы йыл ярым эсендә Рәсәй һәм Башҡортостан кимәлендә уҙғарылған бөтә ярыштарҙа ҡатнаштыҡ. 2019 йылда Рәсәй кимәлендәге иң яҡшы 100 урта һөнәри белем биреү учреждениеһы иҫәбенә ингәйнек, быйыл да ошо титулды һаҡлап ҡала алдыҡ. Шулай уҡ "Башҡортостандың иң яҡшы 100 тауары" тигән конкурста ҡатнашып, Рәсәй кимәленә сыҡтыҡ һәм дипломант булдыҡ. Әлбиттә, беҙ тауар етештермәйбеҙ, ә халыҡҡа төрлө хеҙмәттәр тәҡдим итеү буйынса беренсе урында торабыҙ.

**Р. Сабитов:** Абитуриенттар араһында иң юғары ихтыяж менән ҡулланған өс һөнәри йүнәлеште әйтеп китер инем. Беренсеһе, әлбиттә, ашнаҡсы-кондитер һөнәре. Был аңлашыла ла, сөнки хатта коронавирус эпидемияһының иң ҡыҙыу осоронда ла йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары эшен дауам итте. Унан тармаҡтар буйынса коммерция йүнәлеше килә, был студенттар һуңғы курста эшкә урынлаша ала. Уларҙы беҙҙең хеҙмәт практикаһы үткән төп предприятиелар - "Ашан", "Лента" магазиндары селтәрҙәре ҡуш ҡуллап ала. Шуға хатта ҡайһы бер студенттар ошо ойошмаларҙың махсус заказы буйынса диплом эше яҙып та яҡлай һәм эшкә ҡала. Йәштәр араһында тағы бер популяр һөнәр өлкәһе - туризм. Быйылғы уҡыу йылында сит илдәр менән туристик хеҙмәттәр өлкәһендә тотҡарлыҡтар килеп сығып, Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда урындағы туризмды үҫтереүгә иғтибар артыуын да күреп уҡырға күп килгәндәрҙер беҙгә, бәлки.

Сынтимер Биктимер улының һүҙен йөпләп, шуны әйтер инем: урта һөнәри белем биреү учреждениелары даими рәүештә үҫешергә тейеш һәм быны өсөн хеҙмәт баҙарының да, халыҡтың да ихтыяжын белеп тороу мөһим. Шуға беҙ быйыл банк эше йүнәлешен асырҙан алда 5 мәктәптә тикшереү үткәрҙек һәм уҡыусыларға төрлө һөнәрҙәр исемлеген күрһәтеп, банк хеҙмәткәре булып эшләргә теләктәре бармы-юҡмы икәнен асыҡланыҡ. Сентябрь айында ошо һөнәргә эйә булырға теләүсе "беренселәребеҙҙе" көтөп ҡалабыҙ.

**Бер осорҙа хеҙмәт баҙарында юристар һәм иҡтисадсылар һаны артып киткәйне. Шуның кеүек, бер үк һөнәрҙе үҙләштерергә теләп, яҡын киләсәктә тағы ла юғары ихтыяж тыуған башҡаһын иғтибарһыҙ ҡалдырмаймы йәштәр? Йәмғиәткә ниндәй һөнәр эйәләре кәрәк? Йәш белгестәрҙең эш урындары менән тәьмин ителеше ниндәй?**

**С. Баязитов:** Ихтыяж һәр ваҡыт үҙгәреп тора. Мәҫәлән, колледжда электән костюмер һөнәренә уҡытҡандар, әммә ул бөгөн актуаллеген юғалтып бара. Замана, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, көндән-көн үҙгәрә һәм 21-се быуат кешеһенең бер генә һөнәр үҙләштереп, шул өлкәлә генә оҫта булыр форсаты юҡ. Ул һәр даим камиллашырға, кәрәк икән, яңы белемгә асыҡ булырға тейеш. Бына ошо дөйөм тенденция урта һөнәри белем биреү учреждениеларының да торошона йоғонто яһай. Кемдәрҙер мәктәп тамамлағандан һуң колледжға килә, кемдер эшләп йөрөгән еренән һөнәрен алмаштырыу ниәте менән яңынан уҡырға инә. Шуға, даими, һәр уҡыу йылына яңы һөнәрҙәр буйынса белем бирергә әҙерлек үтеп, лицензиялар алып торорға тырышабыҙ. Мәҫәлән, киләһе уҡыу йылына "хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлеге" тигән яңы йүнәлеш асабыҙ. Программистар әҙерләү буйынса ла тағы бер яңы әмәлен табып, компьютер селтәрҙәре белгестәрен уҡытып сығарырға ниәтләйбеҙ.

Урта һөнәри белем биреү учреждениеларының быңдай әүҙем эшмәкәрлеге уға ҡарата йәмғиәттең, республика һәм федераль кимәл етәкселектең фекере үҙгәреүгә лә бәйле ул. Бынан бер 5-6 йыл самаһы элек кенә әле "юғары белем алыу культы" йәшәне. Балалар үҙҙәре генә түгел, уларҙың ата-әсәләре лә урта һөнәри белем алыу, йәки эшсе һөнәрҙәрен үҙләштереүгә бөтөнләй кире ҡараште ине. Шуға, ауыр өлгәшкән баланы ла, түләүле бүлеккә индереп булһа ла, юғары белемле итергә ынтылдылар. Бөгөнгө көндә бына шул быуын үҙләштергән һөнәре буйынса эшләмәй, күңеленә ятҡан шөғөлөн дә таба алмай баҙап йөрөй. Ошо күренеш ыңғай яҡҡа көйләнә, йәштәр хәҙер үҙенең киләсәген теүәлерәк күҙаллай белә, күңеленә ятҡан шөғөл мотлаҡ юғары белем талап итмәүен дә, урта һөнәри белем менән дә эшләп, матур эш хаҡы алып, кешесә йәшәргә мөмкин булыуын аңлай, тип әйтә алам. Беҙҙең колледжды тамалаусыларҙың 91 проценты эшкә урынлаша. Ә ҡалғандары, үҙҙәренә юғары маҡсат ҡуя белгәндәре, артабан белемен вуздарҙа камиллаштыра. Улар аңлы рәүештә вуз һайлай һәм уҡып бөткәс, ҡайҙа, кем булып эшләрҙәрен, күпме эш хаҡы кәрәк булыуын, карьераһын аныҡлап күрә. Шуға, Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфөнөң техник юғары уҡыу йорттары менән килешеү төҙөгәнбеҙ һәм беҙҙең студенттарҙың күпмелер проценты ошо вуздарға уҡырға инә. Уларға ла әҙерлекле, ынтылышлы студенттар кәрәк, сөнки был сифатты арттыра. Ғөмүмән, тәүҙә колледж, училище тамамлап, артабан вузда уҡыу - тормош менән һыналған ысул бит. Элек тә мәктәпкә педагогия училищеһын бөтөп эшкә килеп, юғары уҡыу йортонда

укып та, эшләп тә йөрөгән йәш укытыусылар яҡшы баһаланды.

**Р. Сабитов:** Эйе, беҙҙең заманда филология факультетына Мәсәғүт педагогия колледжын тамамлап укырға килгәндәр әҙерлеге буйынса юғары баһаланды, ысынлап та улар өлгәштә башҡаларҙан бер башҡа юғары тора ине. Был турала бер осор онота биреберәк китһәк тә, яйлап кире ҡайтыу күҙәтелгәндәй һәм шуға беҙҙең дә Өфө дәүләт нефть техник университеты, Башҡорт дәүләт университеты, Башҡортостан кооперация институты (филиал), Рәсәй дәүләт сауҙа-иҡтисад университетының Өфө институты менән килешеүҙәребеҙ бар.

Йәмғиәткә кәрәкле һөнәр үҙләштереү йәки шундай һөнәрҙе тәҡдим итеү мәсьәләһенә килгәндә инде, колледж етәкселеге Рәсәйҙең топ-50 - ихтыяж юғары һөнәрҙәр исемлегенә айырыуса ныҡ иғтибар итергә бурыслы. Уҡыу йортоң артҡа тәгәрәмәһен тиһәң, үҙендә учреждениела ошо исемлектәге һөнәрҙәр буйынса уҡытыуҙы мотлаҡ ойошторорға тейешһең. Был иһә, әлеге ваҡытта белгестәр етешкән, йәки кәрәклеген юғалтҡан һөнәри йүнәлештәр буйынса уҡытыуҙы туктатыу, тигәнде лә аңлата. Мәҫәлән, беҙҙә быйылдан йә-

**биргән ниндәй өлкә белгестәре уҡый һеҙҙә?**

**Р. Сабитов:** "WorldSkills International" халыҡ-ара коммерция булмаған ойошма тарафынан эшсе һөнәрҙәрен популярлаштырыу, һөнәри әҙерлектең абруйын һәм стандарттарын, эшсе һөнәрҙәре буйынса донъя белгестәренең квалификацияһын күтәреү маҡсатында ойошторолған был һөнәри оҫталыҡ буйынса ярыштарҙа Рәсәй ҙә һуңғы йылдарҙа бик әүҙем ҡатнаша. Бының өсөн илдең махсус ойошмаһы булдырылған һәм 85 төбәгендә ошо йүнәлештә эшләгән үҙәктәре бар. Уларға субсидиялар бүленә. Башҡортостан тәүгеләрҙән булып эшсе һөнәрҙәренә эйәләрҙең компетенцияларын күтәреүгә ҡушылды һәм беҙҙең студенттар ошо халыҡ-ара системала ҡатнашҡан башҡа илдәрҙәге һә-

һәм ресторан сервисы буйынса колледжыбыҙ региональ үҙәк булып тора.

**С. Баязитов:** Ришат Хажиғәли улының донъя кимәлендә талап ителгән һөнәр эйәләре тураһындағы һүҙен ҡеүәтләп, шуны әйтер инем. Былтыр миңә тиҙ арала парикмахер һөнәрен үҙләштерергә теләгән ике вәкил килде. Улар Америкала йәшәй булып сыҡты һәм унда эшкә урынлашыу өсөн беҙҙең сертификат кәрәк булған. Заманында улар был һөнәрҙе яҡшы үҙләштергән, әммә ул диплом сит илдә ярҙам итмәй. Халыҡ-ара сертификат кәрәк! Әйтәйек, беҙҙең студенттарҙың да ошондай белеме хаҡында махсус ҡағыҙы булһа, насармы ни? Хәҙер илдәр араһында сиктәр юйыла, йәштәр төрлө

алып сыға. Мәҫәлән, маникюр оҫталары, парикмахер, визажист эшенә өйрәтәбеҙ.

**Өфө ҡалаһының урта һөнәри белем биреү учреждениеларының өлгәшелгән уңыштары, ыңғай эшмәкәрлеге тураһында булды бөгөн һүҙебеҙ. Ә шулай ҙа хәл ителәһе мәсьәләләр, иғтибар талап иткән һорауҙар бармы?**

**С. Баязитов:** Һәр эштең үҙ ҡыйынлығы барҙыр инде ул. Шулай ҙа бына Ришат Хажиғәли улы етәкләгән Өфө сауҙа һәм иҡтисад колледжының бинаһы беҙҙекенә ҡарағанда яңыраҡ булыуы ла уларҙың эшенә еңеллек өҫтәйҙер. Беҙҙең колледж төҙөлөүгә 80 йылдан ашыу ваҡыт үткән. Бынан тыш, матди-техник базаны заман талаптарына яуап бирерлек һәм уҡыусыларҙы йәлеп итерлек итеп яңыртыу ҙа урта һөнәри учреждениеларҙың төп мәсьә-

ның тын алышын һиҙеп торорға бурыслы кеше. Был бит үҙ иңенә шундай яуаплылыҡ алған кешенең хеҙмәтен баһалау, дәртләндереү өсөн бик мөһим. Бына ошо мәсьәлә, моғайын, яҡын киләсәктә хәл ителер тип көтәбеҙ.

**Тағы ла бер мөһим һорау: һеҙҙең учреждениелар башҡорт кадрҙарын әҙерләү буйынса бурысын үтәйме?**

**С. Баязитов:** Беҙҙә башҡорт балалары күп, уларҙың күбеһе Урал арьяғы районларынан уҡырға килгән йәштәр. Статистик мәғлүмәттәргә күҙ һалғанда, дөйөм студенттар һанының 40 проценты тирәһе башҡорт. Был күп тә, аҙ ҙа түгел. Уларға бөтә мөмкинлектәр бирелә һәм милли кадрҙар әҙерләү маҡсатында талаптар икеләтә көслө. Был балаларҙың һәр береһе менән мин айырым эшләйем, дөрөҫ юл күрһәтәм. Әйткәндәй, студенттарҙы ҡала һәм ауыл балаларына бүлеп ҡарағанда статистика шундай: 40 проценты - Өфө ҡалаһынан, 60 проценты республиканың башҡа төбәктәренән йыйылған. Ҡайһан ғына булһалар ҙа йәштәр үҙҙәренең күңеле ятҡан һөнәрҙе һайлап, үҙҙәре ысынлап уҡығыһы килгән уҡыу йорттарына барһындар, тип теләйем. Сөнки тормошонда бәйләргә теләгән һөнәрҙе атай-әсәйҙәр ҡушыуы буйынса ғына алып булмай. Ысын белгес, үҙ һөнәрендең оҫтаһы булыр һәм эшендән ҡәнәғәтлек кисереп йәшәү өсөн йөрәгең менән янып атҡарған эш кәрәк. Уны үҙләштереү өсөн урта һөнәри белем дә етәме, әллә вуз тамамлау кәрәкме - уҡыу йортоноң кимәле түгел, ә һеҙҙең теләк булыу мөһим.

**Р. Сабитов:** Беҙҙә, киреһенсә, студенттарҙың 40 проценты ауылдарға, 60 проценты Өфө ҡалаһы һәм Өфө районына тура килә. Минең девизым шундай: башҡорт балаһы туған телен яҡшы белеү, йырлап-бейеүҙән тыш, яҡшы иҡтисадсы ла, коммерсант та, бухгалтер ҙа булырға һәм үҙе һайлаған башҡа өлкәләрҙә лә шәп белгес булырға тейеш! Шуға беҙ республиканың төрлө райондары менән әүҙем эшләйбеҙ, мәҫәлән, Бөрйән районы менән килешеү төҙөнөк һәм уларға талап ителгән белгесте әҙерләү бурысын йөкмәнек. Тағы ла Хәйбулла, Баймаҡ, Белорет райондары менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Райондарҙан йүнәлтмә буйынса уҡырға аласаҡбыҙ.



# ҺӨНӘР МОДАЛА -

## ошо әңгәмәлә тап!

мәғәт туҡланыуын хеҙмәтләндереүҙе ойоштороу тигән йүнәлеш ябылды, уның урынына логистика буйынса белгестәр әҙерләргә ҡарар иттек. Логист - ул тауар етештерелгәндән алып, кешенең өйөнә килеп ингәнгә тиклем булған бөтә процесты ойоштороусы кеше. Ул тауар етештереүсе менән дә эшләй, реклама ойоштора, транспорт селтәрен яйға һала, әйберҙе төргәктәргә төрөп оҙатыу, заказсының өйөнә алып барып биреү яуаплылығын да үҙ иңенә ала. Күреүегеҙсә, бөгөн бик талап ителгән һөнәр был.

Ә сығарылыш студенттарын эшкә урынлаштырыу - беҙҙең эштең күрһәткесе. Йәш кешене уҡытып та, ул эш таба алмай йөрөһә, ни фәтүә? Шуға, колледжда эшкә урынлашыуҙы даими күҙәтеү үҙәге булдырылған, һәр студентты исем-шәрифе менән теркәп барабыҙ. Бөгөн статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, сығарылыштың 86 проценты эшкә урынлаша. Улар йышыраҡ уҡыған дәүерҙә хеҙмәт практикаһы үткән предприятие, ойошмаларҙа ҡала.

**Студенттарҙы "WorldSkills" - "Йәш профессионалдар" һөнәри оҫталыҡ чемпионатына әҙерләүегеҙ тураһында телгә алғайныҡ. Донъя кимәлендәге талаптарға яуап**

нәрселәр кеүек үк оҫта итеп әҙерләнә. Йәғни, Испаниялағымы, йәки Германиялағы булһынмы, иретеп йәбештереүсенең (сварщик) оҫталыҡ кимәле Башҡортостандың берәй колледжында белем алып йөрөгән һәм "Йәш профессионалдар" чемпионатына әҙерлек үткән иретеп йәбештереүсе менән бер. Беҙҙең иретеп йәбештереүсе шундай һөнәрсе булырға тейеш, уны донъяның ниндәй ойошмаға ла эшкә алырға теләһендәр, хатта самолеттар эшләй тип белһендәр. Ундай оҫтаға эш урыны табыуы, лайыҡлы эш хаҡы алып эшләүе лә ҡатмарлы булмаясаҡ.

Бындай етди һәм мөһим эш йүнәлешенән колледж һәм йәш быуындың киләсәген ҡайғыртҡан коллектив ситтә тороп ҡала алмай. Шуға беҙ ҙә әлеге көндә 3 йүнәлештә: отель менән етәкселек итеү, туризм һәм ресторан сервисы буйынса ныҡлы эшләп, республика һәм Рәсәй кимәлендә беренселекте алып киләбеҙ. Әлбиттә, бындай уңышҡа өлгәшеү өсөн уҡыу йортоноң матди-техник базаһын яҡшыртыу һәм бөтә талаптарға ярашлы ойоштороу ҙа кәрәк, уҡытыусыларҙың да квалификацияһын даими үҫтереп тороу мотлаҡ. Был йәһәттән беҙҙә үҙҙәре эксперт булып танылған белгестәр эшләй

илдәргә иркен күсеп йөрөп йәшәй һәм унда эш тә табырлыҡ белемде тыуған төбәгендә алып сыға ала икән - был бик яҡшы күренеш. Шуға беҙ 4 компетенция өҫтөндә эшләйбеҙ: башланғыс синыф уҡытыусыһы, визаж һәм стилистика, визуаль мерчендайзинг һәм март айында асылған эстетик косметология. Үрҙә телгә алыуымса, башланғыс синыф уҡытыусыһы йүнәлешендә Башҡортостанда тик беҙҙең колледжда ғына "Йәш профессионалдар"ға әҙерлек ойошторолған. Визаж һәм стилистика йәштәр араһында бик популяр йүнәлеш булыуын телгә лә алып торорға кәрәкмәй, эстетик косметология ла бөгөн бик үҫеш алған өлкә. Әлбиттә, кәрәкле бөтә ҡорамалдар алдыҡ, теләүселәргә барлыҡ шарттар булдырҙыҡ. Былар барыһы ла заман һөнәрҙәре инде. Визуаль мерчендайзинг - ул витриналарҙы биҙәү буйынса дизайнерҙың эше. Магазиндарҙа тауарҙар яҡшы һатылһын өсөн бына шундай юғары оҫталыҡлы хеҙмәткәрҙәр хәҙер ҡайҙа ла кәрәк.

Быларҙан тыш, колледжда өҫтәмә белем биреү маҡсатында оҫтаханалар астыҡ һәм халыҡҡа күрһәткән хеҙмәтебеҙ Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары исемлегенә инергә ярҙам итте лә инде. Бөтә кеше киске ваҡытҡа беҙгә түләп уҡырға килә, улар тәгәйен сәғәт белем эстәгәндән һуң ҡулына сертификат

ләһе инде ул. Әлбиттә, был йәһәттән тик дәүләттән генә ярҙам көсәп ултырып булмай һәм ярамай ҙа, үҙебеҙ аҡса эшләү мөмкинлектәрен табырға бурыслы.

Мәғариф учреждениеларының бөгөн иң төп хәл ителәһе мәсьәләһе - йәш быуынға белем менән бергә тәрбиә лә биреү. Дөрөҫөн әйткәндә, мәктәптә яҡшы уҡыған, тәрбиәле, һәр яҡтан өлгөлө генә балалар уҡырға килмәй бит колледждарға. Беҙгә төрлө балалар менән эшләргә кәрәк һәм үҙ һөнәренең оҫтаһы булған социаль педагогтар, тәрбиәселәр, психологтар даими талап ителә.

**Р. Сабитов:** Эйе, тәрбиә өлкәһенә ҙур иғтибар бүленә һәм шулай булырға тейеш тә. Колледжда тәрбиә буйынса махсус программа төҙөлгән, сөнки беҙҙә лә балиғ булмаған балалар уҡый һәм мәктәптәрҙәге кеүек әүҙем эш алып барылырға тейеш. Ошоға бәйле бер көнүҙәк һорауҙы телгә алып китмәй булдыра алмайым. Бында йәшерен-батырыны ла юҡ инде, Рәсәй кимәлендәге проблема. Мәктәптәрҙә синыф етәкселәренә бишәр мең һум өҫтәмә аҡса түләнә, ә колледж уҡытыусыларына куратор сифатында төркөмдәр менән етәкселек иткән өсөн бер ниндәй өҫтәмә ҡаралмаған. Куратор төркөмдәге 25-әр бала өсөн яуаплы, уларҙың һәр береһе менән яҡындан эшләй, бала-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Дандың төбө - хөрмәт, хөрмәт төбө - хеҙмәт", тигән тапҡыр һүҙҙәр иҫкә төштө был әңгәмәнән һуң. Был уҡыу йорттары үҙҙәре лә тырыш хеҙмәте менән хөрмәт ҡаҙанырға ынтыла һәм йәш быуын күңеленә лә ошо хәҡиҡәтте һеңдерә. Кешене үҙенең ихтыяжына таянып һайлаған, ихтыяр биреп үҙләштергән, даими камиллыҡҡа ынтылып торорға этәргән һөнәр генә биҙәй ала. Быны Өфө киң профилле һөнәри колледжы менән Өфө сауҙа һәм иҡтисад колледжы коллективтары ла яҡшы белә, тимәк, студенттары ла ошо инаныстәлар.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

✓ *Бер сирек быуат буйына Ҡыҙыл Армияла командир булған һәм күкрәге ярты тиҫтә орден менән биҙәлгән был кешенең йөҙөндә дивизияның политик йөҙөн һәм боевой рухын күрҙем мин.*





# ДОН ДАЛАҺЫНДА

Сәйфи ҠУДАШ

## VII. БАШҠОРТ ЕГЕТЕ АТ ЭСЕРӘ

Ҡояш Хопер йылғаһының һул яҡ ярындағы оҙон тирәктәргә ышыҡланды. Уның япраҡтары ҡойолған ағастар араһынан төшкән нурҙары тыныс һәм ғорурланып аҡҡан йылғаның өҫтөнә тере көмөш булып йүгерә.

Хоперҙың был тәңгәлдәге күренештәре миңә беҙҙең Ҡариҙелдең Ҡыҙыл Яр ауылы янындағы күренештәрен хәтергә төшөрҙө. Уң яҡта - урыны менән текә, урыны менән һөҙәк яр. Һул яҡта - күгелйем тирәктәр. Улар, штормдан һуң ярһыуынан тынылана алмай тулҡынланған дингеҙ һымаҡ, көндөҙгө елдең сайҡауынан айный алмай, аҫтыртын ғына геүләп ултыра.

Бер боец ат эсерергә төштө. Уның аты сирҡанып торманы, хужаһы мөмкинлек биреү менән шамбырҙап һыуға инеп тә китте. Егеттең һыҙғырғанын да көтмәй, ябай һәм үҙләшкән ҡунаҡ кеүек, ҡыҫтатмайынса уҡ эсергә тотондо. Ә егет тыныс тормош төҫлө һалмаҡ һәм тымыҙыҡ аҡҡан һыуға ҡарап уйға сумды.

Белмәйем, ул ошо минутта әллә Урал йылғаларының береһе буйында үткән матур бала сағын уйлағандыр. Әллә таштан ташҡа бәрелеп, ярһып аҡҡан шарлауыҡлы тау йылғаһындай йәшлеген хәтерләгәндер, йәки ошолай ат эсергән саҡта, үҙенең һөйгән ҡыҙы менән осрашып шаярыуын һағынғандыр? Уның аты һыу эсеп ҡанды ла, ярға сығып һелкенде һәм бышҡырып ҡуйҙы. Ә егет үҙен биләгән уйҙарынан һаман айырылманы. Ат, хужаһының хәлен һәм кисерештәрен аңлаған кеүек, уның эргәһендә туҡталып ҡалды. Егет тәмәке яһап тоҡандырҙы. Янып торған шырпыны һыуға ташланы. Ул, үҙендәге бөтә йәшлек дәрте бөткәнсе яна алмайынса тынып, һыуынып ҡалған йөрәк һымаҡ, һүнде лә, ағып китте. Егет һаман һыу ситендә баҫып тора. Бер күрергә зар булып, һағынған кешеһен көткәндәй булып тора ул.

Ихтимал, ул әле күптән түгел генә шундай бер йылға буйында булған һуғыш эпизодын күҙ алдына килтереп, үҙенең аты өҫтөндә йылға аша йөҙөп сыҡҡанын уйлағандыр. Ихтимал, быларҙың береһе лә түгелдер. Бәлки, башҡорт аты һыу эскән һәм киләсәктә эсәсәк йылғаларҙы һағынғандыр ул. Ә бит әле алда уның аты һыу эсергә тейеш булған йылғалар бик күп. Уның аты тиҙ көндә Дон йылғаһының, унан Днепрҙың һыуын эсәсәк. Ә унан һуң бер ваҡыт бабалары Сена йылғаһынан һыу эскән башҡорт аты алда тағы ла бик күп йылғанан барып һыу эсер. Егеттең башындағы уйҙар тәүҙә уны һыҙғырырға, унан һуң йырларға мәжбүр итте.

*- Ирәндеккәй тауҙың ай башынан*
*Шылтырап-шылтырап*
*аға ҡар һыуы,*
*Дошмандарҙы еңеп бөтөрмәйсә*
*Баҫылмай ҙа йөрәк ярһыуы.*
*Ирәндеккәй тауҙың эй ҡылғаны*
*Ҡиблаларға ҡарап әйелһен.*
*Сап саптарым алға, ҡарап таңға,*
*Зарыҡҡан да ерҙәр һөйөнһөн!*

Уның саф һәм моңло тауышы, йылға аръяғында ҡалын тирәктәргә бәрелеп, ҡабатлап яңғыраны. Ул, сабырһыҙлана башлаған атын етәкләп, йырлай-йырлай һыу буйлатып алға атланы.

## IX. ТАНТАНАЛЫ ВӘҒӘҘӘЛӘР

Дүртенсе ноябрь. Бөгөн беҙ башлап командиры Сәйетов, политик эш буйынса урынбаҫары Ш. Закиров булған дивизияның бер часында булдыҡ. Боецтар, политработниктар һәм командирҙар менән осрашып, митинг уҙҙырҙыҡ.

Был осрашыу, бер яҡтан, боецтарға тыуған ерҙең сәләмен тапшырыу, воиндарҙың Башҡортостан халҡы вәкилдәренә үҙҙәренең боевой уңыштарынан рапорт биреү осрашыуы булһа, икенсе яҡтан, фронт менән тылдың социалистик ярыш договоры төҙөү өсөн булған осрашыуына әйләнде.

Митингыла һүҙ һөйләгән делегация члены Ғәтиәт иптәш Рәхмәтуллин үҙе эшләгән заводтың уңыштары менән боецтарҙы таныштырғандан һуң:

- Мин үҙем производствола эш нормаһын 2500 процентҡа еткереп үтәп киләм, ә бынан ҡайтҡас 3000 процентҡа еткерергә вәғәҙә бирәм, - тине һәм боецтарҙы дошманды аяуһыҙ ҡырырға саҡырҙы.

Частың боецтары исеменән һүҙ һөйләгән Сәйетов, Ғилманов һәм Гәрәев иптәштәрҙән һуң ҡарт тирәк төбөнә боец Вәлиев Шакир килеп баҫты. Ул үҙенең һүҙҙәрен Рәхмәтуллин Ғәтиәттең телмәре тулҡынландырыуы аҫтында һөйләне:

- Минең бер иптәшем һуғышҡа инеү менән бер генә немецты ла үлтерә алмайынса, үлеп ҡалды. Был, әлбиттә, бик үкенесле үлем ине. Шунан һуң кемдер миңә: "Шакир, һин хәҙер дошмандан был иптәшеңдең үсен алырға һәм уның өсөн дә немецты үлтерергә тейешһең", - тине. Был минең намыҫым тауышы ине. Мин әлегә тиклем намыҫымдың шул ҡушҡанын хыянатһыҙ үтәп киләм. Үҙем өсөн дә, иптәшем өсөн дә дошманды үлтерәм. Мин үҙем артиллерист һәм, шуның менән бергә, "һунарға" ла йөрөнөм. Үткән боевой хәрәкәттәр ваҡытында биш көн "һунарға" йөрөп, мин ун бер немецты үлтерҙем. Шуның яртыһын иптәшем өсөн үлтергәнгә исәпләйем. Иптәш Рәхмәтуллиндың саҡырыуын ҡабул итәм. Киләсәк һуғыштарҙа немецтарҙы тағы ла күберәк ҡырырға вәғәҙә бирәм, - тине ул. Башҡа боецтар, алҡышлап, уның вәғәҙәһенә ҡушылғанлыҡтарын белдерҙе.

Митингынан һуң ҡайҙандыр ҡурай һәм гармун килеп сыҡты. Боецтар һәм күп ҡунаҡтар ергә түгелгән алтын кеүек һары япраҡ өҫтөндә хушлашыу бейеүен бейене. Беҙ ни тиклем ашыҡһаҡ та, Сәйетов һәм Закиров иптәштәр, беҙҙең ай-байға ҡарамайынса, тәмле ҡыҙыл армеец ашы менән һыйланы. Унан һуң беҙ Ғайсин иптәш командирлыҡ иткән часҡа туктап, осрашыу уҙғарҙыҡ та, штабҡа ҡайтып киттек. Иптәштәр, беҙҙең машина күҙҙән юғалғансы, яулыҡ болғап, оҙатып ҡалды.

## X. ҺУҢҒЫ СӘЛӘМ

Ҡайтып төшөүгә, М. М. Шайморатов иптәш беҙҙе үҙе сығып ҡаршы алды. Беҙ инде, күп булһа бер сәғәттән һуң, дивизия менән хушлашырға, илгә ҡайтыу өсөн юлға сығырға тейеш инек. Иптәштәр беҙҙе һис бер ебәрергә теләмәй. Тағы ла бер көн, тағы ла бер генә көн торорға димләйҙәр. Беҙ ҙә быға ҡаршы түгелбеҙ. Тыуған илен һағынған, тиҙ көндә дошманға ҡаршы һөжүмгә китәсәк воиндарҙың янында оҙағыраҡ булғы, рухтарын тағы ла күтәрге килә ине. Ләкин беҙ унда оҙаҡ ҡалып, алдында бик ҙур һәм яуаплы бурыстар торған дивизияның һәм уның етәкселәренең ваҡытын һәм иғтибарын үҙебеҙгә биләп, әрәм итеүгә борсола инек. Шуға күрә лә беҙ, дивизияның бай, ҡыҙыҡлы һәм, шуның менән бергә, иҫ киткес тәртипле тормошонан айырылырға теләмәһәк тә, уларҙы үҙ эштәренә төбәлдереп, ҡайтып китергә ашыҡтыҡ. Беҙ был хаҡта генерал-майор М. М. Шайморатов иптәшкә бер нисә тапҡыр әйттек. Ләкин һәр береһендә ул:

- Һеҙ беҙҙең эшебеҙгә аҙ ғына ла яйһыҙламайһығыҙ. Беҙҙең эштәр үҙ тәртиптәрендә үтәлә бара. Бәлки һеҙ, үҙегеҙҙең боецтар араһында йөрөүегеҙ менән уларҙың боевой рухтарын ғына күтәрәһегеҙ, - тип тынысландырҙы беҙҙе.

Беҙҙе генерал-майор М. М. Шайморатовтың квартираһына һуңғы, һаубуллашыу мәжлесенә саҡырҙылар. Мин был мәжлестә иптәш Шайморатовты тағы ла уйсан, тағы ла серьёз, шуның менән бергә, әлегә тиклем булғанға ҡарағанда ла ябайыраҡ итеп күрҙем.

Мәжлес нисек кенә күңелле һәм шатлыҡлы булмаһын, уның айырылышыу ултырыуы икәнен йөрәктәр ҙә, йөҙҙәр ҙә, күҙҙәр ҙә йәшерә алмай ине. Был һуңғы осрашыуҙа мин ни өсөндөр тағы ла иптәш Шайморатовты күҙәтеү менән ҡыҙыҡһындым. Бер сирек быуат буйына Ҡыҙыл Армияла командир булған һәм күкрәге ярты тиҫтә орден менән биҙәлгән был кешенең йөҙөндә дивизияның политик йөҙөн һәм боевой рухын күрҙем мин.

Ни тиклем оҙаҡҡа һуҙырға тырышһаҡ та, мәжлестең ғүмерен сәғәт минуттары хәл итте. Генерал-майор оҙатыу мәжлесен ябыу өсөн аяҡҡа ҡалҡты.

- Минең ҡәҙерле дуҫтарым, туған халҡымдың вәкилдәре, бында бик оҙон телмәр һөйләргә, бик күп вәғәҙәләр бирергә мөмкин. Ләкин ул һүҙҙәр, ни тиклем уратып йөрөмәһен, барыбер төп мәғәнәлә ҡыҫҡарырға мәжбүр. Иптәштәр, беҙ ҡаты һуғышырбыҙ. Кәрәк булһа, ҡаныбыҙҙы, йәнебеҙҙе биреп, халыҡтың һәм иптәш Сталиндың ышаныстарын намыҫ менән аҡларбыҙ. Беҙгә сәғәт һайын, минут һайын ярҙам итегеҙ. Беҙ һеҙгә данлыҡлы еңеү менән ҡайтырбыҙ! - тине.

Генерал-майор М. М. Шайморатов иптәш беҙҙе ҡосаҡлап үпте һәм ҡулдарыбыҙҙы ҡыҫты. Беҙ уның менән хушлашҡанда үҙебеҙҙе бөтә дивизия менән һаубуллашҡан кеүек итеп һиҙҙек. Машина беҙҙе, яҡын иптәштәрҙән айырып, санлы юл менән станицаның ситенә алып китте. Шул ваҡыт беҙ, машина артынан йомғаҡтай тәгәрәп, сабып килгән бер һыбайлыны күрҙек һәм, берәй нәмә онотолоп ҡалған икән, шуны килтерәләр, тип уйланыҡ. Ләкин беҙ машинаны аҡрынайтырға өлгөрмәнек, ул беҙҙе ҡыуып етте лә, машинаның йәнәшәһенә үк килеп, өҙәнгеһенә баҫып, бөтә тауышы менән:

-Тыуған илгә сәләм әйтегеҙ! - тип ҡысҡырҙы. Үҙе, атының сабыуын аҙ ғына ла туктатмаҫтан, уң яҡ урам менән Хопер буйына төшөп китте. Был сәләм беҙгә тапшырылған меңләгән сәләмдең иң һуңғыһы ине. Беҙ, ул сәләмдең ялҡынын йөрәктәргә алып, ҡайтыр юл менән алға киттек.

**(Аҙағы. Башы 19-21-се һандарҙа).**

АЛЫҪТАН ХӘБӘР

# БАШҠОРТ КЕҮЕК...



Рәсәйҙең Ростов далалары, 1941 йылдың йәйе... Окоп ҡаҙып төшөп тә өлгөрмәйбеҙ, артҡа сигенергә команда бирелә: немец урап үткән, ҡамауҙа ҡалыу ҡурҡынысы янай. Беҙҙең командир шәп, подразделениела тәртип һаҡлай, ойошҡан рәүештә сигенеп барабыҙ. Күршеләр барыһын да ташлап ҡасып киткән, немец шулар яғынан һөжүм итә.

Өс ҡалҡыулыҡта урынлаштыҡ, тағы ла окоптар ҡаҙҙыҡ. Беҙ 145 кеше, пехота, туптар юҡ. Бына беҙгә ҡаршы немец мотоциклистары килеп сыҡты, береһе аҡ әләм күтәреп, ҡоралдарҙы һалырға тәҡдим итте һәм яҡын-тирәлә беҙ генә һаман ҡаршылыҡ күрһәтеп торабыҙ, тине. Командир кире ҡаҡты. Быға яуап итеп, немец самолеттары 15 минут тирәһендә беҙҙе ҡаты ут аҫтына тотто, шунан файҙаланып, ҡалҡыулығыбыҙҙы ла ҡамап алдылар һәм миномет, пулеметтарҙан беҙҙе сүпләй башланылар. Бер нисә атакаға ҡаршы торғандан һуң, 75 кенә кеше ҡалдыҡ. Ҡаты яраланған командир иртәнсәк йән бирҙе. Һыу ҙа, аҙыҡ та, команда бирер кеше лә юҡ, рядовой һалдаттар ғына арабыҙҙа... Шул саҡ немец беҙҙең ниндәйҙер бер әсир һалдат менән йәнәшә баҫып, аҡ әләм күтәреп сыҡты. Баҡтиһәң, күрше подразделениеның командиры икән, тағы ла беҙҙе ҡорал һалырға өгөтләйҙәр: "Нишләп һеҙ коммунистар өсөн һуғышып йөрөйһөгөҙ? Ил һеҙҙе онотто, ярҙам булмаясаҡ. Ә һеҙҙең ғаиләләрегеҙ, балаларығыҙ бар. Бөтәгеҙҙе лә өйҙәрегеҙгә ҡайтарабыҙ". Шул мәлдә беҙ көсһөҙлөк күрһәттек, әлбиттә. Ғаиләләребеҙҙе иҫләп, әсир төшөргә ҡарар итеп, винтовкаларҙы ергә ташлап, аҫҡа, немецтар эргәһенә киттек. Немецтар беҙгә йыйылып торор урын күрһәттеләр ҙә, үҙҙәре ҡалҡыулыҡҡа беҙҙән ҡалған ҡоралдарҙы йыйырға йүнәлде һәм шул минутта бер кем дә көтмәгән хәл булды - атыш!

Бөтәһе лә баш һалырға ҡарар итмәгән булған икән, арабыҙҙан өс боец көн дауамында алышты һәм немец тик кисен генә уларҙы ҡулға алды. Уларҙы килтереп һалдылар. Өс яҡташ - башҡорттар, ҡаты яраланған, гранаталар тауышынан ҡолаҡтары тонған, аяҡтарында ла баҫып тора алмайҙар. Уларҙың береһе беҙгә ҡарап: "Ватанды улай һаҡламайҙар, нишләп әсир төштөгөҙ? Барыһы ла шулай итһә, балаларҙы, ҡатындарҙы кем яҡлар?" - тип ҡысҡырып ебәрҙе. Немецтар уларға ярҙам күрһәтеүҙе тыйҙы, барыһы ла бер сәғәттән йән бирҙе. Аҙаҡ концлагерҙар башланды, ҡолдар кеүек эшләй һәм үлә инек. Теге саҡта башҡорттар кеүек вафат булһаҡ икән!..

Мин иҫән ҡалдым һәм Еңеү көнөндә ошо башҡорттарҙы хәтерләп илайым, уларҙың исемдәрен дә белмәйем, ғаиләләре көтөп ала алманы инде, тип уйлайым. Шундай кешеләр арҡаһында ғына еңдек беҙ, улар ысын ирҙәрсә һәләк булды. Уларҙың Ватаны алыҫ тылда ятһа ла, өйҙәре һәм ғаиләләренә арҡа терәп торғандай алыштылар. Бөгөн телевизорҙан уларҙың нәҫелдәренең Ҡуштау өсөн көрәшеүен күреп, ошо тарихты ейәндәремә һөйләнәм. Башҡорттар, һеҙҙе хөрмәт итәм, һеҙ ысын яугирҙар милләте!

**И.В. КОВАЛЕНКО.**

✓ *Элек халыҡ кәкүк тауышын төрлөсә юраған. Ауыл өҫтөнән кәкүк ҡысҡырып осһа, ут сыға, тип ҡурҡҡандар. Кәкүк ауылға килеп, берәй йорт башына ултырып ҡысҡырһа, аслыҡ килә, тип юрағандар.*



ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# ҠУҘҒАЛАҠ БАЙРАМЫ

## Беренсе күренеш

*Сәхнәлә Латифа инәй күренә.*

**Латифа инәй:** Һаумы-иҫәнмеһегеҙ, ҡәҙерле йөмәғәт - ата-әсәләр, бала-сағалар! Мине Латифа инәй, тиҙәр. Ер өҫтө ҡарҙан әрселгәс тә, мин ер-һыуҙың хәлен белешеп йөрөйөм. Бына бөгөн дә урманда, сәхрәгә сыҡҡанмын. Аллаға шөкөр, еремә йәшел келәм кеүек хәтфә үлән дә түшәлде, муйыл ағастары сәскә атты, быйыл муйыл күп буласаҡ.

Латифа инәй, тиҙәр мине. Яландарҙың, болондарҙың, туғайҙарҙың, урманда үҫкән һәр ағастың, һәр сәскәнең тын алышын тоя беләм мин. Минең һымаҡ кешеләр бик күп. Тәбиғәткә ынтыла, ярата, һаҡлай кешеләр. Шулай булған, шулай булһын. Тәбиғәт - ул әсәбеҙ, уны ҡарарға, тәрбиәләргә, ярҙам итергә тырышығыҙ. Тәбиғәткә һоҡланыу, рәхмәт әйтеү, тәбиғәтте аңлау, йәлләү, яҡлау ҙа - һеҙҙең төп эшегеҙ булһын. Бөгөн ағинәйҙәр йыйылып, урман буйына, "Ҡуҙғалаҡ байрамы"на киләбеҙ. Байрамда ир-ат ҡатнашмай; ҡатын-ҡыҙ, ауылдың ағинәйҙәре була, ана, балалар алдан йүгерә. Ҡайһылай шәптәр, унғандар - ололарҙан алдараҡ уҙ-ара һөйләшә-көлөшә, берән-бере уҙҙырып йүгерешеп-уйнап киләләр. Сәхрәне йәмләп килгән балаларҙы ҡарап ултырайым әле. Улар ҡуҙғалаҡ ашы бешерергә үлән йыйырға ашығалыр инде...

*Бер ситкә барып ултыра. Бер төркөм балалар инә.*

**1-се ҡыҙ:** Әйҙә, уйын уйнайыҡ!
**2-се ҡыҙ:** Нимә уйнайыҡ?

*Тауыштар. "Һәпәләк", "Үгеҙйөҙөк"!*

**1-се ҡыҙ:** Сиртеш!
**2-се ҡыҙ:** Сиртеш? Ә кем башта ауыҙ асты?
**3-сө ҡыҙ:** Әнисә ауыҙын асты!
**4-се ҡыҙ:** Бына һин үҙең астың тәү башлап!
**Бөтәһе лә:** Илүзә тәүҙә асты ауыҙын, яза Илүзәгә.
**1-се ҡыҙ** *(Илүзәгә):* Кем өйөнөң башын бысраттың?
**Илүзә:** Гәли ҡарттарҙың өй башын.
**Әнисә** *(Илүзәнең маңлайына сиртә):* Гәли ҡарт - бер!
**2-се ҡыҙ** *(сиртә):* Әбей - ике!
**3-сө ҡыҙ** *(сиртә):* Ҡыҙҙары - өс!
**4-се ҡыҙ:** Ҡашҡар тигән эттәре бар - дүрт!
**Илүзә** *(сиртә):* Хәрәмләшмә! Эт кешегә һаналмай!
**3-сө ҡыҙ:** Аҡыллы этте һанарға була!
**Илүзә:** Юҡ, артығын сирттең! Мә, үҙеңә! *(Сиртә).*

*Латифа инәй күренә.*

**Латифа инәй:** Балалар, ник шаулашаһығыҙ? Һеҙҙең тауыштан ҡоштар ҡурҡты, һайрауынан туҡтаны. Ояла себеш сығарып ултырғандары ла ҡурҡып ҡалтырай...

**Балалар:** Ғәфү итегеҙ. Һаумыһығыҙ, Латифа инәй?

**Латифа инәй:** Бик һаумын, рәхмәт сәләмегеҙгә, тәүфиҡлы булығыҙ шулай.

**Илүзә:** Латифа инәй, нишләп "Латифа туғайы", "Латифа урманы", "Латифа шишмәһе" тиҙәр ул? Һеҙ үҙегеҙ шулай атаныҡыҙмы?

**Латифа инәй:** Юҡ, балалар. Һеҙҙең һымаҡ бала сағымдан уҡ, етемлектә үҫкәнгәме, үҙемдең ҡайғымды ла, шатлығымды ла туғайҙарыма, шишмәмә, урманыма, ағастарыма һөйләнем, уртаҡлаштым. Үҙемдең генә яратҡан ерҙәремдә йөрөгәнде халыҡ күреп, тора-бара ул урындарға минең исемемде ҡушып әйтә башланы. Әле ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

**Мәрйәм:** Латифа инәй, беҙ "Ҡуҙғалаҡ байрамы"на киләбеҙ. Әсәйҙәребеҙ арттараҡ ҡалды.

**Латифа инәй:** Ә-ә-ә, шулайҙыр шул. Ә ҡуҙғалаҡ йыймайһығыҙмы ни? Уйнайһығыҙ ҙа уйнайһығыҙ...

**Мәрйәм:** Латифа инәй, яланда ныҡ рәхәт, һауа саф, гел уйнап-көлгө килә.
**Латифа инәй:** Бик дөрөҫ! Яланда, урманда шатлыҡ менән йөрөгөҙ.

*Илүзә керә, ҡулында ҡаҙ ҡанаты.*

**Илүзә:** Һаумыһығыҙ, Латифа инәй.
**Латифа инәй:** Әле иҫәнбеҙ, Аллаға шөкөр, ҡыҙым.
**Илүзә** *(Зәлифәгә):* Апай, мин ҡанат таптым. Һыҙғыртып күрһәт әле!
**Гөлназ:** Зәлифә, һин ҡанат һыҙғырт, ә мин ҡайын туйыҙында уйнайым!
**Латифа инәй:** Улайһа, бейеү көйөн уйнағыҙ, ҡыҙҙарҙы бейетеп алайыҡ.
**Мәрйәм:** Таҡмаҡты ла тыймаҫтар,
Әйтһәм, бейеп туймаҫтар!
Ҡарағыҙсы: тирә-яҡ -
Күпме сәскә, ҡуҙғалаҡ;
Урман, яланы - хәтфә.
Тын иркенәйә хатта,
Сыуаҡ көн, зәңгәр һауа-
Кинән, уйна ла уйна!..

*Күмәк бейеү.*

**Латифа инәй:** Һай, афарин ҡыҙҙар икәнһегеҙ - һәр яҡтан да булдыраһығыҙ.
**Мәрйәм:** Әсәйҙәребеҙ килеп етеп килә, әйҙәгеҙ, балалар, ҡуҙғалаҡты йыя башлайыҡ, тиҙерәк ҡуҙғалаҡ йыя һалайыҡ!
**Ҡыҙҙар:** Әйҙәгеҙ! Әйҙәгеҙ!
**Латифа инәй:** Туҡтағыҙ әле,балалар. Тәүҙә ерҙән рөхсәт алайыҡ. Ер-Әсәне сәләмләйек. Һаумы, йәшел ерем!
**1-се ҡыҙ:** Һаумы, йомарт ерем!
**Латифа инәй:** Күнелең дә, туғайҙарың да киң, тыуған ер! Ҡабул ит беҙҙән ҡанһыҙ ҡорбан!

*(Латифа инәй өс мәртәбә тәңкә һибә, был "ҡанһыҙ ҡорбан килтереү" була).*

**Илүзә:** Ҡәҙерле гәзиз ерем, һинең тылсымлы һуттарыңды эсеп үҫкән татлы ҡуҙғалағыңды өҙөргә рөхсәт ит!

*Тәңкә һибә.*

**Латифа инәй:** Ер-әсәбеҙ рөхсәт бирҙе, әйҙәгеҙ, балалар, ҡуҙғалаҡты йыя башлайыҡ. Иҫәпле булһын алғаны, хәйерле булһын ҡалғаны.
**Ҡуҙғалаҡ йыйыусылар** *(һамаҡлай):*
- Беҙ йыябыҙ ҡуҙғалаҡ -
Сүгәләп тә юрғалап!
- Беҙ йыябыҙ йыуаның
Бармаҡ кеүек йыуанын.
- Беҙ йыябыҙ балтырған,
Балтырған быйыл унған!
**Латифа инәй:** Әйҙәгеҙ, ҡуҙғалаҡтың ояһына - бик шәп үҫкән еренә алып барайым әле һеҙҙе, балалар.

*Латифа инәйгә геүләшеп эйәреп ҡыҙҙар сыға.*

## Икенсе күренеш

*Ололар инә.*

**Ағинәй:** Бына донъялар имен булғас, Аллаға шөкөр, быйыл да ҡуҙғалаҡ тәмենә етештек, байрамын күреү бәхетенә ирештек.
**Гөлдәр:** Әхирәттәрем, әйҙәгеҙ, ошо ерҙә туҡтайыҡ! Туғайлығы ла матур. Балалар ҡуҙғалаҡ йыйып килгәнсе, табын ҡорайыҡ.
**Гәүһәр:** Ҡоро-һары ботаҡ йыйып, ут тоҡандырайыҡ. Таған аҫайыҡ. Сәйгә, ашҡа һыу ҡуяйыҡ.
**Шәһизә:** Ана, балалар ҙа күренде.
**Мәрйәм** *(алдан йүгереп килә):* Нәнәй, ҡара әле. Ҡуҙғалаҡ, балтырған, ҡаҡы!
**Гөлдәр:** Һай, унғандар, һай, өлгөрҙәр!
**Оло инәй:** Нисек был хәтле ҡуҙғалаҡ таптығыҙ? Латифа инәйгә осранығыҙмы әллә?



**Мәрйәм:** Ҡайҙан белдегеҙ? Латифа инәй беҙгә ҡуҙғалаҡ оялығын табып бирҙе.

*Балалар ҡуҙғалаҡтарын ололарға тәмләргә бирә.*

**Фәнзилә:** Бисмил-лаһи-ррахмани-рахим! Иҫке ауыҙға яңы аш, ауырыуҙар, минән ҡас! Иннаһа-һа, иннаһа-һа! *(Ат кеүек кешнәй).*
**Зилә:** Мин киләмен, ауыҙың ас! Мин киләмен! Зәңге, ҡас!

*Ҡыҙҙар ҡуҙғалаҡ тәмләшә.*

**Ҡыҙҙар:** - Һинеке тәмлерәк икән!
- Ә һинеке баллыраҡ!
**Зәлиә:** Әйҙәгеҙ, ҡуҙғалаҡ һоғондорошайыҡ. Мин иң яҡын әхирәтем Илүзәгә һоғондорам. Тәнеңә - сихәт, йәнеңә - рәхәт.
**Илүзә:** Ә мин - һиңә. Тәнеңә - сихәт, йәнеңә - рәхәт.
**Оло инәй:** Эй, балалар, һеҙ был аштарҙы таңһыҡҡа ғына ашайһығыҙ. Беҙҙең бала саҡ ауыр йылдарға тура килде. Беҙ төрлө үлән ашап иҫән ҡалдыҡ: алабута, ҡаҡы, балтырған, татлытамыр ташыныҡ. Аслыҡ, юҡлыҡ саҡтарҙа ялан, урман ҡотҡарҙы. Күп үләндәр юҡ хәҙер. Һирәкләп тороп ҡалды. Шуның өсөн тыуған ерҙе һаҡлайыҡ.
**Гөлдәр инәй:** Әйҙәгеҙ, әхирәттәрем, балалар менән бергәләп, үҙебеҙҙең йәш саҡта уйнаған уйындарҙы уйнап алайыҡ әле.
**Ҡыҙҙар:** Ниндәй уйын уйнайыҡ? Ҡайһы уйынды уйнайыҡ?
**Яуаптар:** "Аҡ ҡалас"ты уйнайыҡ; "Ҡоҙағыйҙарҙы ярыштырайыҡ"; "Убырлы ҡарсыҡ"ты уйнайыҡ; эйе шул, әйҙә, "Убырлы ҡарсыҡ"ты уйнайыҡ.

*"Убырлы ҡарсыҡ" уйыны. Инә ҡош һыңар аяҡта һикереп йөрөй, ризыҡ әҙләп киткәндә балаларын серле таяҡ менән ҡәртәләп итә. Ҡәртәләгән саҡта һамаҡлай:*

**Инә ҡош:** Ҡәртә, ҡәртә ҡәртәләйем -
Убыр ҡарсыҡ кермәҫкә,
Балаларыма теймәҫкә.
Ишек бауын сисмәгеҙ!
Урыныгыҙҙан ҡуҫмағыҙ!
Мин һеҙгә ризыҡ алып киләм.
**Балалар:** Ярай, әсәй, ярай, ҡуҫмабеҙ.

*Убырлы ҡарсыҡ керә. Балаларҙы ҡурҡытырға тырышып уратып йөрөй.*

**Убырлы ҡарсыҡ:**
Тором кәрәк миңә, тором!
Тором кәрәк миңә, тором!
Торомбаш усаҡ тулы!
Алып бир, ҡороғоро!
**Алда ултырыусы бала:** Көсөң етһә ал, тартып ал!

*Убырлы ҡарсыҡ балаларҙы тарта-тарта, көсө еткәнен икенсе урынға алып барып ҡатырып ултырта. Ололарға көсө етмәй.*

**Убырлы ҡарсыҡ:** Былары ҡарт, ҡаҙаныма һыймаҫ, кәрәкмәй.

*Уйын шулай дауам итә.*

**Оло инәй:** Тором кәрәкһә, кәкүктән һора!
**Убырлы ҡарсыҡ:** Кәкүк! Торомоң күп булһа, миңә бир! (Сығып китә).

*Кәкүк ҡысҡыра.*

**Оло инәй:** Ишетәһегеҙме, балалар! Кәкүк ҡысҡырҙы. Һөйөнсө! "Һөйөнсөңә - уң ҡолағың үҙеңә", тиҙәр. Уң ҡолаҡ - яҡшы хәбәр, тигәндә аңлата. Кәкүк тауышын ҡайһы ҡолағығыҙ менән ишеттегеҙ?
**Балалар.** Уң ҡолаҡ менән.
**Оло инәй.** Бик һәйбәт. Тәүге кәкүк тауышын уң ҡолаҡ менән ишетһәң, бик яҡшыға була.

*Тағы кәкүк ҡысҡыра.*

**Оло инәй:** Кәкүк тауышын юрарға ярай - һаулыҡҡа, оҙон ғүмергә юрағыҙ.
**Гөлдәр:** Иҫәнлек бир.
**Оло инәй:** Тәүге кәкүк тауышын ишеткәс, ергә салҡан ятып тәгәрәргә кәрәк (ергә салҡан ятып тәгәрәйҙәр, ерҙе услап алалар). Устарығыҙҙы ҡарағыҙ: ни сыҡты?
**1-се ҡыҙ:** Ҡарағыҙ әле, усыма үлән сыҡты.
**Оло инәй:** Тимәк, йыл яҡшы килер.
**1-се ҡыҙ:** Ә минең усыма йөн сыҡты.
**Оло инәй:** Йөн сыҡҡас ни, мал уңыр.
**2-се ҡыҙ:** Өләсәй, ә минең усыма йыуа сыҡты.
**Оло инәй:** Ризыҡ сыҡҡас, ашлыҡ уңыр. Хоҙай Тәғәлә биреп, йыл матур килһә, иген ишелеп уңыр.

*Тағы кәкүк ҡысҡыра.*

**Гөлдәр:** Тәнемә һаулыҡ бир, илемдең именлеген бир.
**Оло инәй:** Элек халыҡ кәкүк тауышын төрлөсә юраған. Ауыл өҫтөнән кәкүк ҡысҡырып осһа, ут сыға, тип ҡурҡҡандар. Кәкүк ауылға килеп, берәй йорт башына ултырып ҡысҡырһа, аслыҡ килә, тип юрағандар. Шуға күрә ҡырға сыҡҡан ыңғайы, кәкүк ултырып саҡырған тирәк төбөнә аҡ ризыҡ - һөт, ҡатыҡ ҡоя торғайнылар.
**Гөлдәр:** Кәкүк яман хәбәрҙе ауылдан ситкә алып китһен, тигәндәрме?
**Оло инәй:** Шулай тигәндәр. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә теләктәр әйтеп, ошо йоланы үтәйек. Ағас төптәренә ризыҡ һалайыҡ, ҡоштар ҡуҡәй һалып, бала сығарған ваҡытта сауап булыр.
**Гәүһәр:** Илгә именлек килһен, күктән изгелек булһын.
**Зәлифә:** Көндәр һәр саҡ матур тороп, иген ишелеп уңһын.
**Гөлдәр:** Әхирәттәрем, ҡуҙғалаҡ, балтырған, ҡаҡы йыйҙыҡ та ул, ә ниндәй ризыҡтар әҙерләп була? *(Көй яңғырай).*
**Бергә** *(таҡмаҡлау):*
Ҡуҙғалаҡ шәп үҫә бит ул
Дымлы ерҙәрҙә генә;
Аштарын да бешерәбеҙ
Йәмле йәйҙәрҙә генә.
Ҡуҙғалаҡ әсе булһа ла,
Тәмле була бәлеше.
Тәмле булғас бәлеше,
Ауыҙ итһен бар кеше.
Турама ла яһайбыҙ,
Ҡайнатма ла яһайбыҙ,
Май айының шифаһын
Йыл буйына һаҡлайбыҙ.
Әй, ҡуҙғалаҡ, ҡуҙғалаҡ,
Әлдә үҫәһең әле.
Тәнгә дауа, йәнгә сихәт
Биреп тораһың әле.
Күмәкләшеп беҙ килгәнбеҙ
Ҡуҙғалаҡ байрамына;
Киләһе йыл осрашырбыҙ
Йәмле май айҙарында.

*Йырлап-уйнап сығалар.*

**Гөлдәр МОРАТОВА.**
**Ҡырмыҫҡалы районы**
**Шәрипҡол ауылы.**
**Баҫмаға Сәрүәр СУРИНА**
**әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



## ХӘРӘКӘТТӘ - БӘРӘКӘТ

■ Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.

■ Ҡышын да туҡланыу рационында һөт ризыҡтары, йәшелсә-емештәр етерлек булырға тейеш, ти белгестәр. Итте аҙнаһына ике тапҡыр ашарға, ҡалған көндәрҙә балыҡ, сыр, ҡуҙаҡлылар, сәтләүектәр, йомортҡа, эремсек ҡулланырға. Ризыҡ ныҡ эҫе булмаһын, был ваҡытта организм уны һыуытыу өсөн артыҡ энергия сарыф итә. Һалҡын миҙгелдә һыу эсеүҙе кәрәкле тип тапмай күптәр. Диетологтар быны хата ҡараш булыуын белдерә, һалҡын һауа шулай уҡ тирене киптерә, бындай күңелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн һыу эсергә кәрәк. Ҡышын кеше тирләп бармаһа ла, тышта тын алғанда һыу күпләп быуға әйләнә. Ҡәһүәгә ҡарағанда үлән сәйҙәре, морс, компот яҡшыраҡ. Йоҡлар алдынан сәй эсергә була. Емеш-еләктәргә килгәндә, бананға ҡарағанда әфлисун, мандарин файҙалыраҡ, уларҙа С витамины бар.

■ "Time" журналы яҙыуынса, бер юлы бер нисә электрон ҡоролма менән файҙаланыу күҙҙәр көсөргәнешенә килтерә. Мәҫәлән, һеҙ компьютерҙа ултырағыҙ, әммә эргәгеҙҙә ятҡан тағы бер нисә гаджетҡа ла иғтибар бүлеп өлгөрәһегеҙ. Тикшеренеүҙәрҙә 10 мендән ашыу өлкән кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 70 проценты бер юлы бер нисә ҡорамал менән ҡулланыуын белдергән, 65 проценты был осраҡта физик дискомфорт кисереүен - күҙҙәр әсетеүен, күҙҙәрҙең насар күрә башлауын, баш ауыртыуын таныған. Етмәһә, экранды күҙҙәргә ныҡ яҡын тотоу сәбәпле күҙ ҡабаҡтарын йомоп алыу процесы әҙәйә. Был тағы ла күреү һәләтенең түбәнәйеүенә килтерә. Цифрлы ҡорамалдар экрандары бүлеп сығарған зәңгәр төҫ тә насар йоғонто яһай. Был төҫ үҙенең сифаты менән ультрафиолет нурланышына яҡын. Ул күҙҙең селтәрле ҡабығына зыян итә. Күҙҙәр арымаһын өсөн белгестәр 20-20-20 ҡағиҙәһен күҙәтергә тәҡдим итә. Һәр 20 минут һайын күҙҙәргә 20 минутлыҡ ял бирергә һәм 20 фут (6 метр тирәһе) алыҫлыҡта урынлашҡан предметҡа ҡарарға.

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире әҙемтәләргә килтерә: аш һендереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

УҠЫУСЫ ҺОРАУ БИРӘ

# РУС ТЕЛЕ УҠЫТТЫМ,

## дәрестәремдә башҡорт теленә лә һөйөү тәрбиәләнем



**Беҙ үҙебеҙ ғаиләлә өс ҡыҙ үҫтерәбеҙ. "Киске Өфө" гәзите менән дуҫбыҙ. Ынйыҡайыбыҙ бәләкәй кластарҙа уҡ башҡорт теле дәрестәрендә "Киске Өфө" гәзитенән алған мәғлүмәттәрҙе ҡуллана башланы. Ә Алтынай иһә, ошо гәзит-журналдарҙа нимә яҙылғанын, кем яҙғанын белеү өсөн хатта хәрефләп уҡырға өйрәнде. Беренсене тамамлағанда ҡыҙыбыҙ "Әлифба" дәрестәрендә "Киске Өфө"нән алған мәғлүмәттәрҙе һөйләп ишеттереп, дуҫтары ла гәзитте уҡырға ҡыҙыҡһына башлағайны. Бөтә башланғыс та тап ғаиләлә, сабый саҡтан уҡ һалына шул! "Киске Өфө" дуҫым, серҙәшем, тип әйтә алам. Унда яҙылғандар буйынса йыш ҡына минең өсөн бәләкәйҙән өлгө, остаз, кәңәшсе булған Ләлә апайым менән дә фекерләшеп алам. Тормоштоң һәр мәленә һоҡланып, ғүмерҙең ҡәҙерен белеп, ғаиләһенә йәм биреп, коллегалары араһында үҙ эшенең оҫтаһы булып, һәр атҡан таңға ҡыуанып йәшәй ул. Гәзитте сыҡҡан мәленән алдырып уҡыған, "Сәсәндәр әйтеше"ндә әүҙем ҡатнашҡан Баймаҡ районы Йәнйегет ауылында тормош көтөүсе, Иҫке Сибай мәктәбенең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ләлә Һөйөндөк ҡыҙы Рафиҡоваға гәзиткә тәҡдим итеү өсөн ҡайһы бер һорауҙарымды ла йүнәлттем әле. Бәлки, кемдер минең ошо өлгөмә эйәреп, үҙе лә кем менәндер әңгәмә ҡороп һәм гәзиткә тәҡдим итер?**

➔ ***Ләлә Һөйөндөк ҡыҙы, һеҙҙә гәзит-журнал уҡыуға ҡарата һөйөү ҡайҙан башланғыс алған?***

- Гәзит-журналдарға һөйөү бала саҡтан килә. Әсәйем, Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылында йәшәүсе мәғариф ветераны Урманова Фәлиә Фәлимйән ҡыҙы, матбуғат баҫмаларын күп итеп яҙҙыра торғайны. Күмәкләп уҡыйбыҙ. Республикала сыҡҡан бөтөн гәзит-журналдарҙан тыш, "Работница", "Крестьянка", "За рулем", "Костер", "Юный натуралист", "Физкультура и спорт", "Вокруг света" журналдары, "Роман-газета", "Пионерская правда", "Комсомольская правда" гәзиттәре, Татарстанда баҫылған "Азат хатын", "Совет мәктәбе" журналдары килә ине. Бәләкәстәр өсөн мотлаҡ "Мурзилка" һәм "Веселые картинки". Хатта "Азербайджан гадыны" журналына ла яҙылдыҡ. Үҫеп, студент булғас, Бакуға конференцияға барғанда күп дуҫтар табып, уларҙың телен аңлауымдың башланғысы ошонан ине. Шулай булғас, әле лә матбуғат менән дуҫлыҡты әҙмәүебеҙҙең сәбәптәре аңлашылып тора.

Уҡый белмәгән сағыбыҙҙа әсәйем беҙгә уҡый ине. Бер, әсәһен тыңламай, өйөнән сығып китеп, ҡолағын өҙҙөрөп ҡайтҡан ҡуян балаһын йәлләп илағаным хәтерҙә. Әсәйем, ҡабат уҡымаймын, илайһың бит, ти. Илаймайым, тип һүҙ бирәм дә, йәшереп кенә илайым ҡуян балаһын йәлләп...

➔ **Бала сағығыҙҙы йыш иҫкә төшөрәһегеҙ икәнде беләм. Иң сағыу хәтирәләрегеҙ менән бүлешегеҙ әле.**

- Урман араһында йәшенеп кенә ултырған йыйнаҡ ҡына ауыл ул Алғаҙы, минең тыуған ауылым. Юлыҡ йылғаһы буйында теҙелеп киткән ике оҙон урамдан ғибәрәт. Урамды ҡап уртаға бүлеп, Үҙән ага, бәләкәй генә күпере лә бар. Беҙ йәшәгән яҡты Үр яҡ тиҙәр, ә теге яғы - Түбән яҡ. Ике яҡтың балалары үҙ-ара низағлашып та ала. Ҡаршыла Суктүбә, теге оста Ала бейә тауы, был яҡта Әсүҙәк аға. Юлыҡ буйында Баян ҡойоһо, Әхмәт ҡоҙоғо бар. Сыуһаҡ, Кәкрекәбән, Приске, Шишмә тигән атамалар ҙа ҡолаҡты наҙлап яңғырай. Кешеләре лә үтә ябай, бер ҡатлыраҡ, ихлас. Күп ерҙәрҙә йөрөп, күп кешеләр менән аралашып, алғаҙылар кеүек самими халыҡты бер ерҙә лә осратҡаным юҡ әле. Күбеһе туғандар. Урмановтарҙан

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә иркеле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Аллаһы Тәғәләнең ҡазаһында...

Бер көндә Шәйех Тараҡ хәҙрәттәре янылыш бер ташландыҡ ҡойоға йығылып төшкән. Сығырға һис мөмкинлеге булмағас, ҡойоноң төбөндә ғибәҙәт менән мәшғүл булған. Шул саҡ Мәккәгә хаж ҡылырға барған кешеләр килеп, "Был ниндәй ҡойо икән?" тип, әлеге ҡойоноң ауыҙына ҡарап тора башлағандар. Ә Тараҡ хәҙрәттәре иһә: "Әгәр быларға үҙем тураһында белгертһәм, Аллаһы Тәғәләнең ҡазаһына риза булмаған кеүек ҡабул ителер", - тип, үҙен белдертмәҫкә була. Хажиҙар: "Был ҡойоға берәй әҙәм төшһә, һәләк булыр бит", - тип, ҡойоноң ауыҙын тамам ҡаплап китәләр. Ҡойоноң эсе ҡараңғы булғанлыҡтан, һис бер нәмә күренмәҫ була. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән Тараҡ хәҙрәттәренә ике сыраҡ пәйҙә була. Ул шуларҙың яҡтыһында намаҙ уҡый икән. Шул арала тағы бик ҙур бер йылан пәйҙә була. Тараҡ хәҙрәттәре ҡурҡышынан ни ҡылырға ла белмәй икән. Йылан, башы менән ҡойоноң ауыҙына һуҙылып, уның өҫтөндәге нәмәләрҙе алып ташлай ҙа, ҡойроҡ тарафын Тараҡҡа һуҙып, уны үҙенә сорнап, ҡойонан сығарып та ҡуя. Шул ваҡыт күктән: "Әй, Тараҡ, был иһә һиңә Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте булыр: дошманыңдың ярҙамы менән бәләнән ҡотолдоң", - тигән бер тауыш килә. Шулай итеп, был кеше Аллаһы Тәғәләнең ҡазаһына риза булыуы сәбәпле, оло дәрәжә яулаған. Аллаһы Тәғәлә рәхмәтендә булһын.

### Динен һаҡлаған...

Ғүмәр хәҙрәт хәлифә булған ваҡытта бер нисә мосолман Рум (Греция, Византия) падишаһы Ҡыйсарға әсир төшкән, ти. Рум кешеләре әлеге әсирҙәрҙең береһен Ҡыйсарға "бик ҡеүәтле һәм бик һәйбәт әҙәм", тип маҡтағандар. Ҡыйсар был кешене үҙ күҙҙәре менән күреү теләгәнән: "Ул мосолманды бында килтерегеҙ әле, күрәйем", - тип бойорған. Һарайға, батша янына әлеге әҙәмдәр сылбыр быҒау аҫтында, баштарын эйгән килеш кенә киләләр икән. Был мосолманға ла шул рәүешле барырға бойорғас, уныһы: "Мин Ҡыйсар янына баш эйеп бармам, рәсүлебеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдән ояламын кафырҙың адына баш эйеп барырға", - тип яуаплаған. Ахыры Ҡыйсар: "Сылбырҙы күтәрегеҙ, үҙ хәленсә инһен!", - тигәс, ярандары шунда уҡ сылбырҙы күтәрәләр ҙә, мосолман Ибраһим үҙ яйынса ғына килеп инә. Ҡыйсар быны менән оҙаҡ ҡына һөйләшкәндән

✔ *Тикшереүҙәрҙән күренеүенсә, әңгәмәсе һөйләгән һүҙҙәребеҙҙең 75 процентын ҡабул итмәй. Кеше үҙе теләгәнен генә ишетә. Белеүегеҙсә, ул күберәк үҙе тураһында ишетергә теләй.*

тыш Нурдәүләтовтар ҙа зат беҙгә. Ҡартәсәйемдең әсәһе Зәйнәп Нурдәүләтова булған. Бәләкәй ауылда бер ҙур ғаилә кеүек йәшәнек.

Ҡартәсәйем мине эйәртеп йөрөр ине бөтөн ергә: емешкә лә, япраҡка ла, ҡош-ҡорт ҡарарға ла, инәйҙәргә сәй эсергә лә. Бигерәк тә әхирәттәренә сәй эсә барғанында ҡуша йөрөргә тырыша инем. Инәйҙәр сәй эсә, ә мин рәхәтләнеп хәбәр тыңлайым. Их, ул инәйемдәрҙең гәпләшеүе! Тарих та, лаҡаптар ҙа, ғибрәтле ваҡиғалар ҙа, вәғәздәр ҙә - барыһын да ишетергә була. Йырлашып-көйләшеп тә алыр инеләр. Илашып та, һуғышта ятып ҡалғандарҙы, аслыҡты иҫләп алырҙар ине. Шул мәлдә диктофон булһасы! Мин үҙем дә диктофондан кәм булманым инде былай. Бөтәһен дә һеңдереп ултырам, бала аҡылым менән һығымта яһайым. Инәйемдәр мине онотоп гәпләшәләр. Ҡартәсәйем, мыжымай, барлығы ла, юҡлығы ла беленмәй, түҙемле, хәбәргә ҡыҫылмай, тип мине үҫтереп ебәрә.

Урындыҡта ултырабыҙ, унда аламыс түшәлгән. Аллы-гөллө ҡорамаларҙан эшләнгән арҡыры, буй юрғандар сит-ситенән йәйелгән, берике бәләкәй яҫтыҡ та ята. Сәй эсеп ултырған ерҙән артҡа ҡолап китеп, баш терәп торорға ярап ҡала. Һәләк йәтеш!

Урҙала сәсәкле шәлдәр, яулыҡтар эленгән. Кәзә ҡылынан һуғылған аламыстар сәнсә торған, әммә мин түҙәм. Сөнки инәйҙәремдең сихри донъяһы миңә ҡәҙерлерәк, әһәмиәтлерәк. Һандыҡ өҫтөнә ҡаралды өйөлгән, әҙ генә күк еҫе килеп торған һымаҡ. Урындыҡ уртаһына ашаулыҡ түшәлә, унда еҙ батмус ҡуйыла. Һыйҙары - икмәк тә май, ҡорот, ҡайһы береһе кәштәнең башынан алып бер ҡоторсоҡ кәнфит ултырта. Улары миңә артыҡ ҡыҙыҡ түгел. Самауыр борҡолдап ҡайнап ултыра. Уәт эсәләр сәйҙе! Мин аптырап ултырам: нисек һыя икән уларға унысама сәй? Әллә нисә сығып яңыртып индерәләр ул самауырҙы. Әбейҙәрем йөрпесәкле матур (бәлки миңә генә матур күренгәндер) күлдәктәре өҫтөнә камзулдар кейгән, баштарында - сағыу яулыҡтар. Әле уйлайым да, аслыҡты, ялanғаслыҡты, һуғышты күргәндәр, әммә сырайҙары нурлы, йөҙҙәре яҡты булып ҡалған уларҙың. Тауыштары ла йыр кеүек, әҙәпле генә кеткелдәшеп көлөшөп алалар.

Инәйҙәр ҡайһы берҙә ҡутара һары май һалып, бутҡа ла бешереп ашайҙар. Тәмләп, маҡтай-маҡтай ашағандарына ҡарап, күҙ ҡыҙып китә. Миңә лә һалып бирергә уйлаһалар, ашамайым, тием. Сөнки май һалмағыҙ, тиһәм, мыжып ултырыу булыр, уларҙы мәшәҡәтләмәҫ өсөн, ипле генә баш тартам. Һыуынған сәйемде һемерәм дә урындыҡта ҡамасауламаҫлыҡ итеп йәтешләп ултырып алам. Ғәйникамал, Фәйрүзә, Шәкирә, Кәримә, Гөлбәҙән, Сабира, Фәрхиямал инәйемдәр... Бала сағымдың бер өлөшө улар.

**➔ Ауыл тормошо ҡаланыҡынан нимәһе менән айырыла?**

- Юғары уҡыу йортон бөтөргәс, минең алда ҙур мөмкинлектәр асылды. Институтта уҡыған мәлдә Рәсәй кимәлендәге олимпиадаларҙа призлы урындар алып, халыҡ-ара кимәлдәге конференцияларҙа уңышлы сығыш яһап, фән өлкәһендә арыу ғына хеҙмәт әҙерләп өлгөргәйнем инде. Ләкин мин ауылды һайланым, сөнки ауыл ритмы минең йөрәк ритмына тура килә. Башҡорт - сәхрә балаһы, мин дә шулай. Ҡаланың тар фатиры, шау-шыуы минең өсөн түгел. Аяҡ аҫтымда ерҙе тойоп йәшәргә тейешмен. Балаларым да шулай. Улар үҙҙәре һайлар йәшәр урынды. Беҙҙең Йәнйегет Сибайға терәлеп тора. Шуға ҡала яны ауылында йәшәүемә шатмын. Ә тормош ауылда ла, ҡалала ла берҙәр ул. Тырыштар көн күрә, ҡайҙа ла мәғәнәле, матур йәшәй. Ҡалала театр бар тиҙәр, Өфөлә йәшәп, театрға бармағандар күп, ә беҙ ауылда торһаҡ та Сибай театрының, филармонияһының бер тамашаһын да ҡалдырмайбыҙ.

**➔ Йәш быуынды тәрбиәләүҙә һеҙҙе борсоған проблемалар?**

- Ғүмер буйы рус теле уҡыттым, ләкин балаларға шул дәрестәрҙә башҡорт теленә, тарихына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләнем. Ләкин бөгөн балалар туған телдән ситләшә һымаҡ тойолоп китә. Бер көнө кис баҡсамда йөрөһәм, күрше урам балаларының ҡысҡырышып уйнауын ишетеп ҡалып, аптыраным. Урыҫ интонацияһы менән ҡысҡырып һөйләшәләр. Ситтән берәй бала килдеме икән, тип уйлаһам, юҡ! Үҙебеҙҙең ауыл балалары шулай аралаша икән. Балаларҙың теле урыҫса асылыуы трагедия һәм ул күренештең масштабы ҙурая бара. Бәләкәй ауылдарҙа ла балалар урыҫса аралаша. Күп ата-әсәләр ҡыуана, сөнки үҙҙәре заманында урыҫ телен етә белмәүе арҡаһында проблемалар булған. Иң насары, уларға аңлатыуы мөмкин түгел тиерлек. Үҙ туҡһаны туҡһан уларҙың. Бер быуын өләсәй-ҡартатайҙары бабуля һәм дедуля хәҙер. Урыҫ теле ғаилә теленә әйләнә бара. Йәштәрҙең никахһыҙ бергә йәшәүе лә бик борсоуға һалған мәсьәлә. Ҡыҙғанысҡа күрә, был да хәҙер ғәҙәти хәлгә әүерелеп бара. Ҡыҙ намыҫы, егет яуаплылығы тураһында ғаиләләрҙә һөйләшмәйҙәр ул хәҙер. Әллә иманһыҙлыҡтанмы икән? Ҡатнаш никахтар тураһында әйтеп тораһы ла юҡ, был беҙҙең милләт файҙаһына түгел. Балаларым һәйбәт йәшәй тиҙәр. Эйе, матди яҡтан ҡарағанда яҡшылыр ҙа, ләкин олоғая килә рухи яҡ өҫтөнлөк ала барасаҡ бит. Шул мәлдә башлана инде милләтара ҡыйынлыҡтар.

Йәш ғаилә - милләт киләсәге. Шуны уйлап, аңлап никахҡа инһен ине йәштәребеҙ. Айырылышыуҙар күбәйҙе. Ғаиләлә татыулыҡ булһын өсөн Минде онотоп, Беҙҙе беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Һәр кем үҙ урынын белһә, ғаилә ныҡлы була. Ата-бабаларҙың алтын ҡағиҙәләрен хәтерҙән сығармайыҡ...

**Римма АҠМАНОВА,**
**филология фәндәре кандидаты.**
**Сибай ҡалаһы.**

һуң: "Әй, фәлән, беҙҙең динебеҙгә ин, йөҙ кешене һиңә хеҙмәткә килтерермен, падишаһлығымды һиңә бирермен, барса мөлкәт ихтыярыңда булыр", - тип үҙ яғына өндәргә тотонған. Был ир иһә Ҡыйсарҙан: "Рум донъяның күпме өлөшөн биләп тора? Шуны әйтсе әле", - тип һораған. Ҡыйсарҙың: "Өстән бер өлөшөн йәки дүрттән бер өлөшөн биләй", - тигәнен ишеткәс, мосолман әҙәм: "Әй, шаһ, хатта бөтөн донъя Румдыҡы булып, гәүһәр һәм алтын-көмөш менән тулған осраҡта ла, барсаһын бер көнгә аҙан тауышын тыңлауыма алыштырмам", - тип яуап ҡайтарған, ти. Ҡыйсар бынан: "Аҙан нимә була ул?" - тип һорағас, уныһы: "Тик Мөхәммәт Рәсүлулланы шаһитлыҡ итәм, таныҡлайым, тигәнде белдерә", - тип яуаплаған. Падишаһ бынан һуң: "Был әҙәмдең күңелендә Мөхәммәттең мөхәббәте ныҡлап урынлашҡан икән дәһә, уны кире ҡайтарыу һәм бөтөрөү тиҙ генә мөмкин булмаҫ", - тип һығымта яһаған да, хеҙмәтселәренә бер оло ҡаҙанға һыу тултырып, аҫтына ут яғып ҡайнатҡандан һуң был мосолманды шунда һалырға ҡушҡан. Батша әмере буйынса ҡаҙанды ҡыҙҙырып, әлеге ирҙе шунда төшөрөргә ниәтләй башлағандар икән, мосолман "бисмиллаһир-рахманир-рахим" тип үҙ ихтыяры менән ҡайнар һыуға төшкән дә киткән, ти... Ни ғәжәп, ул ҡаҙандың икенсе тарафынан һис зарарһыҙ килгән дә сыҡҡан! Рум халҡы был мөғжизәнән ғәжәпкә ҡала, Ҡыйсар иһә: "Быны бер ҡараңғы зинданға ябығыҙ, эсергә һыу бирмәгеҙ, фәҡәт алдына дуңғыҙ ите менән араҡы ҡуйығыҙ, ҡырҡ көн шулай торһон!", - тип әмер бирә. Ярандары Ҡыйсар әйткәнсә эшләй. Ҡырҡ көн булғас, ҡараһалар, әлеге мосолманға һис нәмә булмаған, ингәндәге кеүек сәләмәт, дуңғыҙ итен дә ашамаған, араҡыны ла эсмәгән. Был хәлдән барыһы ла ғәжәпкә ҡалып: "Ни өсөн сусҡаны ашаманың, араҡыны ла эсмәнең? Һеҙҙең динегеҙ буйынса, мохтажлыҡ кисергәндә бындай ғәмәл дөрөҫ һанала бит", - тиеүҙәренә тотҡон ир: "Әгәр мин дуңғыҙ итен ашаған һәм араҡыны эскән булһам, һеҙ шатланыр инегеҙ. Фәҡәт һеҙҙе асыуландырыр өсөн ашаманым!" - тип яуаплаған, ти. Ҡыйсар тағы ла: "Әй, фәлән, миңә сәждә ҡыл, үҙеңде лә, юлдаштарыңды ла азат итермен", - тип ныҡышҡан. Мосолман иһә: "Беҙҙең динебеҙҙә Аллаһы Тәғәләнән башҡаға сәждә ҡылыу дөрөҫ түгел", - тип яуап ҡайтарған. Ҡыйсар тағы ла: "Ҡулымды үп - азат итермен", - тигәс, мосолман ир: "Беҙҙең динебеҙҙә ата-әсәнең һәм гүзәл солтандың ҡулын ғына үбергә ярай. Һин быларҙың береһенән дә түгел, шуның өсөн үпмәйем", - тип үҙ һүҙендә ныҡ тора икән. Падишаһ: "Улай булһа, маңлайымды үп", - тип ҡабатлағас, мосолман ир: "Ярай, маңлайыңды үбермен, ләкин һиңә бер шартым бар", - ти икән. Ҡыйсар: "Нисек ҡылһаң ҡыл, һинең ихтыярың", - тип ризалығын белдергән. Был ир Ҡыйсарҙың янына барған да, уның маңлайына итеген ҡуйып, шуны үпкән дә ҡуйған, ти. Был хәлдәрҙән һуң Ҡыйсар әлеге ирҙе һәм уның юлдаштарын азат итеп, бик күп мал биреп, илдәренә ҡайтарып ебәргән. Батша Ғүмәр хәҙрәткә тәғәйенләп хат та тотторған, имеш. Хатында: "Әгәр ҙә был ир беҙҙең вилайәтебеҙҙә йәшәгән булһа, уны ғибрәт ҡылынған зат урынына тотоп, уға ғибәҙәт ҡылырҙар ине", - тип яҙылған була.

Шулай итеп, Ислам динендә ныҡ тороусы был кеше, ҙур ихласлыҡ менән уны һаҡлауы сәбәпле, Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән әллә ни ҡәҙәр бәлә һәм яфаларҙан ҡотолған, ти.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЯБАЙ ТЕЛДЕ ФАЙҘАЛАН

Ябай итеп һөйләшергә өйрәнмәһәң, һин кешеләр менән аралаша алмаясаҡһың. Телмәрең балаға аңлашылмаһа, аралаша белеү һәләтлегеңдә ниндәйҙер кәмселек бар, тигән һүҙ. Һине кемдер аңламаһа, был уның аҡылһыҙ икәнлеген белдермәй. Дөрөҫөрәге, һин үҙ фекереңде асыҡ һәм ябай итеп сағылдыра алмағанһың. Ә бит аңлашылмаған телмәрҙе бер кем дә тыңлап тормаясаҡ. Шуға күрә, һөйләгәндәреңде аңлаһындар өсөн, кире бәйләнеш кеүек, үҙ-ара аңлашыуҙы көйләү ысулын ҡулланырға кәрәк. Әйтәйек, "Мин аңлайышлы итеп әйттемме?", "Һеҙ килешәһегеҙме?" йәки "Ә был мәсьәләлә һеҙҙең фекерегеҙ нисек?" тигән кеүегерәк һорауҙар бир. Был иҫкәртеү аралашыуҙы көйгә һалырға ярҙам итер.

Һәр кемгә үҙенең мөһимлеген тойоу оҡшай. Әңгәмәсеңә уның һүҙҙәре һиңә бик ныҡ тәьҫир итә икәнен һиҙҙерт. Иғтибарлап тыңла. Үҙең тураһында ни тиклем аҙыраҡ һөйләһәң, әңгәмәсең үҙ дәрәжәһен нығыраҡ тояасаҡ. Уның эше йәки тормошо һинең өсөн мауыҡтырғысыраҡ икәнен тойһон.

Тикшереүҙәрҙән күренеүенсә, әңгәмәсе һөйләгән һүҙҙәребеҙҙең 75 процентын ҡабул итмәй. Кеше үҙе теләгәнен генә ишетә. Белеүегеҙсә, ул күберәк үҙе тураһында ишетергә теләй. Әгәр уның менән уның маҡсаттарын, идеяларын, мәнфәғәттәрен, кисерештәрен һәм ынтылыштарын тикшерһәң, иғтибарын яулай аласаҡһың.

Дуҫтарыңа һәм коллегаларыңа ҡәҙер-хөрмәт менән ҡарап, асылда, уларҙы үҙҙәрен яратырға һәм аңларға өйрәтәһең. Иҫкәрмәң башҡаларҙа булмаған һыҙатына йәки сифатына ҡағылһа, һүҙҙең тәьҫире көсәйә. Әйтәйек, уның юморҙы аңлауын йәки яңы дуҫтар таба белеү сифаттарын билдәләп китә алаһың. Әңгәмәсеңдең башҡалар һиҙмәгән сифатын айырып күрһәтеп, һин уға "Мин һинә шәхес итеп ҡарайым", тигәнде аңлатаһың. Быны менән уға үҙе тураһында фекерен яҡшыртыу мөмкинлеге бирәһең. Башҡаларға үҙ баһаһын яҡшыртырға, үҙен иркен һәм тотороҡло итеп тойорға ярҙам итеп, һин уны үҙеңә ҡаратаһың.

Күҙәткәнегеҙ барҙыр: кешеләр бик һирәк йылмая. Ә ҡайһы берәүҙәр, тәьҫир ҡалдырырға маташып, йылмайыуын йә "тоҡандыра", йә "һүндерә". Әммә бындай ике йөҙләлөктө иғтибарлы кеше шунда уҡ һиҙә.

Ысын күңелдән йылмайыу - аралашыуҙың мөһим сараһы, сөнки ул тирә-йүндәгеләргә ыңғай йоғонто яһай. Йылмайып ҡарау һине күргәнгә шат булыуҙы белдерә. Һатыусылар һатып алыусыларға йылмайып ҡараһа, магазинда һатыу күләме 20 процентҡа арта. Әгәр һин йылмайырға күнекмәгәнһең икән, ошо мәлдән үк өйрәнә башла. Бынан һинең үҙеңдең күңелең күтәреләсәк. Йылмай, әммә эскерһеҙ йылмай.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 31 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.35 Пусть говорят. [16+]
21.00 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
22.05 Чемпионат мира по хоккею-2021. Сборная России - сборная Швеции. Прямой эфир из Латвии. В перерывах - программа "Время".
0.35 Вечерний Ургант. [16+]
1.15 Познер. [16+]
2.20 Д/ф "Последний сеанс". К 95-летию Мэрилин Монро. [16+]
3.05 Д/ф "Последний сеанс". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [0+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Том Сойер". [0+]**
**3.15 Спектакль "Кодаса, или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 1 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Вопрос на засыпку". К 70-летию Юрия Вяземского. [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15, 11.15 "Дети могут все!"**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 15.15, 18.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Телесеть "Тамыр". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Йырлы донъя Нурбостан". Концерт детского телеканала "Тамыр". [0+]**
**22.00 "Дети могут все!" [6+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Приключения Гекльберри Финна". [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Зятек". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 2 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Планета Земля. Увидимся завтра". [0+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 Автограф. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Пластик". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Ғилмияза". [12+]**
**4.45 Пофутболим? [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 3 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Сегодня вечером. [16+]
22.55 Большая игра. [16+]
23.55 Вечерний Ургант. [16+]
0.35 Д/ф "Мужчины не имеют шанса". К 80-летию Барбары Брыльской. [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря".**
**12.00 Счастливый час. [0+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Д/ф "Жизнь, отданная песне". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00, 4.30 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жмот". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час.**

## 4 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 3.25 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
23.05 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф "Последний сеанс". К 95-летию Мэрилин Монро. [16+]
1.40 Х/ф "Зуд седьмого года". [0+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Д/ф "Армагеддон". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Уцелевший". [16+]**
**2.30 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 5 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Х/ф "Таежный роман". [16+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.30 Х/ф Премьера. "Последствия". [18+]
1.25 Модный приговор. [6+]
2.15 Давай поженимся! [16+]
2.55 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башҡорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 80-летию образования Союза композиторов РБ посвящается... Концерт камерной музыки. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Афера века". [16+]**
**2.45 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Мой Бурзян". [12+]**

## 6 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Медсестра". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/ф "Игорь Николаев. "Я люблю тебя до слез". [16+]
15.45 Премьера. Большой праздничный концерт "Взрослые и дети". [6+]
17.45 Победитель. [12+]
19.15 Премьера. "Dance Революция". [12+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Т/с Премьера. "Налет-2". [16+]
0.00 Д/с "В поисках Дон Кихота". [18+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 Репортаж с вручения премии Ядгара Баширова в с.Мурапталово Куюргазинского района. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 "Финал V Спартакиады молодежи России-2021 по спортивной борьбе (дисциплина: греко-римская борьба)".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Д/ф "Человек земли". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Чарующие звуки кубыза". Юбилейный концерт народного артиста РБ, виртуоза-кубызиста Миндигафура Зайнетдинова. [12+]**
**19.00 "Радуга рулит". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**0.00, 4.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.30 Х/ф "Идеальный дворец Фердинанда Шеваля". [12+]**
**2.15 Спектакль "Скупой". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 июнь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 6+
**2 июнь "Гөлбостан"** (К. Даян, Д. Йосопов) 12+
**3 июнь "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 16.00 12+
**"Алтын асҡыс - remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 11.00 0+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 июнь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 0+
**"Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло), әкиәт. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 июнь "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 19.00 12+
**5 июнь "Слоненок"** (Р. Киплинг). 12.00, 14.00 0+
**6 июнь "Муха-цокотуха"** (И.Романов). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 июнь** БР Милли музыка ҡоралдары оркестрының хәйриә концерты. 6+
**3 июнь "Viva, классика"** Кесе залда 82-се ижад миҙгелен ябыуға концерт. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**1 июнь** Балаларҙы яҡлау көнөнә арнап, театр алдында тамаша. 11.15 0+
**"Утрау. Диңгеҙ. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), әкиәт. 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Май - Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (19) дүшәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 1 (20) шишәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 2 (21) шаршамбы | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |
| 3 (22) кесе йома | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 4 (23) йома | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 5 (24) шәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 6 (25) йәкшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# МИҘГЕЛ ДӘ ЯБЫЛДЫ...



**Театр - тормош көҙгөһө. Был йәһәттән Салауат башҡорт дәүләт драма театры коллективы арҙаҡлы шәхес Мостай Кәримдең "Театрҙың үҙ тамашасыһы, үҙ йөҙө һәм ижади ҡеүәте бар", тигән һүҙҙәренә тоғролоҡ һаҡлап, емешле ижад итергә тырыша. Быйыл да артистар уңышлы эшләп, өр-яңы спектаклдәр ҡуйыуға өлгәште, йыл дауамында республиканың ҡала-райондарында гастролдәрҙә лә булды.**

Эйе, 88-се миҙгел урынындағы мәҙәниәт усағы йылъяҙмаһына күп кенә сағыу биттәр яҙҙы. Уларҙың барыһы менән дә артистар театр миҙгелен ябыу кисәһендә тамашасы, йәмәғәтселек менән ихлас уртаҡлашты. Сәрүәр Суринаның был көнгә тәғәйенләнгән "Абау, димсе килә!" спектакленән һуң театрҙың директор вазифаһын башҡарыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошов коллективты тәбрикләп, ҡотлау һүҙҙәре еткерҙе. Ул актерҙар Радик Ғәлиуллин, Әмир Үтәбаев, Гөлфинә һәм Ринат Ибәтуллиндарға, баш режиссер Лиана Ниғмәтуллинаға, яҡтыртыу цехы мөдире Нәфис Сафиуллинға, әҙәбиәт бүлеге мөдире Динә Бәшироваға Мәҙәниәт министрлығының Маҡтау ҡағыҙҙарын тапшырҙы.

Театрыбыҙҙа йыл да коллективтың иң емешле эшләгән ағзаларын тамашасылар ярҙамында һайлап, тағы ла юғары ижади уңыштарға әтәреп, дәртләндереп, төрлө конкурс-һайлауҙар уҙғарыу матур йолаға әүерелгән. Быйыл "Театр йондоҙо" номинацияһында Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Нәүфилә Яҡупова "Бәйләнештә" социаль селтәрендә мендән ашыу тауыш йыйып, тамашасы һөйөүенә лайыҡ булды. Уға "LOFT" фотостудияһына сертификат тапшырылды. Әлбиттә, был сараның иң тулҡынландырғыс, һәр актер көтөп алған минуттары - 1993 йылдан театрҙың үҙенсәлеге һаналған "Йыл актеры" премияһының сираттағы еңеүсеһен иғлан итер мәл. 88-се ижад миҙгелендә иң емешле эшләүсе тип артисыбыҙ Рәмзиә Мәҡсүтова танылды.

Салауат башҡорт дәүләт драма театры өсөн 88-се ижад миҙгеле, ғөмүмән, бик емешле булды. Режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев ҡуйыуында Олжас Жанайдаровтың "Бер, ике, өс" спектакле миҙгел башында Мәскәүҙә үткән "Артмиграция" йәш режиссерҙар фестивалендә ҡатнашты. Ошо көндәрҙә был спектакль Татарстандың Яр Саллы ҡалаһында уҙасаҡ XVIII "Рәсәйҙең бәләкәй ҡала театрҙары" фестивалендә лә юлланасаҡ. Яныраҡ театр эргәһендә эшләп килгән "Арлекин" өлгөлө балалар студияһы М.Кәримдең "Өс таған" спектакле менән "Алтын асҡыс" Берлин халыҡ-ара асыҡ онлайн-конкурсында Гран-при яуланы, ә Вәзирҙе уйнаған Алан Шамёнов "Иң яҡшы ир-егет ролен башҡарыусы" номинацияһында еңеүсе тип танылды. Спектаклдең режиссеры - Радик Ғәлиуллин.

**Динә БӘШИРОВА.**

# ҠУРАЙСЫЛАР ЯРЫШТЫ

**Ошо көндәрҙә Октябрьский ҡалаһында Ғата Сөләймәнов исемендәге республика Ҡурай байрамы уҙғарылды. Быйыл унда Башҡортостандан, Ырымбур, Силәбе һәм Түбән өлкәләренән 300-ҙән ашыу кеше маһирлыҡҡа сәмле бәйге тотто.**

Ҡурайҙа уйнай белеү оҫталығын айырым сығыш яһаусылар ҙа, ансамблдәр ҙә ике йәш категорияһында: 16 йәшкә тиклемгеләр һәм 16 йәштә уҙғандарға бүленеп күрһәтте. Баһалама ағзалары 82 солист һәм 23 ижади коллективтың сығышын тыңланы. Һөҙөмтәлә Өфө ҡалаһынан Айрат Ҡарасов конкурстың Гран-приһына лайыҡ булды. Ҡурайсы Салауат музыка колледжын тамамлаған, быға тиклем дә төрлө кимәлдәге һөнәри еңеүҙәргә өлгәшкән. Ә бына сараның беренсе урынын үҙ номинацияларында Белорет ҡалаһынан "Инеш" ҡурайсылар ансамбле, К.А. Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжының ҡурайсылар ансамбле, Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжының "Яйыҡ" халыҡ ҡурай ансамбле яуланы. Айырым башҡарыусылар араһында Силәбе өлкәһенән Алмаз Бикмәтов, Туймазы ҡалаһының "Балалар музыка мәктәбе" өҫтәмә белем биреү учреждениеһынан Радмир Ғүмәров, Стәрлетамаҡ театр-концерт берекмәһенән Динар Абдуллин һәм Учалы ҡалаһынан Арсен Килмөхәмәтов беренсе урын алды. Шулай уҡ икенсе һәм өсөнсө урын лауреаттары ла билдәләнде. Әйткәндәй, Октябрьский ҡалаһынан ете йәшлек Нелли Антанайтис Ҡурай байрамының иң йәш ҡатнашыусыһы булһа, иң олоһо Сибай ҡалаһынан Шайморат Йәнбәков булды.

"Егеменсе Ҡурай байрамы ҡалабыҙға 75 йыл тулған мәлдә уҙғарылыуы айырым бер мәғәнәгә эйә. Беҙ һәр ваҡыт ҡунаҡтарҙы, конкурсыбыҙҙа ҡатнашыусыларҙы ихлас ҡаршы алабыҙ", - тип билдәләне сараны ябыу тантанаһында Октябрьский ҡалаһы хакимиәте башлығы Алексей Шмелев һәм барыһына ла рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы исеменән министр урынбаҫары Рәнис Алтынбаев тәбрикләне һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исеменән дә сәләм һүҙҙәрен еткерҙе.

# ӘБЙӘЛИЛДӘР ҺЫНАТМАНЫ

**Ошо көндәрҙә Әбйәлил районында "Шәжәрә" Бөтә Рәсәй мәҙәни-ағартыу проекты сиктәрендә Урал арьяғы башҡорттарының "Комартҡы" этник мәҙәниәт форумына йомғаҡ яһалды.**

Сара шәжәрә традицияларын һәм халыҡ ижады жанрҙарын, шул иҫәптән халыҡ һәм йола уйындарын, биҙәү-ҡулланма сәнғәтен һәм кәсептәрҙе популярлаштырыуға һәм һаҡлауға йүнәлтелгәйне. Унда 18 йәштән 45 йәшкә тиклемге йәштәр, ғаиләләр, ижади коллективтар, фольклорсылар, этнографтар, тарихсылар, күренекле мәҙәниәт һәм спорт эшмәкәрҙәре, Рәсәй төбәктәренән башҡорт диаспораһы вәкилдәре, традицион фольклорҙы өйрәнеүсе студенттар ҡатнашты. Улар өсөн Әбйәлил буҙаһы, бишбармаҡ кеүек милли аш-һыу әҙерләү, кейеҙ баҫыу, шәл бәйләү, ағастан әйберҙәр эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, төрлө күргәҙмәләр ойошторолдо. Шулай уҡ форум сиктәрендә "Урал арьяғы башҡорттары" ғилми-ғәмәли конференцияһы ла үтте һәм унда Зөлфәр Ғәтиәтуллин "Башҡортостан Республикаһының Милли архивының генетик сығанаҡтары" доклады менән сығыш яһаны. Форумсылар үҙ һөнәренең оҫтаһы булған башҡа спикерҙар менән дә аралашты.

"Комартҡы" форумында "Быуын сылбыры" конкурсы еңеүселәре лә тәбрикләнде. Был ярышта Гран-приға Аҫҡар ауылынан Гөлйәҙәм Ғөбәйҙуллина лайыҡ булды һәм уға 50 мең һумға ағас һатып алыуға сертификат тапшырылды. Беренсе урынды Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан Эльмира Өмөтбаева, икенсене - Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Инзирә Ишморатова менән Өфө ҡалаһынан Рәшиҙә Абдуллина алды. Ә бына өсөнсө урынға Күсемдән Гүзәл Билалова менән Зөлфирә Моратшина-Ҡарағужина, Тал-Ҡуҫҡарынан Ләйсән Хажина-Насыйрйәнова сыҡты. "Өмөт" номинацияһында ла әбйәлилдәр һынатманы: Яңы Балапан ауылынан Нәркәс Фәйезова-Солтанова һәм Әбделғәзе ауылынан Алһыу Таһирова еңеү яуланы.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ЦИКОРИЙ



**Бөтә илдәрҙә тиерлек, цикорий кешене күҙгә күренмәй торған итә, тигән ышаныу йәшәгән. Бының нимәгә бәйле булыуын аңлатыуы ауыр. Тағы ла цикорий тамырын 25 июль ҡаҙып алып, таяҡ башына бәйләһәң, ул ауыр юлда бысаҡ һәм пулянан һаҡлай, тип тә ышанғандар.**

Цикорий беҙгә кофены алыштырыусы булараҡ билдәле. Әйткәндәй, көн һайын иртәнсәк бер шәшке цикорийға бал һәм лимон ҡушып эскәндә, гипертония ауырыуы (ҡан баҫымының күтәрелеүе) үҫешмәйәсәк.

Халыҡта цикорий тамыры бешкән һыуҙы һәм үләненән яһалған төнәтмәне хәл бөткәндә, һары ауырыуы һәм гепатит, үт ҡыуығында таш ауырыуы, ашҡаҙан һәм бөйән яҙваһы, аллергия, экзема, һыҙлауыҡ баҫыу, талаҡ ҙурайғанда, нефрит һәм бөйөрҙөң башҡа төр ауырыуҙарынан, бәүелдә тота алмағанда ҡулланалар. Цикорий сәскәһенең төнәтмәһе үҙәк нервы системаһын тынысландыра, йөрәк эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, уның ритмын яйлата.

Үләндең яңы әҙерләнгән төнәтмәһе һәм тамырҙары бешерелгән һыу ҡандағы шәкәр кимәлен төшөрә, был үҙ сиратында еңел һәм уртаса ауырлыҡтағы шәкәр диабетын дауалауҙа бик файҙалы. Бынан тыш, цикорий ҡалҡан биҙе гормондары бүленеп сығыуын баҫа.

**Цирроз һәм бауырҙың башҡа төр ауырыуҙары.** Тотош үҫемлекте ваҡларға: тамырын, һабағын, япрағын. 2 ҡалаҡ әҙерләмәгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға һәм утын һүндергәндән һуң 2 ҡалаҡ бал, 1 балғалаҡ емеш-еләк һеркәһен ҡушырға. Ҡайнатманы эсә көйөнсә эсергә.

**Туберкулез.** 2 ҡалаҡ цикорий тамырына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә. Оҙайлы дауаланыу инфильтраттарҙы бөтөрә, упкаҙың барлыҡҡа килеүенә ҡамасау яһай.

**Экзема.** 2 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу иҫәбен тотоп әҙерләргә. 15-20 минут төнәтергә. Һығып алынған үләнде аҙағынан ҡыҙыл эҙ ҡалдырып, таптар юҡҡа сыҡҡансы ауырыған ергә баҫырға.

**Талаҡ шеше, бауыр циррозы, һары ауырыуы, ашҡаҙан ауыртҡанда.** Тотош үҫемлекте ваҡларға, шунан 40 грамына 1 литр һыуыҡ һыу ҡойорға һәм ҡайнар хәлгә еткергәс, тағы 15 минут талғын утта тоторға. 1 сәғәт төнәткәс, һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

Цикорийҙы ҡулланыуҙа ҡәтғи тыйыуҙар юҡ. Шулай ҙа ҡуҙғыусанлыҡ һәм ҡаты йүтәл, ныҡ ашағы килеү кеүек өҫтәмә билдәләр барлыҡҡа килергә мөмкин. Быны тулы кешеләр һәм һимереү менән яфаланыусылар иҫтән сығармаҫҡа тейеш.

БАҠСА

# ҠАРАҒАТ



**Ҡарағаттың бөгөнгө иң яҡшы төрҙәре лә короткос күбәләк (огневка), кебләә, быяла күбәләге кеүек короткостарҙан зыян күрә. Был короткастарға ҡаршы тора алырлыҡ сорттар әлегә юҡ. Шуға химик матдәләр ҡатыштырмай әҙерләнгән ысулдарҙы тағы бер ҡат күҙҙән үткәрәйек.**

Кеблә төшөүен асыҡлағас та, йәш ботаҡтарҙың осона һабын йә кер онтағы иҙелгән һыу һибергә, йәки бер нисә тапҡыр тығып алырға кәрәк. Шулай уҡ бер биҙрә һыуға 300 грамм ағас көлө һалып ҡайнатылған һыу ҙа был ысулды алыштыра ала.

Апрель айында уҡ, ҡарағат бөрө ярмаҫ борон, ҡыуаҡ төбөнә серетмә, бысҡы онтағы, мүктең ҡатлын ҡатламын йәйергә йәки полиэтилен кеүек тукыма булмаған материалды түнәрәк итеп ҡырҡып, йәйеп һалырға кәрәк. Был осраҡта короскостоң ҡарышлаусыҡтары өҫкә сыға алмай, үлә.

Һабаҡтарҙы эстән ашаған быяла күбәләген бөтөрөүе тәү ҡарамаҡҡа ғына ауыр. Ботаҡтарҙың ҡороған остары буйынса уның юлын табыуы еңел. Тап бына шундай остары ҡороп сыҡҡан ботаҡтарҙы, бер ниндәй һабағын да торғоҙоп ҡалдырмай, ҡыуаҡтың төбөнән алып ҡырҡып ташларға кәрәк. Әйткәндәй, биш йыл йәки унан да күберәк үҫкән бөтә ботаҡтарҙы ла шулай ҡырҡып алып тороу файҙалы.

**Ҡарағат ҡыуағын был рәүешле гел ҡарап, тәрбиәләп тороуы мәшәҡәтле тойолһа ла, үҙен аҡлай. Ғөмүмән алғанда, ҡуйы япраҡ ярған һәм таралып үҫкән ҡыуаҡтар төрлө ауырыуҙарға биреше бармауын хәтерҙә тоторға кәрәк. Тимәк, ҡоро көндәрҙә уларҙы туйындырғансы һыу ҡойорға, ә майҙан июль айына тиклем ваҡыты-ваҡыты менән комплекслы минераль һәм органик ашламалар, ағас көлө, йә кесерткән менән бәпембәнең көсһөҙ иретмәһен биреп тороу яҡшы.**

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Әбйәлил районы** Ҡужан ауылынан Гәйфулла Хәйруллин, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Эльвира Сөләймәнова, Әткөл ауылынан Лилиә Шәрәфетдинова, Урман-Бишҡаҙаҡ ауылынан Рәйсә Ғәлина, Нурғәли Ғәлин, **Дүртөйлө районы** Гәбләкәсәк ауылынан Ләйсән Садыҡова, **Мәләүез ҡалаһынан** Рафаил Сибәғәтуллин, **Дүртөйлө ҡалаһынан** Рита Ғабдрахманова, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Люциә Исхаҡова, **Күгәрсен районы** Аҙнағол ауылынан Разия Сәлихова, **Учалы районы** Сораман ауылынан Зөбәйҙә Ҡәләмова, **Сибай ҡалаһынан** Регина Иҫәнбаева, Минзилә Ҡотошева, Вильмир Маннапов, Рәмил Туйсин, Илнар Хәтмуллин, Алмас Хәсәнов, Айгиз Йомағужин, Зәбирә Әминева, Альбина Байназарова, Аделина Ғәйфуллина, Радик Далхин, Зинира Заманова, Гөлфиә Кәримова, Хәснә Мирасбаева, Әлиә Нурмөхәмәтова, Луиза Нурбахтина, Зәриә Рысмөхәмәтова, Әлиә Сәлихова, Фәһим Сәнәғәтов, Лариса Хәтмуллина, Фидан Шәйәхмәтов, Наил Шәмсетдинов, Айҙар Йосопов һәм башҡаларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, ғаилә бәхете, ҡыуаныс-шатлыҡтар теләйбеҙ. Йөрәгегеҙҙә юлығыҙ уңһын, һөйләгәндә һүҙегеҙ үтһен, изгелектәр генә насип булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

✓ *Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.*

*(Франсуа Мориаҡ).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЩЕПКИНСЫ ЙӘШТӘР...

## сәхнәне яуларға әҙерләнә

**Рәсәй дәүләт Бәләкәй академия театры янындағы М.С. Щепкин исемендәге Юғары театраль училищеһы (институт) Рәсәйҙең милли театрҙары сәнғәтен үҫтереүгә тос өлөш индереүҙе дауам итә. 1955 йылдан бөгөнгө көнгә тиклем унда тажик, төркмән, татар, таулы-алтай, сыуаш, немец, корея, яҡут һәм шул иҫәптән башҡорт студенттары белем ала. 2017 йылда ошо уҡыу йортонда беҙҙең республиканан 18 студент уҡый башлағайны, бөгөнгө көндә уҡыу йортон 15 кеше уңышлы тамамлай. Һәм тап ошо мәлдә щепкинсылар М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә диплом спектаклдәре менән һынау тота.**



Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты Фирүзә Сәлихйән ҡыҙы Исҡужина щепкинсыларҙың кураторы булған, уларҙы башҡорт теленән уҡытҡан. Уның һөйләүенсә, булаСаҡ артистар баш ҡалалағы дүрт йылды бик файҙалы үткәрә, даны донъяға таралған Ҙур театрҙа, Бәләкәй театрҙа спектаклдәр ҡарап, музейҙарға йөрөп, күргәҙмәләрҙә булып, белемдәрен арттыра. Үҙҙәре лә А.А. Яблочкина исемендәге Актерҙар йортонда үткән кисәләрҙә, башҡа сараларҙа әүҙем ҡатнашып, оло сәхнәгә тәүге аҙымдарын яһай.

***Фирүзә Сәлихйән ҡыҙы студенттары менән Өфөләге тамашаларҙа ла гел бергә, уларҙың һәр уңышын күрмәләп, беренсе рәттә ултыра. Һәм эшен һөйгән уҡытыусы булараҡ, тәрбиәләнеүселәре хаҡында илһамланып һөйләй:*** Уҡыу барышында йәштәр үҙҙәрен төрлө яҡлап асты. Мәсәлән, Илүзә Мерәсова монло тауышы, Айнур Ғәбитов - йор һүҙе менән һоҡландырҙы, Эльвира Йәрмөхәмәтова башҡорт милли костюмдары күргәҙмәләрендә ҡатнашты. "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосын һөйләп, Ҡырымда уҙғарылған Бөтә Рәсәй "Таврида" йәштәр форумында булып, Калуга өлкәһендә үткән "Этномир" фестивалендә сығыш яһап, диплом яуланылар. Бынан тыш, сәхнә телмәре, вокал буйынса конкурстарҙа ла һынатманылар. Әбйәлил Үтәбаев, Илүзә Мерәсова, Елизавета Алексеева, Илнур Үтәбаевтар, У. Гаджибековтың "Аршин мал алан" музыкаль спектакленән өҙөк күрһәтеп, Рәсәйҙең театраль вуздары араһында ойошторолған вокал конкурсында беренсе дәрәжә дипломға эйә булдылар. Лилиә Сәғитова сәхнә телмәре буйынса студенттарҙың М.Н. Ермолова исемендәге конкурсында III урын яуланы.

***Сығыштар араһында бөгөн-иртәгә артист булып китәһе студенттар менән күрешеп-һөйләшеп тә алдыҡ. Яңы ғына сәхнәлә онотолоп Мостай Кәримдең Аҡйондоҙо менән Мәрһәменең урап урып ярышҡанын бәйән иткән Лилиә Сәғитова Өфө ҡалаһының Дим биҫтәһе ҡыҙы булып сыҡты. Ул 102-се Башҡорт гимназияһын тамамлап, Башҡорт дәүләт педагогия университеты колледжында музыка уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштергән. Унан артабан белемен үҫтереү өсөн Щепкин училищеһына һынау тотоп ҡараған.***

Сығарылыш курс студенттары булараҡ, "Коштар осорам" тип исемләнгән класс-концерт һәм диплом спектаклдәре менән үҙебеҙҙең Өфөбеҙҙә сығыш яһаныҡ. Гастролдәр 12 майҙан 22 майға тиклем дауам итте, - тип һөйләй йәш актриса. - Сығыштарыбыҙҙы А.Н. Островскийҙың "Байрам төшө - төшкә тиклем" һәм "Эҙләгән - тапҡан" пьесалары буйынса ҡуйылған "Бәхет эҙләгәндә" спектакле менән башлап ебәрҙек. Спектаклдең режиссеры Тажикстандың атҡаҙанған артисы, профессор Л.Н. Новикова, тексты башҡортсаға тәржемә итеүсе - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, доцент Ф. Исҡужина. Башҡорт мөхитенә кҫерелеп тәржемә ителгән был спектаклде тамашасылар йылы ҡабул итте...

***Башҡорт труппаһы студенты Әбйәлил Үтәбаев та М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы булырға хыялланa. Ул сәнғәт юлын бик ентекләп үйлап һайлаған:*** Мин баш ҡаланың Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында уҡыным. Мәктәптән һуң Санкт-Петербург урман-техник университетын тамамлап, Белорет урмансылығында эшләп алһам да, сәнғәткә тартылдым. Был ихтыяжымды ҡәнәғәтләндереү өсөн урындағы "Ирәмәл" халыҡ театрында шөғөлләнә башланым, концерттарҙа ҡатнаштым, ансамблдә йөрөнөм. Унан атай-әсәй менән кәңәшләшеп, күңелем телгән юлға фатиха алдым. Һәм, ысынлап та, был - минең донъя. Уҡыу ҙа еңел бирелә, илһамландыра, төрлө сәнғәт әһелдәре, уҡытыусылары менән осрашыуҙар, дәрестәр, театрҙар... рәхәтләнеп йөҙөп йөрөйөм.

"Мәскәү Мәскәү инде... унда аура башҡа төрлө", - ти Әбйәлил. Йәш актер һөйләүенсә, улар легендар профессорҙар Д.Д. Кознов, Л.Н. Новикова, В.Н. Афонин, доценттар Д.Н. Зеничев, Б.В. Домниндарҙың ҡулында һабаҡ алған, үҙҙәрен төрлө ролдәрҙә һынап ҡараған. Ғүмерен студенттарҙы сәхнә телмәренә өйрәтеүгә бағышлаған профессор Л.С. Максимова ярҙамында тауыш менән идара итергә, дикция өҫтөндә эшләргә, төрлө жанрҙағы текстарҙы уҡырға һәм уны тыңлаусыға еткерергә өйрәнгәндәр. Ҡыҫҡаһы, йәштәр уҡытыусыларынан да, уҡыуҙарынан да ҡәнәғәт.

Һынауҙарҙың артабанғы көндәрендә А.П. Чеховтың өс бер актлы пьесаларын ("Юбилей", "Айыу", "Тәҡдим") берләштергән "Шампан шарабы килтерегеҙ!" спектакле башҡорт һәм рус телдәрендә уйнала. Спектаклдең режиссеры - Удмуртияның атҡаҙанған артисы, профессор В.Н. Афонин. Америка яҙыусыһы Л. Герштың "Был ирекле күбәләктәр" спектакле режиссер доцент Д.Н. Зеничев тарафынан ҡуйылған. Был да Өфө тамашасыһы өсөн бер ҡыҙыҡлы күренеш. Унан һәләтле йәш артистар үҙҙәренең концертында Башҡортостандың Халыҡ шағиры М.Кәрим шиғырҙарынан төҙөлгән музыкаль-композиция, халыҡ уйындары, төрлө йырҙар, бейеүҙәр, заман хореографияһы һәм фехтование буйынса өҙөктәр күрһәтте. Класс-концерттың режиссеры - Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы, профессор Д.Д. Кознов һәм доцент Б.В. Домнин.

***Һөйләшеүҙе тамамлап, Фирүзә Сәлихйән ҡыҙы телләктәрен дә еткерҙе:*** Йәштәрҙең киләсәген хәстәрләгән Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә, мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡоваға, дүрт йыл дауамында беҙҙең менән бергә янған-көйгән, хәстәрләгән М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры Иршат Ишбулат улы Фәйзуллинға ата-әсәләр, студенттар һәм үҙебеҙҙең исемдән дә оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.

Республикабыҙҙың маҡсатлы йүнәлеше буйынса белем алған башҡорт студияһының сығарылыш курсы студенттары мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереүгә тырышып хеҙмәт итер, киләсәктә юғары үрҙәр яулар, тип ышанайыҡ.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮП ӘРЛӘМӘ - ӘРҺЕҘ ИТЕРҺЕҢ,

## бикләмә - уғры итерһең

Элек ҡайһы берәүҙәр мемуарҙар яҙып, йәшәү өсөн аҡса эшләгән. Хәҙер иһә мемуарҙар яҙып баҫтырыу менән янап, тағы ла күберәк аҡса эшләүселәр бар.

**(Питер Устинов).**

Үс алыу - ул үҙеңде тешләгән этте тешләү менән бер.

**(Остин О'Малли).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Франсуа Мориаҡ).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡуян ағастан-ағасҡа бик етеҙ һикереүсе тейенде осрата ла, һорай ҡуя:**

**- Бер нисек тә аңламайым - һин ҡошмо, йәнлекме?**

**- Ҡош та, йәнлек тә, бер аҙ ғына балыҡ та мин, - тип ғорурланып яуап бирә тейен. - Сөнки мин йәнлектәр ҙә, ҡоштар ҙа, балыҡтар ҙа эшләгәндең барыһын да эшләй беләм: осам, йүгерәм, йөҙәм. Ә һин үҙең ни эшләй беләһең?**

**- Мин йүгерә генә беләм шул... - тип күңелһеҙ генә яуаплаған ҡуян.**

**- Нисек инде, башҡа бер ни ҙә эшләй белмәйһеңме ни? - тип аптырап һораған тейен.**

**- Белмәйем шул, - тигән ҡуян ояльп ҡына. Шунан дауам иткән:**

**- Ә һин миңә йүгереп күрһәтмәҫеңме?**

**- Ҡара һуң! - тигән тейен һәм үләндә ауатүнә атлап маташҡан.**

**- Ә һин нисек осаһың?- тип ҡыҙыҡһынған бер ҡатлы ҡуян.**

**- Ҡара һуң!- тип, тейен бер ҡыуаҡлыҡтан икенсеһенә һикергән һәм ҡолап төшкән.**

**- Бәлки, һин миңә нисек йөҙөүеңде һәм ағас буйлап үрмәләүеңде лә күрһәтерһең?- тигән ҡуян.**

**- Рәхим ит! - тигән тейен һәм йылғаға төшөп, ҡойроғо менән һелтәнергә тотонған. Ләкин йылға тулҡыны уны шунда уҡ ярға ырғытҡан. Шунан тейен ағас буйлап үрмәләргә маташҡан, ләкин уның да тәүге ботағына тиклем ғына барып еткән.**

**- Шунан, һин барыһын да күрҙеңме инде? - тигән бик тәкәббер генә итеп тейен. - Мин ҡош та, кейек тә, балыҡ та! Ә һин, бахырҡай, йүгерә генә беләһең.**

**Шулай тигән дә тейен, башын ғорур күтәреп, ҡуян янынан китеп барған. Ҡуян янғыҙы тороп ҡалғас, шулай уйлаған: "Ә күп эш белеп, уны насар башҡарыуға ҡарағанда, бер генә эште белеп, уны һәйбәт башҡарыу яҡшыраҡ бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирҙәр:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 349/05